ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискэ Өфө

22-28 февраль (шаҡай) 2020

№8 (894)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Егеттәр, һеҙгә әйтәм...**
ә ҡыҙҙар тыңлап торһон



3

**Атаңдың ғына улы булма...**



6

**Көсләп асҡан күҙҙең...**
яҡтыһы булмай



8

**Баһалау һәм...**
бурысыбыҙҙы ҡайтарыу булыр был



11

**ТВ-программа** 14

***Дошмандарың күберәк булыуын теләһәң, дуҫтарыңды бар нәмәлә уҙып кит. Әгәр ҙә дуҫтарың күп булыуын теләһәң, дуҫтарыңа һине уҙып китергә ирек бир.***

***(Ф. Ларошфуко).***

23 февраль

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Халҡым теле миңә - хаҡлыҡ теле, унан башҡа минең илем юҡ" тигән хәҡиҡәтте балаларығыҙ һәм ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ күңеленә нисек һеңдерәһегеҙ?

***Зәки ӘЛИБАЕВ, Башҡортостан Яҙыусылар берлеге идараһы рәйесе, филология фәндәре кандидаты, М.Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты, БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты:***

Өр-яңы хәҡиҡәт асырға йыйынмай, дәүләттең дә, йәмғиәттең дә нигеҙе - ғаилә, тип ҡабатларға яратам. Боронғо грек фәйләсуфтарының хеҙмәттәрендә лә күп тапҡыр телгә алына был. Ләкин бөгөнгө ғаилә - ябай ғына кешеләрҙең социаль кимәлдәге мөнәсәбәттәре түгел, ә рухи нигеҙҙәге тамырҙар, тип ҡарарға кәрәк. Тап ошо йүнәлештә ғәмәлдәр сәңгелдәктән башлана. Миңә ҡалһа, һуҡмаҡтың башы - туған тел. Әсәйҙәрҙең талғын ғына сәңгелдәк йырынан, телебеҙҙең моңло өндәренән, айырым һүҙҙәрҙән баланың донъяны танып белеүе башлана. Ошо мәңгелек традиция кешенең аңын формалаштырыуға булышлыҡ итә. Беҙҙең атай-әсәйҙәрҙә ул ҡандан-ҡанға күсә килгән. Шуға ла борон халҡыбыҙҙа ҡанбабаларҙың роле әйтеп бөткөһөҙ булған. Ә бөгөн ғаилә ҡиммәттәре һаҡланамы һуң? Уларҙы һаҡлау өсөн ниндәй шарттар кәрәк? Мине генә түгел, ә башҡаларҙы ла ошо ябай һорау бик борсой. Ябай ғына миҫалдар аша һорауҙарға үҙ ҡарашымды, үҙ яуабымды биреп ҡарайым.

Беҙҙең ғаилә ҡалала барлыҡҡа килде. Балалар үҫкән саҡта милли балалар баҡсалары юҡ ине. Иң мөһиме, балаларҙың теле асылғанға тиклем әсәләре декрет ялында ултырҙы. Тел асылған саҡта бигерәк тә иғтибарлы булырға кәрәк, шуға ла әсәйҙәрҙең тел нескәлектәрен дә белеүе мөһим. Һөйләшә башлағанға тиклем тик башҡортса ғына өндәшеп, һүҙ байлығын байытаһың. Беҙҙең Риф менән Сәғит, Әҙилә үҫкән саҡта әллә ни мәшәҡәт булманы, сөнки олатай-өләсәйҙәр иҫәндәр ине әле. Йәй буйы ауылда булып, уларҙың тел байлыҡтарын үҙләштереп, телмәрҙәрен нығытып алалар ине. Башҡорт теленең бар нескәлектәрен олатай-өләсәйҙәр һеңдерҙе. Ә бына Арыҫланға ундай бәхет теймәне. Ололарыбыҙ баҡыйлыҡҡа күскәйне. Ниңәлер теле лә һуң сыҡты, балалар баҡсаһына барғас, тик рус телендә генә теле асылды. Өйҙә башҡортса һөйләшһәк тә, беҙгә рус телендә генә яуап бирә. Ни эшләргә? Ниндәй генә саралар ҡулланманыҡ, файҙаһыҙ. 1-се класҡа үҙебеҙҙең Фатима Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт гимназияһына бирҙек. Класта башҡортса иркен аралашҡан малайҙар күп ине. Салауат менән ныҡлап дуҫлашып китте. Ул башҡортса яҡшы белә ине. Бер ай самаһы уҡығас, мәктәптән Арыҫлан менән ҡайтып киләбеҙ, ул: "Атай, туңдырма алып бир әле", - ти. Күтәреп алдым да, Үҙәк баҙарға туңдырма алырға йүгерҙек. Аллаға шөкөр, хәҙер ул бик матур итеп башҡортса һөйләшә. Мөхит барыбер үҙенекен итте. Бына ни өсөн кәрәк башҡорт мәктәптәре! Ғөмүмән, балаларыбыҙ башҡортса иркен аралаша. Оло улым тарихи, милли мәсьәләләргә бик етди ҡарай. Үткән йыл күптәнге хыялын тормошҡа ашырҙы: Өфө ҡалаһының Ленин урамы башынан алып аҙағына тиклем еңел машинаның люгынан сығып, милли кейемдә ҡурай уйнап төшкән видеоһы социаль селтәрҙәрҙә оҙаҡ йөрөнө. Йәки, үҙ еренең хужаһы баш ҡаланың төп урамында шулай йөрөргә тейеш. Ейәнсәребеҙ Камиланың да теле асылып бара. Күберәк өләсәһе менән ялдарын үткәрә. Ул артабан нисек, кем булып үҫеп етер? Уға ҡарап, үҙебеҙгә баһа ҡуябыҙ инде. "Себеште көҙ һанайҙар" ти бит халҡым - ваҡыт күрһәтер.

**(Дауамы 2-се биттә).**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН

# ҺАЛДАТ БУЛЫУ...

## һәр малайҙың хыялында!

**Әрменән ҡайтып, әле һалдат кейемен сисеп өлгөрмәгән яҡташ егеттәрҙе күрһәм, йәш саҡтарымды иҫкә төшөрөп, улар менән бер аҙ һөйләшеп тә алғы килә башлай. Бөтөнләй таныш булмаһа ла, яҡын туғаным һымаҡ күрәм уларҙы. "Һалдат улым, һаумы! Армиянан ҡайтып киләһеңме?.." тип килеп күрешәм башта. Табип халҡын әрмелә барса һалдат та хөрмәт иткәнен белгәнгә күрә, үҙемдең отставкалағы хәрби табип икәнемде, званиемды ла әйтеп таныштырам. Яғаһындағы эмблемаһына ҡарап, ниндәй төр ғәскәр вәкиле икәненә төшөнөп, шул хаҡта һорашып алам. Хәҙер әрмелә нисек ашатыуҙары хаҡында ла ҡыҙыҡһынам, әлбиттә. "Бабайлыҡ" тураһында ла белешке килә. "Әрмегә барғаныңа үкенмәйһеңме?" тигән һорау ҙа биргеләйем. Махсус хәбәрсе булмауыма ҡарамаҫтан, әңгәмәбеҙ бәләкәй генә бер интервью һымағыраҡ килеп сыға.**

**(Дауамы 16-сы биттә).**



12+

## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕР-БЕРЕБЕҘҘЕ ҠӘҘЕРЛӘЙЕК!

***Рауил ҒӘЛИН, Башҡортостандың халыҡ артисы:*** Ғаилә - милләт тотҡаһы, ти торғайнылар элек. Бына шуға ла ғаилә ҡороусы йәштәргә бер нисә һүҙемде әйтмәксе булдым әле. Йәшәйешебеҙ өсөн бөгөн бөтөн шарттар, мөмкинлектәр бар, тик кешелекле булыу, туғанлыҡ ептәрен нығытыу, бер-береңде хөрмәт итеү кәрәк. Бына беҙ тормош иптәшем менән 50 йыл иңгә-иң терәшеп ғүмер юлын һүтеп барабыҙ. Ғаилә нигеҙе - мөхәббәт, ә ул бер-береңде хөрмәт иткәндә генә мәңгелеккә һаҡлана. Ғаилә усағы ҡорғандан һуң мөхәббәт бер-береңә ихтирамға әүерелһә, атай-әсәй булғас, әсәйлекте, атайлыҡты хөрмәт итһәң, дуҫлыҡ барлыҡҡа килә. Ғаилә ныҡлығы бер-береңде балаларыңа үрнәк итеп ҡуя белеүҙән тора. Һәр бер нәмәгә үсегеп, һәр нәмәне күңелгә яҡын алыуҙан үс ҡабара ғына, бәләкәй генә яңылышлыҡ та ҙурға китеүе бар. Ҡайһы саҡта юҡҡа ғына үпкәләйбеҙ ҙә, ҙур фажиғә сығарабыҙ, ғаиләләрҙе тарҡатыуға тиклем барып етәбеҙ. Ваҡытында тормош иптәшеңдән тартынмайынса ғәфү үтенә һәм кисерә лә белергә кәрәк. Бына шулай тормошта.

Хәҙер шундай шәп темп менән йәшәйбеҙ, Ер шары ла элеккегә ҡарағанда шәберәк әйләнә, имеш, тиҙәр. Ғүмер тиҙ генә үтә лә китә, шул арауыҡты лайыҡлы үтеү мөһим. Беҙҙе бит хәҙер аҡса ла ҡыҙыҡһындырмай, дәрәжә лә - уларҙың ҡәҙере киткән инде беҙҙең өсөн. Әммә бер-береңде ҡәҙерләүҙән дә ҡиммәтле тойғо юҡ икәнен яҡшы беләбеҙ. Тик шуны аңламай, тормошҡа еңелсә ҡарап, балаларҙы ла еңел-елпе итеп үҫтереү ғәҙәти күренешкә әйләнеп китте. Беҙҙең быуын кешеләре ололарға баш һалып сәләм бирә, уҡытыусыны күрһә, оялып, хөрмәт итеп тора инек. Бөгөн сит кешегә түгел, үҙ ата-әсәһенә тейешле кеселекле мөғәмәлә итмәгәндәр ҙә бар. Беҙгә кеше араһында ихтирам яулаған, тәртипле ғаиләләрҙе күрә белеү, уларҙың эшенә, ҡеүәтенә һоҡлана, фәһем, өлгө алыу етмәй. Олоғайғас ҡына быларҙың барыһын да аңлайһың, башыңдан үткәрәһең, ә йәш саҡта һиҙелмәй шул ул был хәҡиҡәт.

Бына шул турала әйтергә теләйем милләттәштәргә: үрнәк алып, үрнәк булып йәшәйек, бер-беребеҙҙе ҡәҙерләйек. Был тормошта кемгәлер ҡәҙерле булыуыңды тойоп йәшәүҙең дә кешегә йәшәү көсө биреүен хәтерҙә тотайыҡ. Донъя булғас, төрлө хәлдәр була - кемдер һинең өсөн өҙөлөп тороуын, кемгәлер һин кәрәк булыуың ҡыуаныста ла, ауыр мәлдәрҙә лә ярҙам итә. Ниндәйҙер ваҡытлыса әйберҙәр артынан ҡыуып, мәңгелек төшөнсәләр тураһында онотоп, бушҡа уҙғармайыҡ ғүмерҙе. Йылдар "һә" тигәнсә үтә лә китә, оҙон юлдың аҙағында ваҡытында кешеләргә яҡшы мөнәсәбәт күрһәтә алмауға үкенерлек булмаһын.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# "Халҡым теле миңә - хаҡлыҡ теле, унан башҡа минең илем юҡ" тигән хәҡиҡәтте балаларығыҙ һәм ейән-ейәнсәрҙәрегеҙ күңеленә нисек һеңдерәһегеҙ?



**(Башы 1-се биттә).**

***Рәйлә БАЙМӨХӘМӘТОВА, Белорет районы Абҙаҡ урта мәктәбенең башланғыс кластар уҡытыусыһы:*** Халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың һәр башҡорт өсөн үлемһеҙ васыятҡа әүерелгән был шиғыр юлдарын белмәгән кеше бар микән! Туған тел моңо тыуғандан күңелебеҙгә һеңгән, сөнки ошо мөхиттә аралашып, ошо мөхиттә аң-белем кимәленә өлгәштек, буй еткерҙек, шуға күрә лә беҙгә әсә теле һабаҡтарын өйрәнеү ҙә көсәнеүһеҙ, тәбиғи бирелде. Бөгөн беҙҙең алда ошо мираҫты - туған тел хазиналарын, халҡыбыҙ күңеле ынйыларын түкмәй-сәсмәй балаларыбыҙ аңына һеңдереү бурысы тора. Әйтергә кәрәк, бөгөн балалар, ауылдарҙа ла хатта, икенсе төрлөрәк шарттарҙа үҫә һәм белем ала. Электрон-техник прогресс, интернет-гаджет аралашыу саралары, өҫтәүенә, республиканың айырыуса ҡала мәктәптәрендә башҡорт теле уҡытыу мәсьәләһенә ҡараштарҙың үҙгәреп тороуы, һис шикһеҙ, балаларҙы туған тел мөхитенән алыҫлаштыра төшкәндәй. Шуға күрә лә баланы тыуған мөхитенә еректереп үҫтереү бурысы иң тәүҙә ғаиләләр иңенә төшә. Иң тәүҙә һәр ғаиләнең ошо хәҡиҡәтте аңлауы кәрәк, шунда ғына балаларыбыҙ телһөйәр үә илһөйәр булып үҫәсәк. Башҡа юл юҡ.

Ә ғаиләләргә килгәндә, үкенескә, улар араһында бөгөн төрлөһө бар. Маңҡорт ғаилә башлыҡтары өйҙә балалары менән русса аралашыуҙы мәртәбә күрә, йәнәһе лә, фәҡәт рус телендә аралашып, ошо телдә белем алһа ғына балам кеше буласаҡ, тип уйлай. Бындай фекер менән әсәй булараҡ та, уҡытыусы булараҡ та килешмәйем. Әлбиттә, рус телен яҡшы белеү кәрәк, быны берәү ҙә инҡар итмәй, ләкин үҙ телен белмәгән һәм һанға һуҡмаған кешенең башҡа телдәргә ихтирамы булырмы?

Үҙемдең ике балам: улым да, ҡыҙым да башҡорт класында уҡыйҙар. Бик матур итеп үҙ телебеҙҙә һөйләшеүҙе өҫтөн күрәләр. Ҡайһы ваҡыт урамда китеп барғанда уларҙың һөйләшкәнен ишетеп, өлкән апай-инәйҙәр һоҡланыу белдереп, маҡтап китәләр. Балаға үҙ телен белеү таҙа итеп аралаша алыу өсөн генә түгел, ә фекерләү ҡеүәһен үҫтереү өсөн дә бик кәрәк, сөнки кеше ниндәй телдә генә һөйләшмәһен, барыбер туған телендә уйлай һәм фекерләй. Ә бит ғаиләлә баланы телһөйәр итеп үҫтереү көс етмәҫ ауыр эш тә түгел: ни бары башҡортса һөйләшеү, ҡысҡырып китаптар уҡыу, шиғыр ятлау, йыр өйрәнеү, уйындар уйнау ҙа етә һәм уны балала ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырлыҡ итеп эшләргә кәрәк. Мин үҙем тап шулай эшләйем дә. Ә инде ауылда өләсәй-ҡартатайҙары булған балалар был йәһәттән айырыуса бәхетле, минеңсә. Әйткәндәй, үҙемдең әсәйем ғүмере буйы уҡытыусы булып эшләп, хаҡлы ялға сыҡты һәм улар атайым менән икеһе ейән-ейәнсәрҙәрен һағынып көтөп торалар, һөйләшеп һүҙҙәре бөтмәй.

***Айгөл МОСТАФИНА, йәш әсә:*** Бәләкәсебеҙгә әле ни бары 4 ай, шулай ҙа мин уның менән гел һөйләшәм, йоҡлатҡанда бишек йырын йырлайым. Иркәләп, матур һүҙҙәр әйтә башлаһам, ул бөтәһен дә аңлай кеүек: геүелдәп, гөрөлдәп, ниндәйҙер өндәр сығарып, йылмая, ҡулдарын һуҙып тыпырсына, миңә ынтыла башлай. Өләсәһе лә, ҡартәсәһе лә беҙгә килһәләр, бәләкәсте устарына ултыртып, "Һәтес, һәтес, һәтес тә, бигерәк матур бәпес тә..." тип һамаҡлап һикертергә яраталар, ә был инде бигерәк тә оҡшай балаға: осоп китер төҫлө талпына. Ҡәйнәм балалар поликлиникаһында оҙаҡ йылдар шәфҡәт тутаһы булып эшләй, уның әйтеүенсә, бала менән бәләкәйҙән үк даими һөйләшә башлаһаң, уның теле иртәрәк асыла һәм ул өндәрҙе, һүҙҙәрҙе дөрөҫ, асыҡ итеп һөйләшергә өйрәнәсәк, юғиһә, ҡайһы бер балалар 4-5 йәшкә тиклем һөйләшә алмай йә һаҡау булалар. Икенсенән, бала бәләкәйҙән туған тел моңон тойоп, ишетеп үҫәсәк. Балаға йөклө саҡта ҡулыма бер китап килеп эләккәйне: яҙыусы, педагог Мәрйәм апай Бураҡаеваның "Арғымаҡ" китабын бер тынала уҡып сыҡтым, айырыуса оҡшаған урындарын ҡәләм менән билдәләп тә сыҡҡанмын. Бына улар:"Баланы "Сәңгелдәк йыры"нан, көйлө әкиәттәрҙән өҙмәгәндәр. Бала саҡта ишеткән моң-йырҙар береһе лә онотолмай. Яҡшы һүҙ - күңел күрке, тигәндән сығып, әсәйҙәр сабыйҙарына яҡшы һүҙ әйтеп, күңелен күркәм итергә, рухын күтәрергә, әсә һөтө менән бар яҡшы теләктәрен һалып ҡалдырырға тырышҡан. Баланың күңеленә көрлөк тойғоһон тәүҙән һалыуҙы зарур һанаған аҡыллы кешеләр". Ысынлап та, беҙгә балаларыбыҙҙы рухлы, көслө, илһөйәр кешеләр итеп үҫтереү өсөн тәрбиә эшен халҡыбыҙ аҡылы һалынған ауыҙ-тел ижадына нигеҙләнеп баштан уҡ башларға кәрәктер, тигән фекергә килдем.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Радий Хәбиров "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте"ндә үҙенең ауыл мәктәптәрендә стоматология кабинеттарын асыу буйынса йөкләмәһен тиҙләтергә ҡушты. Бөгөн 61 объекттан 13 стоматология кабинеты ғына уҡыусыларҙы ҡабул итә башланы. Башҡортостандың һаулыҡ һаҡлау министры һүҙҙәренсә, тағы 15 кабинеттың махсус лицензияһы бар, һигеҙе Һаулыҡ һаҡлау министрлығында ҡарала. "Ошо мәктәптәрҙә теш табибы кабинеттары асыу өсөн һеҙгә 1 мартҡа тиклем ваҡыт бирәм", - тине республика етәксеһе.

✓Быйыл Өфөнөң Инорс биҫтәһендә Башҡортостандағы иң ҙур мәктәп төҙөлә башланы. 1650 уҡыусыға иҫәпләнгән белем усағы яңы балалар баҡсаһы менән берҙәм белем биреү үҙәге була. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров подрядсыларҙың - СУ-10 фирмаһының иғтибарын төҙөләш-монтаж эштәрен ваҡытында һәм сифатлы башҡарыуға йүнәлтте. Төҙөүселәр яңы мәктәпте 2021 йылдың 1 сентябренә файҙаланыуға тапшырырға вәғәҙәләй.

✓Өфөнөң "Инорс-4" биҫтәһендә белем биреү үҙәгенең 58-се яңы балалар баҡсаһы сафҡа индерелде һәм тиҙҙән ул балаларҙы ҡабул итә башлай. Мөдир Әлфиә Ғилметдинова республика Башлығы Радий Хәбировҡа мәктәпкәсә учреждениеның 345 урынға иҫәпләнгәнен, ысынында уға 600-гә яҡын баланың йөрөйәсәген һөйләне. Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин һүҙҙәренсә, Калинин районында балалар баҡсаларына урын етешмәүе ныҡ һиҙелә, бөтәһе 4000-дән ашыу бала сиратта тора.

✓Мәскәүҙә тәүгә "Башҡортостан" милли аш-һыу ресторанын асылды. Ошо көндәрҙә уҙған рәсми асыу тантанаһында сәйәсәт эшмәкәрҙәре, эстрада йондоҙҙары ҡатнашты. Был хаҡта социаль селтәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. "Башҡорттар - Рәсәйҙә һан буйынса дүртенсе милләт, Мәскәүҙә яҡташтарыбыҙ күп. Хәҙер унда уларҙың яратҡан ризыҡтарынан ауыҙ итеү, йыр-мондарыбыҙҙы тыңлау, яҡташтар менән аралашыу өсөн тыуған мөйөшө бар". Республика Башлығы билдәләүенсә, әле Өфөлә милли аш-һыу ресторандарын асыу буйынса ике ҙур проект әҙерләнә.

*БАЙРАМ УҢАЙЫНАН*

# ЕГЕТТӘР, ҺЕҘГӘ ӘЙТӘМ...



**ә ҡыҙҙар тыңлап торһон**

**Мин бәләкәйерәк саҡтарҙа, бер ни була ҡалһа, атайым: "Эх, егетт-ә-ә-р!" - тип ҡуйыр ине. Уның шул "егеттәре" нисектер хәтеремә һеңеп ҡалған да, минең дә үҙ көнитмешемдә ваҡыты-ваҡыты менән яңғырап ҡуйғылай. Ниндәйҙер әйтеп тә бөтөрөп булмай торған эске бер хәсрәт үә үкенес тойғоһо шул рәүешле үҙенән-үҙе тышҡа бәреп сығалыр инде, күрәһең.**

Бына әле лә, оло илдә ҡабул ителгән ҡанундарға ярашлы, инде тамам күнегелеп, ғәҙәткә әйләнеп киткән сара - рәсми телдә Ватан һаҡсылары, ә халыҡ араһында ир-егеттәр көнө тип аталған байрам алдынан да, ни эшләптер, "Эх, һеҙ, егеттәр!" тип әйткем килеп ҡуя. Әлбиттә, үкенес белдерер, йә иһә һуҡраныр өсөн түгел. Ысынлап тороп та, бер аҙ шаяртыбыраҡ та әйтер һүҙҙәрем төйнәлеп-йыйналып тора әле. Бәлки, улар тышҡа шытып та сыҡмаҫ ине, әммә тынғыһыҙ мөхәрриребеҙ Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы һис тәҡәт бирмәй, шул ир-ат хаҡында яҙ ҙа яҙ, тип ныҡыша. Ни эшләйһең, тыңлашмайынса ла булмай: ул ни, үҙе баш, үҙе муйын булғас, ҡайҙа телəй - ҡәләмеңде лә шуға көйләй.

Инеш һүҙ оҙаҡҡараҡ һуҙылды, эштең асылына күсер ваҡыттыр. Бына, егеттәр, һеҙгә ниҙәр әйтер инем, әйҙә иғтибар итеп тыңлағыҙ ҙа, урыҫ әйтмешләй, танауҙарығыҙға киртеп ҡуйығыҙ. Сиған затынан, йә иһә ҡыҙ-ҡыркын булһағыҙ, ҡолағығыҙға алҡа итеп тағығыҙ, тип тә өҫтәр инем. Шулай ҙа, тигеҙ хоҡуҡлылыҡ хаҡына, ғалимдарса әйткәндә, гендерлыҡ бизмәнен бер яҡҡа ауҙармаҫ өсөн, ҡыҙҙарыбыҙ ҙа ошо телмәремә ҡолаҡ һалһын ине, тим.

Ысынында, ир-егетлек - бик боронғо замандарҙан уҡ үтә мәртәбәле сифаттарҙың түңгеләренән булғандыр. Бының өсөн тән төҙөлөшөндәң ирҙәрсә булыуы, йә иһә һаҡалмыйыҡ ебәреү генә аҙ әле ул. Бына, егеттәр, һеҙгә әйтәм, шундай заманалар булған: ҡатын-ҡыҙ заты өҫтөнлөк ҡылып (матриархат тип атала), бар ҡәбилә менән идара иткән архаик дәүерҙә, ай-һай, ир-егеттәргә еңелдән булмағандыр, тим. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ, иртә таңдан ялан-урмандарға сығып китеп, киске усаҡҡа һис юғында берәй йүнһеҙ генә булһа ла йәнлекте тотоп алып ҡайта алмайһың икән, эшең харап. Ҡатын-ҡыҙ тигәнең үҙенән генә түгел, дөйөм аш ҡаҙанынан да мәхрүм итәсәк. Усаҡ янына йыйылған таҫыллыраҡ, ҡотло ҡуллыраҡ ырыуҙаштарыңдың күҙ алдында әҙәм мәсхәрәһе итеп, типкесләп, ҡыуып ебәрәсәктәр. Аҫ ҡалыуың әллә ни булмағанда ла, хурлығы ни тора! Шул мәҫкен ир ишараттарын, зиһенем ҡорған кинофильмда күргәндәй булып, йәлләп тә ҡуям әле, бахыркайҙарҙы. Улай тиһәң, гәйеп үҙҙәрендә инде: кем ризыҡ тапмай - шул ашамай. Ир бул, имәндәй ныҡ бул, арыҫландай гәйрәтле, юлбарыҫтай йылғыр бул! Тик шунда ғына тоҡомоң ҡалдырырлыҡ ҡыҙға ир булырға рөхсәт биреләсәк. Бына нисек булған архаик егетлек.

Уйлайым, уйлайым да, шундайыраҡ фекергә килəм: ана шул ҡанундар мотлаҡ үтәлмәгән йәмғиәтебеҙҙә ир затында тик ҡатын-ҡыҙға ғына хас сифаттар өҫтөнлөк итә башланы түгелме һуң? Физик яҡтан да (ҡорһаҡ үҫтереп тороп), психик яҡтан да йомшаҡлыҡтың арта барыуы, яһалма нәзәкәтлелек, күп һүҙлелек, үпкәселлек, хатта нарциссизм (көҙгөгә йыш ҡарап, тышҡы ҡиәфәтеңде барлау), күпләп косметика ҡулланыу - шуларҙы инде ир-егетлек сифаттары, ташҡа үлсәйем. Әйтәм, ҡатын-ҡыҙ заты һанға һуҡмағас, берәзәклектә ғүмер һөргән ирҙәр күбәйеп китте.

Хәйер, ғалимдар йәмғиәт спираль буйынса үҫешә, ти, тимәк, матриархатҡа яңынан әйләнеп ҡайтыуыбыҙ ҙа бар. Эйе шул, ана Башҡорт илендә лә, берәмһен булһа ла, ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ район тиклем районға башлыҡ вазифаһына үрләтелә. Сит илдәр хаҡында әйтерлек тә түгел, ҡатын-ҡыҙ премьер-министрҙары ла, президенттары ла телевизор экрандарынан төшмәй. Шулай булғас, ир азаматтары, беҙгә лә яңы шарттарға алдан уҡ әҙерләнә башлау фарыҙдыр. Юғиһә, теге матриархатҡа тағыһа, һис шикһеҙ, ситкә тибелеп йәшәүгә дусар ителәсәкбеҙ. Ошо урында, шаяртыбыраҡ әйтелгәндәрҙән һуң, етди һүҙгә күсәйек.

Һорау бирерһегеҙ, әлбиттә, беҙгә ни эшләргә һуң, тип. Ысын ир-егет була алыу алымдары байтаҡ ул. Бөртөкләп һанап сығайыҡ, булмаһа.

Бының өсөн иң элгәре физик таҙалыҡ талап ителә. Сәләмәт тәндә ирлек ҡеүәте арта, азаматлыҡ рухы көсәйә. Саңғыға баҫ, бокс менән шөғөлләнң, көрәшсе булып майҙанға сыҡ, хоккей уйна, фитнес залына йөрө, тән һәм ҡул мускулдарын нығыт, воркаутсы бул - аҙмы ни хәҙер шундай шөғөлдәр. Шулай итмәһәң, сибек һәм сирләшкә булып, теләһә ниндәй хулиган ҡаршыһында үҙеңде меҫкен бер зат итеп тояҫаҡһың.

Тәмәке тартма, алкоголле эсемлектәрҙән баш тарт. Кем шуларға күнеккән, тора килеп зыянын да күрәсәк. Былар бит һис тә ирлек, егетлек күрһәткестәре түгелдер. Ана, Роберт Дәүләтшин, Марат Абдуллиндар кеүек егеттәрҙән ҡалышма. Саф күңелле ысын башҡорт егеттәре улар, һомғол, ныҡ һәм таҙа кәүҙәле тышҡы һындарынан нур бөркөлөп тора.

Ир-азамат яугирлыҡта һынала. Яҙыусы, аҡһаҡал Ғәлим ағай Хисамов боронғо башҡорт ата-бабаларыбыҙҙың төп һөнәре яугирлыҡтан торған, тип иҫәпләй. Был хаҡтыр. Теләһә ниндәй сибек һәм булдыҡһыҙҙан яугир сыҡмай. Михаил Лермонтов та заманында ошо хаҡта бына нисек әйткән: "Баһадирҙар түгел һеҙ. Ауыһыҙҙыр улар яҙмышы, бик аҙҙары ҡайтты яу тыңғас..." Ысын яугир булам тиһән, рухи ҡеүәткә, ихтыяр көсөнә өлгәш. Тәнеңдә лә, йәнеңдә лә төрлө һынауҙар аша ныҡышмалы рәүештә үтеп сығырға күнектер. Походтарға йөрө, йылғаларҙы кис, тауҙарға үрлә. Ир-егет әрме хеҙмәтенә саҡырыла, унда хәҙер ҙә еңеллек юҡ, ауырлыҡтар, һынауҙар алдында юғалып ҡалмаҫлыҡ итеп, үҙеңде, рухыңды сыныҡтыр. Юғиһә, бәләгә тарыңды көт тә тор!

Ир-егет даирәһе - йәмәғәт майҙаны. Кәрәк икән, ошо майҙанда хаҡлыҡ, хәҡиҡәт өсөн тауыш бир, халҡың мәнфәғәттәрен, ғөрәф-ғәҙәттәрен яҡлау һәм һаҡлау хаҡына үҙ-үҙеңде йәлләмә. Был - ысын егетлек билдәһе.

Фани донъяға ир заты итеп яратылғас, Хоҙайҙан тапшырылған ирлек - атайлыҡ бурысын да онотмау зарур. Үҙ йәрен табып, ғаилә ҡормаған, бала-саға үҫтермәгән ир, был нисек кенә үкенесле һәм ҡыҙғаныс булмаһын, ысын бәхеткә өлгәшә алмай. Өйләнгәсниткәс, ғаилә усағын тоҡандырғас, ундағы етеш үә ғәмле көнитмеш тә, үҙ-ара килешеп, ихтирам һаҡлап йәшәү ҙә башлыса ир-егеттең холоҡ-ҡылыҡтарынан тора. Иң мөһиме - хәләл ефетеңә ҡарата мәхәббәтле булып йәшәп, хыянаттан һаҡлана белеү. Шулдыр ғаилә тотороҡлоғоноң төп ҡануны. Йәнә шул: ир-егет, үҙенән бигерәк, балалары киләсәген хәстәрләп йәшәй. Тап балалар хаҡына үҙ эгоизмыңдан азат була алыу - ысын ирлек сифаты.

Ир-егетлек сифаттары күп төрлө, уларҙы һанап сығыу мөмкин дә түгел. Әммә тағы ла бер нәмәне иҫтән сығармау урынлы. Ир намыҫы тигән бер үтә мөһим төшөнсә бар. Йәшәйештә төрлө ауыр хәлдәр килеп тыуа, баҫым-ҡыҫымдар ҙа була торған хәл. Тап шул саҡта намыҫыңды саф көйө һаҡлай алыу, һатмау һәм һатылмау - егетлектең иң аҫыл өлгөһөнә әүерелә. Бөйөк Рәмиебеҙ тап шулай әйткән дә инде: "Ир намыҫы менән һатыу итеү иң кәмһеткес ирҙең йөрәген". Шуға күрә, башҡаларҙы ла, үҙебеҙҙе лә һис бер кәмһетмәйенсә, күркәрәкәребеҙҙә намыҫ һаҡлар йөрәк булып, ауырыраҡ саҡта бер-беребеҙгә терәк булып йәшәйек әле, башҡорт ир-егеттәре!

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан ҡануниәтенә бер юлы ике үҙгәреш көсөнә инде. Беренсеһе балаларға снюс һатыуҙы тыйһа, икенсеһе балиғ булмағандарға кальян, электрон тәмәке һатҡан өсөн яза билдәләй. Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, штраф суммаһы граждандарға - 3-4 мең, вазифалы кешеләргә - 30-40 мең, юридик берәмектәргә - 150-200 мең һум. Ҡабаттан боҙған өсөн граждандарға - 4-5 мең, вазифалы кешеләргә - 40-50 мең, юридик берәмектәргә 200-250 мең һум штраф ҡаралған.

✓Өфө тирәләй саңғы походы ойошторола. Уҙыш 1941-1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығына арнала. Ара 75 саҡрым тәшкил итә. Саңғы походына 22 февралдә Өфөнөң Орджоникидзе районы Иҫке Турбаҫлы ауылында старт бирелә. Ойоштороусылар - Владимир Засов исемендәге Хәйриә фонды менән берлектә Өфө ҡала, Орджоникидзе районы Ветерандар советы.

✓Башҡортостанда 14 февралдә, Ғашиҡтар көнөндә, 191 пар өйләнешкән, тип хәбәр итте Башҡортостан Республикаһының Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты. Өфөнөң ЗАГС бүлектәрендә 82 никах теркәлгән. Былтыр 14 февралдә 108 никах теркәлгән.

✓Башҡортостанда киҫкен респиратор вирус инфекцияһы буйынса эпидемия сиге 70 процентҡа күтәрелгән, бынан алдағы аҙна менән сағыштырғанда 12,5 процентҡа артҡан. Өфөлә яҡынса диагноздар буйынса 11 979 грипп һәм ОРВИ менән сирләү осрағы теркәлгән, шул иҫәптән балаларҙа - 6 471 осраҡ. "Лаборатор тикшеренеүҙәрҙә сирлеләрҙә грипп һәм грипп этиологияһына ҡарамаған вирустар барлығы асыҡланған", - тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың Башҡортостан Республикаһы буйынса идаралығында.

✓Голландияның Дордрехт ҡалаһында Өфө шорт-трек мәктәбе тәрбиәләнеүсеһе Семен Елистратов Донъя кубогында бронза миҙал яуланы. Был - атҡаҙанған спорт мастерының 2019/2020 миҙгел кубогының барлыҡ этаптарында алтынсы наградаһы. Елистратовтың алты алтын, бер көмөш һәм тағы бер бронза миҙалы бар. Рәсәйҙең шорт-трек буйынса ир-егеттәр командаһы эстафетала дөйөм иҫәптә беренсе урынды яуланы.

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ӘСӘЛЕК КАПИТАЛЫ

**Дәүләт Думаһында әсәлек капиталы программаһын киңәйтеү тураһында төҙәтмәләр өҫтөндә эш башланды.**

Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа мөрәжәғәтнамәһендә әсәлек капиталы программаһын 2026 йылдың аҙағына тиклем оҙайтырға, беренсе балаға тыуғанда уҡ сертификат бирергә, шулай уҡ ике балалы ғаиләләргә ошо түләү күләмен арттырырға тәҡдим итте. Алдан хәбәр ителгәнсә, төҙәтмәләр тәү сиратта әсәлек капиталы программаһын 2026 йылға хәтлем оҙайтыуҙы һәм уны йыл һайын индексациялауҙы күҙ уңында тота. 2020 йылдың 1 ғинуарынан һуң беренсе балаһы тыуған йәки тәрбиәгә алған ғаиләләргә әсәлек капиталы түләнә - 466 мең 617 һум. Ғаиләләрҙә икенсе һәм артабанғы балалар донъяға килгән һәм йәки тәрбиәгә алынған осраҡта түләүҙең күләме 616 мең 617 һум була.

# ВЕТЕРАНҒА АҠСА

**Еңеүҙең 75 йыллығы уңайынан Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға, инвалидтарға, вафат булған ветерандарҙың тол ҡатындарына һәм тол ирҙәренә, концлагерь, төрмә, гетто тотҡондарына бер тапҡыр бирелә торған түләү ҡаралған. Рәсәй президенты Владимир Путин ошо хаҡтағы указға ҡул ҡуйҙы.**

Икенсе донъя һуғышы осоронда элекке балиғ булмаған концлагерь, гетто тотҡондарына, Финляндия менән һуғышта, Бөйөк Ватан һуғышында, Япония менән һуғышта һәләк булған хәрбиҙәрҙең тол ҡатындарына (тол ирҙәренә), Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары һәм ҡатнашыусыларының тол ҡатындарына (ирҙәренә) 75 мең һум аҡса түләргә, тиелә документта. Элекке балиғ булған нацист концлагерҙары, төрмә һәм гетто тотҡондарына 50 мең һум аҡса бирелә. Дәүләт башлығы хөкүмәткә 2020 йылдың апрель-май айҙарында аҡса түләүҙе тамамларға ҡушты.

# МАШИНАНДЫ...

**Рәсәйҙә 2020 йылдың 1 ғинуарынан яңы автомобилдәрҙе, Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһына бармайынса, автосалонда теркәргә мөмкин.**

РФ Хөкүмәте ҡарарына ярашлы, автосалонда теркәү тураһында таныҡлыҡ һәм яңы автомобилгә дәүләт теркәүе билдәләрен, башҡа транспорт сараларын алырға мөмкин. Монополияға ҡаршы федераль хеҙмәт бойороғона ярашлы, теркәүҙең хаҡы 500 һумдан артырға тейеш түгел. Автомобилдәрҙе махсус ойошма статусына эйә компаниялар теркәй ала. Улар Эске эштәр министрлығының дәүләт реестрына индерелергә тейеш. Транспортты теркәү өсөн автосалон хеҙмәткәре машинаны ҡарап сығырға, документтарҙы тикшерергә һәм тикшереү һөҙөмтәләрен дәүләт хеҙмәттәре порталы аша ЮХХДИ бүлегенә тапшырырға бурыслы. Һуңынан ЮХХДИ был мәғлүмәттәрҙе тикшерә, ыңғай ҡарар ҡабул ителгән осраҡта, теркәү тураһында таныҡлыҡты һәм номерҙы автосалонға тапшыра.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҒАЛИМДАР МЕНӘН ОСРАШЫУ



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың ғилми берләшмәһе вәкилдәре менән осрашты һәм Ҡуштауҙы сәнәғәт эшкәртеүе менән бәйле көнүҙәк мәсьәләләрҙе тикшерҙе.**

"Яңыраҡ билдәле яҡташыбыҙ - музыкант Юрий Шевчук менән осраштым. Беҙ уның менән ошо хаҡта фекер алыштыҡ. Ул да битараф түгел, борсола. Һәм ул минән ғалимдар менән осрашыуымды һораны, - тип һөйләне Радий Хәбиров осрашыу ваҡытында. - Мин диалог яҡлымын, һәр саҡ һеҙҙең фекерҙе ишетергә әҙермен. Шуға күрә ошо мәсьәлә буйынса эш төркөмө булдырырға тәҡдим итәм. Һәр берегеҙгә уның составына инеү тәҡдиме менән хат ебәрермен. Әйҙәгеҙ, эштәр башланғанға тиклем ҡалған ваҡытты был хәлдә нисек йомшартыу тураһында фекер алышыуға арнайыҡ". Осрашыуҙа "Башнедра" компанияһының элекке етәксеһе Рәсих Хәмитов, эколог Марс Сәфәров, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге биологы Василий Мартыненко, геолог Исхаҡ Фәрхетдинов, биология фәндәре докторы Лариса Абрамова, Башҡортостандың экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу министры Урал Исҡәндәров, Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының Аграр мәсьәләләр, экология һәм тәбиғәттән файҙаланыу буйынса комитеты рәйесе урынбаҫары Руфина Шаһапова ҡатнашты. Ҡатнашыусылар Ҡуштауҙы эшкәртеүгә бәйле төрлө ғилми аспекттарға ҡағылды, шиханды үҫемлектәр һәм йәнлектәр донъяһын һаҡлап ҡалыу тәҡдимдәрен әйтте. "Мин ҡарашымды әйттем - Ҡуштау эшкәртелә. Беҙгә ил өсөн стратегик етештереүҙе туктатырға һәм мөнәрләгән кешене эшһеҙ ҡалдырырға бер кем дә рөхсәт итмәҫ", - тине Радий Хәбиров. Эш төркөмөндә ҡатнашыусылар шиханды эшкәртеү проектын ентекле өйрәнергә һәм геологик-эҙләнеү һәм башҡа эштәрҙе рациональ үткәреү, шулай уҡ Ҡуштауҙың биологик үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыу буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә тейеш.

# ТӘНҠИТКӘ ТАРЫНЫЛАР

**Башҡортостан Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров йәнә чиновниктарҙы сит илдәргә бушлай командировкалар ойошторғаны өсөн шелтәләне.**

Республика Башлығы һүҙҙәренсә, саҡырыу буйынса сит дәүләттәргә теге йәки был саралрға барған министрлыҡ һәм ведомство етәкселәре ошондай сәфәрҙәрҙең һөҙөмтәләре тураһында уға тулы отчет бирергә тейеш. "Мин түрәләр туризмын туктатыуҙы һорағайым инде. Беҙгә бюджет аҡсаһы иҫәбенә килешеүҙәр буйынса "ритуал" сәфәрҙәр кәрәкмәй. Кемдең ҡайҙа барғанын баҫтырып сығарһам, һәйбәт булмаҫ. Бының менән мауыҡмағыҙ", - тине республика етәксеһе. Башҡортостан Башлығы командировкаларҙың тармаҡ буйынса булырға тейешлеген дә билдәләне. Әйтәйек, Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр буйынса дәүләт комитеты сит илгә тәҙөләш форумына йыйына, ә унда тәҙөләш блогы барырға тейеш.

Шулай уҡ Радий Хәбиров оперативкаға килгән етәкселәргә "һәр ваҡыт телефонда ултырған" өсөн кисәтеү яһаны һәм эш ваҡытында уларҙан мобиль ҡоролмаларын тартып алырға тәҡдим итте. "Беҙ Мәғариф министрлығы менән дәрес ваҡытында уҡыусыларҙан кеҫә телефондарын алып тороуҙы тикшерәбеҙ. Хәҙер был проектты хөкүмәттән һәм һеҙҙән башларға уйлайым, - тип билдәләне республика Башлығы. - Беҙ тура эфирҙа, ә һеҙ башығыҙҙы әйеп, телефонда ултыраһығыҙ. Етди иҫкәртеү яһайым. Беҙ балаларҙы сиклергә тырышабыҙ, тәүҙә үҙегеҙҙән башлағыҙ".

# ЯРҘАМ ТОС ҠЫНА

**Быйыл "Ауыл биләмәләрен комплекслы үҫтереү" федераль дәүләт программаһын ғәмәлгә ашырыу башлана.**

Программала - һигеҙ йүнәлеш, шуларҙың етәүһе өсөн республика Ауыл хужалығы министрлығы яуаплы. Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығы менән килешеү сиктәрендә алдағы өс йылда ауылдарҙың инфраструктураһын үҫтереүгә 4,7 миллиард һум йүнәлтелә, шуның 3 миллиарды - федераль бюджеттан. Республика Хөкүмәте премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәләге сығышында, 2019 йылда Башҡортостанда ауылдарҙың инфраструктураһын үҫтереү өсөн 1,2 миллиард һум йүнәлтелде, шуның 692,8 миллион һумы - федераль ҡаҙнаныҡы, тип билдәләне. Дөйөм сумманан 816,7 миллион һум торлаҡ төҙөлөшөн үҫтереүгә бүленде, 840 ғаилә торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға субсидиялар алды. Бер йылда дөйөм оҙонлоғо 32,3 саҡрымлыҡ 8 газ менән тәьмин итеү объекты, 11 һыу менән тәьмин итеү объекты (66,9 саҡрым), дүрт фельдшер-акушерлыҡ пункты (Әбйәлил, Ҡалтасы, Ишембай, Аҫҡын районы) төҙөлөп, файҙаланыуға тапшырылды, халыҡтың урындағы башланғыстарына ярҙам итеү буйынса өс проект бойомға ашырылды (күп функциялы спорт майҙансыҡтары).

# КОЛЛЕДЖДЫ КҮСЕРЕРГӘ

**Өфө автотранспорт колледжы ҡаланың икенсе районына күсерелеүе ихтимал. Хөкүмәт Премьер-министрының беренсе урынбаҫары Андрей Назаров һәм Өфө хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин Башҡортостандың баш ҡалаһы буйлап эш сәфәре ваҡытында уҡыу йортона барҙы һәм автотранспорт колледжын артабан үҫтереү мөмкинлектәрен тикшерҙе.**

2019 йылдың августа Өфө автотранспорт колледжы етәкселеге ҡала хакимиәтендәге "Инвестиция сәғәте"ндә бинаһарҙы ҡала яныны күсереү һәм буш участкала йорттар төҙөү тәҡдиме менән сығыш яһаны. 1930 йылда һалынған колледжды төҙөкләндереү урынына шәхси инвестор аҡсаһына ҡала ситендә яңы уҡыу комплексы төҙөргә, ә бушап ҡалған 4 гектар майҙанды торлаҡ төҙөлөшө өсөн файҙаланырға тигән тәҡдим яңғыраны. Яңы урынға күсеү Көнсығыш сығыу юлы төҙөлөшөн тергеҙеү һәм Галле урамын капиталь реконструкциялау менән дә бәйле булыуы мөмкин, уның бер осо уҡыу йортона килеп терәлә. Андрей Назаров һүҙҙәренсә, Өфө автотранспорт колледжы - Башҡортостандың бай тарихлы терәк урта уҡыу йорттарының береһе. Ул 90 йыл дауамында кадрҙар әҙерләү урыны булып тора. Колледжды һаҡлап ҡалыу һәм үҫтереү мәсьәләләре - Хөкүмәт контролендә.

Декабрь аҙағында Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә республика Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты рәйесе Тимур Мөхәмәтйәнов колледжда Башҡорт дәүләт транспорт академияһын булдырыу тәҡдиме менән дә сығыш яһағайны.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров башланғысты хупланы. Республикала бюджет урындары кәрәк, тип билдәләне ул.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостанда йәшәүселәр төҙөлөш өсөн рөхсәтте электрон төрҙә алырға мөмкин. Был хаҡта Мәғлүмәт технологиялары буйынса дәүләт комитетының рәсми сайтында хәбәр ителә. Республиканың 47 районында электрон рөхсәт бирәләр ҙә инде. 2021 йылда электрон төрҙә төҙөләшкә рөхсәт биреүҙе һораған мөрәжәғәттәр 70 процентка етергә тейеш.

✓Башҡортостанда хәҙер 69 ГТО-ға тест үтеү үҙәге эшләй. Әлеге ваҡытта республикала 405 меңдән ашыу кеше "Хеҙмәткә һәм оборонаға әҙер" автоматлаштырылған системаһына теркәлгән. Республика Хөкүмәте президиумы ултырышында ҡалаларға һәм районларға бюджеттан комплексты үҫтереү өсөн аҡса бүлеү тәртибе тураһында ҡарар проекты ҡаралды. Һөҙөмтәлә ГТО тапшырыуҙың абруйын арттырыу һәм күрһәткестәрҙе яҡшыртыу өсөн Башҡортостан муниципалитеттарына 315-әр мең һум (дөйөм суммаһы 21 миллион 741 мең һум) бирелә.

✓2022 йылға Рәсәйҙә һәр кемдең электрон медицина картаһы булырға тейеш. Был хаҡта "Сәләмәт Мәскәү" ассамблеяһында белдерҙеләр. Билдәләнеүенсә, ике йылдан дәүләтебеҙҙә электрон карталарҙы, уның менән ситтән тороп "аралашыуҙы" (йәғни тултырыуҙы), микрочиптар һәм башҡа гаджеттар индереүҙе үҙ эсенә алған берҙәм һанлы контурҙы әҙерләү тамамлана.

✓Төньяҡ Боҙло океанды һәм Антарктиданы яулаған легендар яҡташтарыбыҙҙың исемдәре музейҙа мәңгеләштерелә. Өфөлә полярсыларға һәм Себерҙе өйрәнеүселәргә арналған мәҙәни объект асыла. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә хәбәр итте. "Башинформ" агентлығына билдәле булыуынса, яңы музей Свердлов урамындағы 88-се йортта асылыа.

✓Былтыр Башҡортостанда 1816 медицина хеҙмәткәрен эштән бушаттылар. Бер йылда һаулыҡ һаҡлау тармағына 2169 кеше эшкә йәлеп ителгән. Шулай итеп, табиптар һәм медицина персоналы хеҙмәткәрҙәре 353 кешегә арткан. Республика етәксеһе Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына белгестәр йәлеп итеү менән шәхсән шөғөлләнергә һәм табиптарҙы дәүләт ярҙамы саралары менән тәьмин итергә ҡушты.

АФАРИН!

# АЛТЫ ТЕЛДӘ...

## диктант яҙҙылар



**БР Халыҡтары ассамблеяһы, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, БР Мәғариф һәм фән министрлығы берлектә "Халыҡ-ара туған тел көнө" айҡанлы Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәрендә Халыҡ-ара диктант үткәрҙе.**

Баш ҡала халҡы өсөн Башҡорт дәүләт университеты һәм М. Аҡмулла исемендәге БДПУ нигеҙендә республикала уҡытыу алып барылған алты телдә: башҡорт, урыҫ, татар, мари, удмурт, сыуаш телдәрендә диктант яҙыу ойошторолдо. Барыһы ла Сабир Ҡадировтың 1981 йылда баҫылған "Урал бөркөтө" китабынан алынған генерал Миңлеғәли Шайморатов тураһындағы өҙөктө үҙ телендә яҙҙы. Акцияға республиканың барлыҡ төбәктәре, Рәсәйҙең төрлө өлкәләрендә һәм сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәр, Татарстан һәм Удмурт республикалары ла ҡушылды. "Башҡортостан халыҡтары телдәрендә Халыҡ-ара диктантты туған телдәргә иғтибарҙы арттырыу маҡсатында ла, быйылғы иҫтәлекле даталарҙы халыҡ хәтеренә төшөрөргә ниәтләп тә үткәрәбеҙ, - ти был турала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Президиум рәйесе Эльвира Айытҡолова. - Белеүегеҙсә, республикала "Башҡорт теле йылы" уҙа һәм ғинуар айындағы эшмәкәрлекте беҙ "Башҡорт теле - дәүләт теле" темаһына арнаныҡ, һәр муниципалитетта дәррәү генә бик күп саралар, акциялар ойошторолдо. Әле "Шайморатов вариҫтары" акцияһы дауам итә, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы составында алышҡан яҡташтарҙың тулы исемлеген төҙөү ниәтендә мәғлүмәттәр туплайбыҙ һәм тиҙҙән генералға һәйкәл ҡуйыу өсөн халыҡтан аҡса йыйыуҙы махсус сайт аша ойошторасаҡбыҙ".

БР мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин әйтеүенсә, быйыл тәүге тапҡыр ғына ойошторолоуға ҡарамаҫтан, ҡатнашыусылыр һаны бик күп булған. Киләсәктә диктантты онлайн режимында тағы ла күберәк телдәрҙә яҙҙырыу масштабын киңәйтеү маҡсатҡа ярашлы булыр, тигән фекерҙә ул.

- Бөгөн Ер шарының миллиардлаған халҡы 6 меңдән ашыу телдә һәм диалектта һөйләшә. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөтәһенең дә хәле ҡәнәғәтләнерлек түгел, төрлө мәғлүмәттәргә ярашлы, бер быуаттан ошо телдәрҙең 3 меңе генә тороп ҡалыуы бар. Һуңғы үткәрелгән Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса илдә 270 телдә һөйләшһәләр, шуларҙың 136-һына юғалыу ҡурҡынысы янай. Һуңғы һөйләшеүсе менән 49 тел үләсәк. Телдәрҙе һаҡлау һәм үҫтереү шарттары бар: тәү сиратта ул телдә һөйләшергә, яҙырға кәрәк, төрлө баҫмалар нәшер ителергә тейеш. Дәүләт ярҙам итергә, ә иң мөһиме, кешенең үҙ туған телен белергә һәм шул телдә ижад итергә теләге булырға тейеш. Атай-әсәйҙәр белгәнен балаларына өйрәтеп ҡалдыра һәм шул рәүешле тел йәшәйәсәк. Бына ошо сылбырҙы замандаштар дауам итеүен теләп ойошторған сараларҙың береһе был диктант, - тине РФ Дәүләт Думаһы депутаты, БР Халыҡтары ассамблеяһы рәйесе Зөһрә Рәхмәтуллина.



**ӘЙТКӘНДӘЙ...**
**БДПУ-ның башҡорт теленән диктант яҙыусылар йыйылған аудиторияһына 200-ҙән ашыу кеше йыйылды. Яҙа башлар алдынан БДПУ ректоры Салауат Сәғитов, РФ Дәүләт Думаһы депутаты Зөһрә Рәхмәтуллина, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова туған тел тураһында шиғыр һөйләне, телмәр тотто. Башҡортостандың халыҡ артисы Хөрмәт Үтәшев уҡыған тексты йыйылыусыларҙың барыһы да иғтибар менән тыңлап, тырышып ҡағыҙға күсерҙе. Был да күңел тантанаһы булды аңлаған кешегә. Күптәр шулай ҡабул итте лә инде был сараны.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЕГЕТТӘР, ӘРМЕГӘ!



**Был тәбиғәт һынапмы-һынай, шикелле: халыҡты - түҙемлеккә, етәкселекте - эште оператив һәм уңайлы итеп ойоштора белеүгә. Шулай булмаһа, көндәрҙең тыныс тороуына инде өйрәнеп кенә бөтөүгә, ҡапыл ҡар-буранын сығарып ҡуймаҫ ине. Хәйер, уның үҙ холҡо, үҙ ҡанундары, ә бәндәгә бары тик буйһонорға ғына ҡала. Бына әле лә аҙна башында уҡ буранлап ҡар яуыуы ҡала хеҙмәттәренә тағы ла эш арттырҙы.**

- Коммуналь хужалыҡтарға территориялар торошон даими тикшереп торорға кәрәк. Ә хакимиәт башлыҡтарына урындарҙа эште дөрөҫ ойоштороу, уның үтәлешен контролләү һәм граждандарҙың мөрәжәғәтен тиҙ арала хәл итеү зарур, - тип белдерҙе ҡала хакимиәтендәге оператив кәңәшмәлә мэрҙың беренсе урынбаҫары Салауат Хөсәйенов.

Шулай уҡ көн тәртибенә был аҙнала былтыр юлдарҙы һәм юл инфраструктураһы объекттарын ремонтлау буйынса программаны тормошҡа ашырыу һөҙөмтәләре сығарылды. Был хаҡта хакимиәттең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм яһалма ҡоролмаларҙы ремонтлау идаралығы начальнигы Радмил Мөслимов бәйән итте. Уның билдәләүенсә, Башҡортостан территорияһында ике юл участкаһын - Бөрө трактын һәм Һупайлы урамын ремонтлағанда "Ресайклинг" инновацион технологияһы уңышлы ҡулланыла. Был ысулдың асылы шунда: махсус үҙйөрөшлө комплекс зарарланған асфальт ҡатламын ҡырҡып ала һәм уны ваҡлап, ҡатырғыс матдәләр менән ҡушып, ҡабаттан һала. Был техниканы "тәгәрмәсле асфальт заводы" тиергә лә мөмкин. Ул сеймал урынына ҡулланылған асфальтты файҙалана һәм демонтаж, асфальт һалыу процесы өҙлөкһөҙ алып барыла. Был ысул яңы сеймал алыу һәм уны ташыу сығымдарын бөтөрә, шулай уҡ ҡалдыҡтарҙы утилләштереүҙе талап итмәй.

Был аҙнала Ватанды һаҡлаусылар көнө билдәләнә. Шуға ла ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә 2019 йылда хәрби хеҙмәткә көҙгө саҡырылыш кампанияһы йомғаҡтары тураһында һөйләшеүгә ваҡыт бүленеүе лә юҡҡа түгел. Был хаҡта доклад менән хакимиәттең Граждanлыҡ институттары менән бәйләнеш буйынса идаралыҡ начальнигы Артур Ғафаров сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, 1 октябрҙән 31 декабргә тиклем арауыҡта барған кампанияла Өфө ҡалаһына 800 кешегә наряд төшөрөлә. Хәрби хеҙмәткә саҡырылырға тейешле граждандарҙың 5675-е медицина тикшереүе үткән һәм уның һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, барлығы 1639 кеше (39 процент) хәрби хеҙмәткә яраҡлы тип табылған.Башҡортостан Хәрби комиссариаты мәғлүмәттәренә ҡарағанда, республика егеттәре ҡоро ер (421 кеше, 53 процент), һауа-йыһан ғәскәрҙәренә (99, 12 процент) һәм хәрби-диңгеҙ флотына (80, 10 процент) алына. Әлеге ваҡытта яҙғы саҡырылышҡа әҙерлек бара. Уға 1 апрелдән старт бирелә.

Мәғлүм булыуынса, былтыр мартта Калининградта "Сообразительный" гвардия корветы менән Өфө ҡалаһы хакимиәте хеҙмәттәшлек һәм шефлыҡ тураһында килешеү төҙөгәйне. Документҡа ярашлы, БР Хәрби комиссариатының йүнәлтмәһе буйынса корвет командованиеһы экипажды контракт нигеҙендә баш ҡаланан ебәрелгән егеттәр менән тулыландырыу бурысын алғайны. Былтыр командование вәкилдәре килеп, һайлап алыу үткәрә һәм Балтик флотында хеҙмәт итеү өсөн 25 призывник һайлана, уларҙың 8-е корветта хәрби хеҙмәтен үтә лә инде.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

### Ангина

❖ 100 г шыйыҡ йүкә балына бер ҡалаҡ ҡурай еләге һутын йәки сиробын ҡушырға һәм ҡайнатырға. Болғатып торорға онотмағыҙ. Йылы көйөнсә һут эсә торған көпшә ярҙамында баҙам биҙҙәренә тейеп үтерлек итеп эсергә кәрәк. Әҙер дауаның өстән ике өлөшөн эскәндән һуң йылы кейенеп, юрған ябынып ятырға. Тирләгәндән һуң кейемде алмаштырырға.

### Баҙам биҙе шешкәндә

❖ Баҙам биҙҙәре шешкәндә һәм йүткергәндә календула сәскәһен йәки шалфей япраҡтарын 400 мл ҡайнар һыуҙа бешереп, ярты сәғәт торорға, һөҙөргә һәм тамаҡты сайҡарға.

### Аяҡтар ауыртҡанда

❖ Йыш ҡына ололар аяҡтар хәлһеҙләнеүенә һәм һыҙлауына зарлана. Был осраҡта баллы боҫламалар эшләргә кәрәк. Аяҡтарға бал һылап, тығыҙ бәйләмес һалып, бер тәүлек йөрөгәс кенә сисергә. Балдың ҡалдыҡтарын эҫе һыу менән сайып төшөрөп, яңынан бал һыларға кәрәк. 5-6 көндән аяҡтарҙың һыҙлауы бөтә, тынлаша башлай. Балдан эшләнгән боҫламалар умыртҡалыҡтың остеохондроздан ауыртыуын да баҫа.

### Грипптан һаҡланыу өсөн

❖ Грипп йоҡтормайым тиһәң, 2 баш лимонды орлоғонан таҙартып, ҡырғыс аша үткәрергә. Шулай уҡ ике баш һарымһаҡты ваҡларға һәм килеп сыҡҡан ҡатышмаға 1 литр ҡайнар һыу ҡойорға. Өс көн бүлмә температураһында ҡараңғы урында торорға. Төнәтмне һөҙөргә, һыуытҡысҡа ҡуйырға һәм көн дә ас ҡарынлай берәр ҡалаҡ эсергә. Дауаны иртә көҙҙән ҡара яҙға тиклем ҡулланыу отошло.

### Йыуан эсәктең үткәрмәүсәнлеге

❖ 10 ҡалаҡ йөҙөм, 20 ҡалаҡ күрәгә һәм унар ҡалаҡ киптерелгән слива һәм инжирҙы ҡайнар һыуҙа йыуып, ит турағыстан үткәрергә. Ас ҡарынлай берәр ҡалаҡ ашарға.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Ҡайыу техникаһы, орнаменты һәм әйберҙәрҙең ассортименты буйынса башҡорттарҙыҡына Ҡырғыҙстандың көньяҡ төбәктәрендәге ҡайылған әйберҙәр яҡын тора. Көньяҡ-көнсығыш башҡорттары кеүек, ҡырғыҙҙарҙа ла сергетыштар, эйәргә һалынған келәмдәр, кәләштең атын зауыҡлаған тартҡылар нағышланған.**

Ҡырғыҙҙарҙа "ҡуш элмә"гә оҡшаш "илмедос" (тамбурҙың "ильме" атамаһынан) тип аталған йөй ярҙамында ҡайыу ебәкептән бәрхәт, буҫтау, замша туҡымаларҙа һәм йөн еп менән кейеҙҙә башҡарылған. Башҡорттарҙа кейеҙ ерлектә сигеү йолаһы XX быуатта юҡҡа сыҡҡан. Әммә ҡырғыҙҙарҙың бер баҫма сығанаҡта күрһәтелгән кейеҙ түшәгендәге һәм Арышпар ауылындағы кейеҙҙән эшләнгән ат япмаһы тышлығындағы орнаменттарҙың (үрмәксе ауы һымаҡ эслекле мөһөр (ҡояшҡа оҡшаш (соляр) орнамент) оҡшашлығы ҡырғыҙ һәм башҡорттарҙың ҡайыу традициялары тамырҙаш булыуына ишаралай.

Н.В. Бикбулатовтың ҡусҡарлы ҡайыу техникаһы һәм орнаменттары башҡорттарҙың һәм ҡайһы бер хәҙерге төрки халыҡтарының (ҡырғыҙ, төркмән һ.б.) ата-бабалары Себерҙең көньяғында һәм уға яҡын Азия төбәктәрендә бик тығыҙ аралашҡан, хатта "бер этник берлек сиктәрендә" булған тәүге осорҙа килеп сыҡҡан, тигән фекере менән килешергә мөмкин. Был традицияларҙың бик борондан килеүен башҡорттарҙың урын тартҡыларындағы ҡатмарлы ҡусҡар биҙәктәрҙең айырым бер төрҙәре дәлилләй ала. Биҙәктәр Алыҫ Көнсығыш халыҡтарының ҡуш спираль һымаҡ орнаменттарында урын алған аждаһалар, ҡоштар һәм башҡа зооморф мифик заттар менән ассоциация тыуҙыра. Башҡорттарҙа бындай мотивтар нисек барлыҡҡа килеүе мәсьәләһенә асыҡлыҡ индереп, тамъяндар һәм башҡа уларға яҡын ырыуҙар бик борон Амур буйы манжур халыҡтары менән бәйләнеш тотҡан көнсығыш төрки-монгол конгломератына ингән, тип фаразларға була (төркиҙәр һәм монголдарҙың Алыҫ Көнсығыш халҡы менән бәйләнештә булыуын этнографик һәм археологик тикшеренеүҙәр иҫбатлай).



*Ебәк еп менән бәрхәт тартҡыға сигелгән хикмәтле биҙәк. В.М. Шутова һүрәте.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЗАМАН БАШҠОРТО*

**Башҡорт халҡының милли геройы Салауат Юлаевты Ер шарының бөтә нөктәләрендә beләләр тиһәк, бер ҙә арттырыу булмаҫ, моғайын. Шуға ҡарамаҫтан, милләттәштәребеҙ араһында Салауатов фамилиялы кешеләр бик һирәк осрай. Быға, һис шикһеҙ, Екатерина Икенсенең Емельян Пугачев етәкселегендәге 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе Салауат Юлаев исемен яңы тыуған малайҙарға ҡушмаҫҡа тигән Указы сәбәпсе. Шулай булһа ла, ул заманда ла легендар батырыбыҙҙың исемен балаларына ҡушҡан ҡыйыу башҡорттар булған.**
**Ишембай районы Хажы ауылында ла бар Салауатов фамилияһын йөрөткәндәр. Уларҙың береһе, атап әйткәндә, Радик Салауатов - Мәләүез ҡалаһында билдәле кеше. Халыҡҡа юридик һәм консультация ярҙамы күрһәткән агентлыҡтың тәжрибәле етәксеһе булараҡ ҡына түгел, ә йәш быуынға башҡортлоҡ рухы, илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү йүнәлешендә алып барған тынғыһыҙ эшмәкәрлеге менән дә хөрмәт ҡаҙана ул. Милли рухта тәрбиәләнгән егет - 1988-1996 йылдарҙа Мәләүез ҡалаһы һәм районында әүҙем эшләгән "Көнгәк" йәмәғәт ойошмаһының иң һуңғы һәм иң йәш ағзаһы. Тап ошо йәмәғәт ойошмаһына йөрөгәндә башҡорт халҡының данлы үткәне, арҙаҡлы шәхестәре менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башлай. Был башланғысына нигеҙ, әлбиттә, тыуған ғаиләһендә һалынған. Бөгөн иһә ул үҙенең белемен һәм тормош тәжрибәһен йәш быуын менән ихлас уртаҡлаша. Радик Йәһүҙә улы менән һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы әңгәмә ҡорорға мөмкин. Бөгөн уның менән "Заман башҡорто ниндәй булырға тейеш?" тигән һорауға яуап эҙләнек.**

# АТАҢДЫҢ ҒЫНА УЛЫ БУЛМА...

## халҡыңдың да улы бул



- Мин, ғәҙәттә, ир-егеттәрҙе шартлыса өс төркөмгә бүләм: берәүҙәр үҙе өсөн генә йәшәй. Һөҙөмтәлә ундайҙар бер кемгә лә кәрәкмәй, йәғни уларҙы киләсәктә бер кем дә иҫләмәйәсәк. Икенселәре ғаиләһе, яҡындары өсөн генә тырыша һәм туғандары иҫән булғанда ғына уларҙың хәтерендә һаҡлана. Өсөнсөләре үҙе һәм ғаиләһенән тыш, йәнә йәмғиәт өсөн дә йәнен фиҙа ҡылырға әҙер. Бына шундайҙар башлыса халыҡ күңеленән урын ала. Был фекерем башҡорт халҡының "Атаңдың ғына улы булма, халҡыңдың да улы бул" тигән әйтеменә тура килә.

Әйткәндәй, ғалим-социологтар тарафынан да был күренеш иҫбатланған. Үрҙә атап кителгәндәрҙең өсөһө бер бөтөндө тәшкил иткәндә генә кеше тулыһынса бәхетле була ала: үҙен һәм маҡсаттарын бойомға ашырһа, ятаҡан кешеләренең һөйөүен, йылыһын, кәрәклеген тойһа һәм ижтимағи тормошта үҙ урынын тапһа, йәғни йәмғиәткә файҙа килтереүҙән шатлыҡ кисерһә. Шуныһы ғәжәп: һуңғыһы хатта мөһимерәк тә! Заман башҡорто нәҡ шулай булырға тейеш, тип уйлайым.

Мин үҙем өс бала атаһы булараҡ, уларға тормош иптәшем менән атай-әсәйҙәребеҙ беҙгә өйрәткәнде һәм үҙебеҙ белгәндең барыһын да бирергә тырышабыҙ. Туған телгә, Ватанға һөйөү ғаиләлә һалына. Ошо мәлде үткәреп ебәрмәҫкә кәрәк. Башҡорт телен өйрәнегеҙ, тыуған ерегеҙҙе яратығыҙ тип түгел, ә үҙ өлгөбөҙҙә тәрбиәләйбеҙ. Бергәләп концерттарға, тамашаларға, илһөйәрлек темаһына арналған киноларға йөрөйбөҙ, улар буйынса фекер алышабыҙ. Әйткәндәй, ошо көндәрҙә тарихсылар менән бергә Салауатовтар нәҫеленең шәжәрәһен төҙөнөм. Һөҙөмтәлә ун ике быуынды барлап сыҡтым. Шуның менән бик ғорурланам һәм туғандарым да ошо хисте кисерәләр тип ышанам. Балаларыма үткәнһеҙ киләсәк юҡлығын аңлатырға тырышам. Ә тарихыбыҙ беҙҙең данлы! Йәш быуын атай-олатайҙары үткән юлда оялырлыҡ, ғәрләнерлек бер нәмә лә булмауын белеп, арҙаҡлы шәхестәребеҙ менән ғорурланырға тейеш. Ошо тойғоно кисергәндә генә улар туған телдә аралашыуҙан оялмаясаҡ.

Төп эшемдән һәм ғаилә бурыстарынан тыш, "Яугир" хәрби-илһөйәрлек клубы төбәк йәмәғәт ойошмаһында йәш быуынды сәләмәт тормошҡа, спортҡа ылыҡтырыу, уларҙы шәхси һәм рухи яҡтан үҫтереү өлкәһендәге эшмәкәрлеккә етди иғтибар бүләм. Ғөмүмән, мин һәр ваҡыт йәмғиәт тәрбиәһен, егеттәргә лидерлыҡ сифаттарын тәрбиәләүҙең әһәмиәтен беренсе урынға ҡуям.

Билдәле булыуынса, башҡорттарҙың быуаттар буйы идара итеү формаһы ҡор, ырыу йыйыны булған. Шатлығын да, ҡайғыһын да, проблемаларын да уртаға һалып, йәмәғәтселек хәл иткән. Бөтә эшен тиерлек өмә менән башҡарған. Яу килгәндә бергә күтәрелгән, балаларҙы ла дөйөм көс менән тәрбиәләгән. Ғөмүмән, башҡорт өсөн сит бала булмаған. Рәсәй сиген һаҡлаған ирҙәрҙең балаларын тәрбиәләү эшендә оло бабайҙар, инәйҙәр, күршеләр - бөтәһе лә үҙ өлөшөн индергән.

Бөгөн арабыҙҙа ғаилә тарҡалыу сәбәпле, атай тәрбиәһе күрмәгән балалар бик күп. Күпме милләттәшебеҙ вахта менән ситтә эшләй. Тиҫтәләгән, йөҙләгән мең! Был ваҡытта уларҙың балалары компьютер артында ултыра, урамда йөрөй. Әгәр ҙә беҙ ошо аталары ситтә йөрөгән милләттәштәребеҙҙең балаларын бөгөн тейешенсә тәрбиәләмәһәк, тиҙҙән бөтөнләй икенсе быуын киләсәк. Шуға күрә, үҙен башҡорт тип иҫәпләгән һәр кем үҙе лә сәләмәт тормош алып барырға, спорт менән шөғөлләнергә, белем алырға, матди тороҡлоҡҡа ынтылырға, үҙенең ырыу тарихын өйрәнергә һәм һәр ерҙә, һәр ваҡыт башҡаларҙы үҙенең артынан эйәртергә, йәш быуынға өлгө күрһәтергә тейеш! Бының өсөн күп тә кәрәкмәй: әйләнә-тирәгә иғтибарлыраҡ баҡһаң, шул етә. Кемгә кәңәш бирә алаһың? Күрше малаймы ул, ике туғаныңмы, дуҫыңдың балаһымы? Ҡулдан килгәнсә ярҙам итергә кәрәк. Үҙең уңышлы булыуың ғына аҙ, милләттәшеңә күтәрелергә булышлыҡ ит. Һин һалған рух орлоғо шытып сығыуы оҙаҡ көттөрмәҫ. Ул артабан бала менән бергә үҫер, нығыныр һәм киләсәктә аяғында ныҡлы баҫып торған, башҡортлоғо менән ғорурланған, милләте киләсәге өсөн яуаплылыҡ кисергән шәхес булыр.

Үҙемдең бала сағымды хәтерләйем. Каникул ваҡытында ауылға ҡайтһам, таныш булмаған берәй оло кеше менән иҫәнләшмәһәм, улар мине туҡтатып, кем улы булыуымды һораша, кеҫәһенән кәнфит сығарып бирә лә, олатайға сәләм күндерә. Сәләмде тапшырғас, мотлаҡ олатай менән етди һөйләшеү була. Ул ауылда бөтә кеше, таныш булмағандары менән дә һаулыҡ һорашырға кәрәклеген аңлата. Бына шулай итеп улар беҙҙе, балаларҙы, күмәкләп тәрбиәләй ине. Урбанизация менән бәйле был күренеш юғала бара, әлбиттә. Әммә тәрбиәнең ошо формаһы, йәғни йәмғиәт менән тәрбиәләү бөгөн бигерәк тә көнүҙәк.

"Яугир" хәрби-илһөйәрлек клубы ошо йәһәттән 2020 йылды Йәштәр йылы тип иғлан итте һәм үҫеп килеүсе быуынға әхлаҡи-рухи, илһөйәрлек тәрбиәһе биреү, уларҙы сәләмәт тормошҡа ылыҡтырыу йәһәтенән маҡсаттар билдәләне.

Туған телгә һөйөү уятыу, үҫтереү йүнәлешендә эш алып барыу мөһим, сөнки башҡорт телендә һөйләшкән, уҡыған, концерт-театрға йөрөгән кеше булмаһа, беҙҙең тырышлыҡ ҡына бер нәмәгә килтермәйәсәк. Әгәр ҙә үҙ телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе, тарихыбыҙҙы белмәһәк, өйрәнмәһәк, хөрмәт итмәһәк, беҙҙе бер кем дә ихтирам итмәҫ. Мәҫәлән, урамға сыҡҡас, күршең менән, ниндәй милләттән булыуына ҡарамаҫтан, "Сәләм!", "Һаумы!" тип иҫәнләш. Магазинда тауар һатып алғас, һатыусыға үҙ телеңдә рәхмәт белдер. Башҡорт кешеһе һиңә урыҫса өндәшһә, аңламағанға һалыш. Шулай иткәндә, бик тиҙҙән эргәңдә туған телендә һөйләшкәндәрҙең күбәйеүен күрерһең. Быны тымыҡ күлгә таш ырғытҡас, һыу өҫтөндә барлыҡҡа килгән түңәрәк менән сағыштырырға була. Таш ни тиклем күберәк булһа, шул тиклем түңгәләктәр ҙә йышыраҡ һәм ҙурыраҡ. Тормошта ла шулай: әгәр ҙә һәр беребеҙ бәләкәй генә "таш" ырғытһаҡ та, телебеҙ, мәҙәниәтебеҙ, милли үҙаңыбыҙ үҫешер. Бөтә нәмә фәҡәт үҙебеҙгә бәйле.

**Лена АБДРАХМАНОВА**
**яҙып алды.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ШАНЛЫ ТАРИХЛЫ ҠАҢЛЫЛАР БЕҘ!

V быуатта йәшәгән әрмән авторы Лазарь Парбский Кура йылғаһы буйында Кангар өлкәһе булыуы хаҡында яҙһа, VII быуатҡа ҡараған әрмән географик әҫәрендә Анания Ширакаци Иверия (Грузия) провинцияһындағы Кангарҙы иҫкә ала. Сирия сығанаҡтарының береһендә 542 йыл тирәһендә Иран шаһы Хосров Анушировандың Әрмән һәм Грузия илдәре сигендә йәшәүсе һангарае йә иһә кангарае халҡына ҡаршы поход ойоштороуы хаҡында яҙыла. Ә ғәрәп сығанаҡтарында шул уҡ шаһтың Дербент ҡалаһынан төньяҡтараҡ урынлашҡан Бурджан иленә ҡаршы һуғыш хәрәкәттәре алып барыуы теркәлә. Тимәк, ошо архаик замандарҙа уҡ Ҡаңлы һәм Бөрйән ырыуҙары башҡорттарының ата-бабалары билдәле бер тарихи бәйләнештә булған, был уларҙың этник яҡтан Туран дәүләтселеге сиктәрендә формалашыуын раҫлай.

IV-V быуаттарҙа Урта Азия аренаһында яңы ҡәүемдәр - хиониттар һәм эфталиттар өҫтөнлөк ала. Кангарҙың Чач ҡалаһы эфталит батшаһы Хушнаваз ҡулына күсә, бында сүкелгән тимер тәңкәләргә яңы тамға ҡуйыла. VI быуаттың икенсе яртыһында был тарафтарҙы төркиҙәрҙең Фандж исемле батшаһы ғәскәре менән баҫып ала, һәм ошо хаҡта "Шаһнамә"лә ошондай юлдар бар:

*"Башында яугир*
*юлбашсы Фандж булды,*
*Диңгеҙ өҫтөнән күккәсә*
*төтөн юлланды,*
*Чач сиктәре ғәскәр менән*
*шулай тулды,*
*Гөлзәриүн дә, сәскә*
*баҡсаһылай, алланды".*

Төрки ҡағанаты осоронан (VI-VIII б.б.) Кангар хаҡында әллә ни ентекле мәғлүмәт ҡалмаған. Шулай ҙа төрки принцы һәм сардар Күлтегингә арналған руник ташъяҙмала шундай юлдар бар: "...артҡа (көнбайышҡа. - **Ред. иҫк.**) Кенгу Тарманға еткәнсе шул рәүешле беҙ төрки халҡын урынлаштырҙыҡ һәм унда тәртип булдырҙыҡ". Ғалим С.Г. Кляшторный ошо Кенгу Тармандың "Канг ҡәлғәһе" мәғәнәһендә булыуын фаразлай ("тарбанд" тигән фарсы һүҙе "ябыҡ ҡапҡа", йәғни ҡәлғә мәғәнәһендә ҡулланылып, төркисә әйтелештә "тарман" формаһын алыуы мөмкин; Дербент ҡалаһының атамаһы ла ошо мәғәнәлә). Шулай уҡ ошо руник яҙмала 712 йылда баҫҡынсы ғәрәптәр һәм төркиҙәргә ҡаршы баш күтәргән тюргештар менән тиңһеҙ алышҡа сыҡҡан кенгерес халҡы ла иҫкә алына, уларҙың шул уҡ кангарҙар булыуына шик юҡ.



Евразия далаларында Бөйөк Төрки ҡағанаты хакимлыҡ иткән замандарға ҡараған сығанаҡтарҙа дала халыҡтарының этник йөҙөн сағылдырған яҙмалар табылған. "Суй-шу" ҡытай хроникаһы авторы Вэй Чжэн (629-636 й.й.) башҡорт исемле ҡәүемде ба-шу-ки-ли формаһында теркәп ҡалдырған (ҡытай телендә булмаған "р" өнө урынына "л" ҡулланыла). Ул замандарҙа башҡорттар Төньяҡ Кавказдан Арал диңгеҙенә тиклем ерҙәрҙе биләгән аландарҙан төньяҡ-көнсығыштараҡ, йәғни Арал диңгеҙенән төньяҡҡа табан Көньяҡ Уралғаса йәйрәп ятҡан далаларҙа көн итә. Башҡорттар менән йәнәш бәшәнәктәр берләшмәһе лә иҫкә алына - улар кангар вариҫтары була. Византия императоры Константин VII Багрянородный (905-959 й.й.) бәшәнәктәрҙең Атил (Волга) һәм Гейх (Яик) йылғалары арауығында йәшәүе хаҡында "Империя менән идара итеү хаҡында" тигән трактатында яҙа. Ул "пачинакиттар"ҙың бер өлөшөнөң шулай уҡ кангарҙар тип аталыуына иғтибар иткән, улар иҫәбенә иавдиирти, куарцицур һәм хавуксингила исемле төркөмдәрҙе индергән.

IX быуат аҙаҡтарында Арал диңгеҙе аръяғындағы далаларға төркиҙәрҙең яңы ағымы - уғыҙҙар, карлуктар һәм кимаҡтар үтеп инә. Бәшәнәк, башҡорт, баджна һәм нәүкерҙә ҡәүемдәренән хасил булған союз уларға ҡаршы тора алмай, көнбайыш тарафтарына күсеп китергә мәжбүр ителә. Уларҙың бер өлөшө Ҡара диңгеҙгә тиклем барып етеп, унда йәшәүсе венгрҙарҙы Паннонияға ҡыҫырыҡлап сығара. Тап шул ваҡытта ошо 4 ҡәүем союзы ғәскәре Византия империяһына һөжүм итеп, уның баш ҡалаһы Константинополде ҡамауҙа тота. X быуаттың ғәрәп тарихсыһы Әл Масғуди ошо хаҡта былай тип яҙа: "Һәм был [ҡәбиләләр] Баджнак, Яджна, Баджгурд һәм Наукерда. Был 320 йылдан (христиан йыл иҫәбе буйынса 942 йыл. - **Ред. иҫк.**) һуң булды. Унда улар үҙҙәренең палаткаларын ҡуйҙы, әл Кустантинийанан Румийаға тиклемге юлды ябып".

1091 йылда бәшәнәктәр Константинополде яңынан ҡамап алғас, Византия императоры Алексей Комнин ярҙамға ҡыпсаҡ хандары Бүнәк менән Туғарҡандың 40 меңлек ғәскәрен саҡыра. Бәшәнәк яугирҙары еңелә, уларҙың ҡатын-ҡыҙҙары ла, бала-сағаһы ла тулыһынса һәләк ителә. Шулай итеп, бәшәнәк халҡының тарихы трагедия менән тамамлана. Уларҙың иҫән ҡалған өлөшө башҡорттар менән бергә Венгрияға ҡасып китә. Бында улар король армияһында яугирлыҡ хеҙмәтен башҡара. 1241 йылда Венгрия бәшәнәктәре һәм башҡорттары Батый хан ғәскәренә ҡаршы үлемесле яуҙарҙа ҡатнаша, байтағы һәләк була. Әйтергә кәрәк, башҡорт-бәшәнәктәрҙең бер өлөшө тарихи тыуған илдәренә ҡайта. Ошо ваҡиғалар башҡорттарҙың "Уҙаҡ менән Туҙаҡ - балабәшнәк ярсығы" тигән эпосында сағылыш тапҡан.

Әммә заманында үтә ҡеүәтле һәм күп һанлы булған ҡаңлылар тарих аренаһынан юғалмай: Алтын Урҙа дәүерендә һәм унан һуңғы осорҙа уларҙың вариҫтары өлөшләтә башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай, ҡырғыҙ, ҡарағалпаҡ һәм үзбәк халыҡтары составына инеп китә.

Урта быуаттарҙа уғыҙҙар составында ла ҡаңлы ҡәбиләһенән сыҡҡан этник төркөмдәр була. XIII быуатта сельджукидтарҙың Кесе Азиялағы Конья солтанаты ерҙәренә, монгол баҫҡынсылары ҡыҫымынан ҡасып, кайи-канглы (Cayi-Khanli) ҡәбиләһе күсеп килә. Кайы-ҡаңлыларҙың юлбашсыһы Эртогрул бей Византия сигенән алыҫ булмаған ерҙәрҙә үҙ бейлеге тирәһендә ошондағы ерле төрки ҡәүемдәрен берләштереп, киләсәктә Осман империяһы тип аталасаҡ ҙур һәм көслө дәүләткә нигеҙ һала.

XII быуатта йәшәгән ғәрәп географы Әл Иҙриси ҡыпсаҡтар тарафынан буйһондоролған уғыҙҙар илендә Хандга ере булып, уның халҡын хангакиши, тип атай. Был атамалар Канглы һәм Канглы кешеһе тигәнгә тура килә. XIV быуатта ғәрәп энциклопедисы Ән Нувайри Дәште Ҡыпсаҡ ерҙәрендә көн итеүсе ҡәбиләләр составына Кангароглы исемлеһен дә индерә. Кангар ҡәбиләһе боронғо осорҙарҙан бирле аҫыл нәҫелле заттарҙан һаналып, Дәште Ҡыпсаҡта ла дан һәм хөрмәт ҡаҙанған ҡәүемдәр рәтенә ингән. Монголдарҙың чингизидтар империяһында ҡаңлылар үҙаллылығын ахырынаса юғалтып, төрлө олоҫтар составында тарҡау хәлдә йәшәй. 1236 йылда Хубилай хан Ҡытайҙа ҡыпсаҡ һәм ҡаңлыларҙан үҙенең гвардияһын төҙөй. Ә Сүбедәй багатур, Батый хан һәм Мунке хан походтарында ҡатнашҡан ҡаңлы яугирҙары башлыҡтарынан Айбай, Сокнак-тегин, Айбобаяут, Хайду исемләләре монголдар тарихында теркәлеп ҡала.

Тарихсы-этнолог Р.Ғ. Кузеев ҡаңлы ырыуы вәкилдәренең көньяҡ-көнбайыш Башҡортостан ерҙәренә үтеп инеүе XIII-XIV быуаттарға ҡарай, тип яҙа. Әммә ул был фаразды башлыса ҡаңлы этнонимы менән генә бәйләп аңлата. Тарихсы Салауат Хәмиҙуллин X-XI быуаттарҙа уҡ бәшәнәктәр менән союздаш булған башҡорттар араһында ҡаңлыларҙың да ата-бабалары булыу мөмкинлеге хаҡында фекер йөрөтә. Унынса, хатта ки Кангюй эпохаһы (б. э. тиклем II быуат - б.э. III быуаты) замандарында уҡ кангар субстратының боронғо башҡорт этносы формалашыуында ҡатнашыуын фаразларға була. Шуныһы ҡыҙыҡлы, үҫәргән ырыуы башҡорттары риүәйәттәрендә уларҙың төп бабаһы тип һаналған Мөйтән бейҙең ҡаңлы ырыуынан булыуы хаҡында мәғлүмәт килтерелә. Тарихсы Л.С. Толстов фекеренсә, Мөйтән эпонимы ҡасандыр Хорезмда көн иткән мүйтән исемле этник төркөм исеме менән бәйле. Р.Ғ. Кузеев та торнаның ҡаңлы һәм үҫәргән ырыуҙарының уртаҡ онгоны (ҡошо) сифатында күрһәтелеүенә иғтибар иткән. Ошо ғалим үҫәргәндәрҙең башҡорттар составындағы иң боронғо этник субстрат булыуын да фаразлай.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 5,7-се һанда).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Дивизияның тыуыуы

101-се атлы артиллерия дивизионы командиры итеп капитан С.Н. Сәйетов, комиссары - өлкән политрук С.Ш. Шакирйәнов, штаб начальнигы - капитан М.З. Ҡурамшин ҡуйыла. 112-се айырым зенит батареяһы командиры вазифаһында - капитан А.М. Шаһимәрҙәнов, комиссары - М.Т. Тәхәүетдинов була. Дивизия артиллеристары араһында башҡорт командирҙары байтаҡ: 313-сө атлы полктың 76 миллиметрлы батареяһы командиры Сәйфулла Хәбиров (1943 йылдың майынан - 148-се артиллерия-миномет полкы командиры, 1944 йылдан - гв. подполковнигы); 275-се атлы полктың шундай уҡ батареяһы командиры, лейтенант Шамил Рәхмәтуллин (1943 йылдың сентябренән гвардия капитаны званиеһында 14-се гвардия атлы дивизияһында артиллерия-миномет полкы командиры итеп ҡуйыла); 294-се полктың батарея командиры, майор Сафа Мөтиғуллин; 101-се атлы артиллерия дивизионының батарея командиры, өлкән лейтенант Мөғин Нагаев (һуңынан - гвардия майоры, Ленин ордены кавалеры); батарея командиры урынбаҫары, гвардия майоры Миңлеғол Гәрәев (һуңынан 148-се гвардия артиллерия-миномет полкының штаб начальнигы).

Дивизияның медицина хеҙмәтенә лә тәжрибәле врачтар, фельдшерҙар йәлеп ителә. Улар иҫәбендә медицина хеҙмәте майоры, баш хирург Әхмәт Дәүләтовты, санитария хеҙмәте начальнигы, медицина хеҙмәте майоры Александр Сарыгинды, врач-хирург Ҡәҙриә Ҡотлобаеваны, врач, медицина хеҙмәте майоры Тәлғәт Байбуринды, медицина хеҙмәте лейтенанты, фельдшер Һылыу Әхмәтованы, врач, медицина хеҙмәте майоры Анна Маневичты, 275-се атлы полктың өлкән врачы, 3-сө ранглы хәрби врач К.М. Хомяковты һәм башҡа медицина хеҙмәткәрҙәрен әйтергә була.

1943 йылдың февраль аҙағынан дивизия командиры вазифаһына тәғәйенләнгән гвардия генерал-майоры Г.А. Белов үҙенең командиры, полковник Миңлеғәли Шайморатовты айырыуса оло хөрмәт менән иҫкә ала, уның Граждандар һуғышында ла, 1941 йылда Мәскәү эргәһендәге ҡанлы бәрелештәрҙә шәхси батырлыҡ менән бер рәттән, командир булараҡ, ҙур оҫталыҡ һәм хәрби профессионаллыҡ сифаттарын күрһәтеүен билдәләп үтә. Г.А. Белов дивизияға хеҙмәткә саҡырылған командирҙар составына ла яҡшы баһа бирә. Үҙенең "Путь мужества и славы" исемле хәтирәләр китабында ул 275-се полк командиры, майор Таһир Кусимов хаҡында бына ниҙәр яҙа:

"Ул бәләкәйҙән үк физик хеҙмәт менән шөғөлләнә, Таһирға атлы ғәскәр сафтарында хеҙмәт итеү еңел бирелә. Ул ҡылыс менән сабышыуҙа бик оҫта була, хәрби учениеларҙа етеҙ һәм тапҡыр эш итә. Былар барыһы ла уны башҡа яугирҙар араһында ныҡ айырып күрһәтеп тора. Ул кесе командир булып китә, шунан кавалерия училищеһына йүнәлтмә ала. Таһир Ҡыҙыл Армия командиры булып китә. Ул һуғышҡа тиклем 15 йыл атлы ғәскәр сафтарында хеҙмәт итә, рядовойҙан полк командирына тиклем хәрби хеҙмәттең барса баҫҡыстарын үтә."

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

4

# Тыуған телем!

22-28 февраль (шаҡай) 2020 йыл
№8 (894)

БӘХӘС ҠОРО

## ШТРАФ ТҮЛӘТӘЙЕК

**Баймаҡҡа аҡса ебәрергә уйлап, өйөбөҙ эргәһендәге почта бүлексәһенә барҙым. Был эш артыҡ мәшәҡәтһеҙ генә атҡарылыр, тип уйлағайным, тик улай булып сыҡманы. Бланктың кәрәкле урындарын тултырып бөттөм дә, бер ыңғайы хат өсөн бүлегенә әсәйемә бер-ике ауыҙ һүҙ ҙә яҙып ҡуйҙым. Быға тиклем дә шулай итә инем. Тик был юлы ҡабул итеүсе почта хеҙмәткәре минең бланк артындағы башҡортса яҙған хатымды күрҙе лә, хеҙмәтләндереүҙән баш тартты. Хатты урыҫса яҙырға ҡушты. Минең аңлатырға маташыуҙарым да бушҡа ғына булып сыҡты. Аҡсаны тиҙерәк ебәрергә кәрәк ине, шуға ла почта хеҙмәткәре менән артыҡ бәхәс ҡуптарып торорға теләмәнем. Бланкты яңынан тултырып, уны хатһыҙ ғына ебәрҙем. Әсәйемә урыҫса хат яҙғым килмәне. Килмәне генә түгел, телем дә әйләнмәне, ҡулым да барманы.**

Бер уйлаһаң, иғтибарға лайыҡ та түгел кеүек әлеге ваҡиға. Ярай, башҡортса хат тексын асыҡ бланкта ебәреп булмай икән дә, ти. Ә шулай ҙа бер минең хат менән генә бәйле шәхси проблема түгел бит был. Башҡортостан Республикаһы тип аталған илдә рус теле менән бергә дәүләт теле булып йөрөгән башҡорт теле ҡасан тулыһынса ғәмәлгә ашырыла башлар һуң? Эш бит бына нимәлә тора...

Гәзиттәрҙә йыш ҡына телебеҙҙе боҙоуҙар тураһында әсенеп яҙылған хаттар баҫыла. Һәр халыҡ хәҙер үҙ телен камиллаштырырға, байытырға, уны артабан үҫтерергә һәм һаҡларға тырыша. Был - тәбиғи хәл. Халыҡты халыҡ иткән - ул тел һәм рух. Телһеҙ халыҡ булмай. Белеүемсә, француздар француз телен яҡлау буйынса бик күп саралар үткәрә. Уларҙың закондарында француз телен боҙоп яҙған йәки урынһыҙға сит телдәр һүҙҙәрен ҡулланған өсөн ҙур ғына штрафтар ҡаралған. Ошондай уҡ саралар Венгрия Республикаһында ла ҡабул ителгән. Уғыр тел төркөмөнә ҡараған венгрҙар үҙҙәрен уратып алған ят тел мөхитенән үҙ-үҙҙәрен элек-электән бик ныҡ һаҡлаған һәм әле лә сит тел йоғонтоһона бирелмәү өсөн төрлө саралар күрә. Төрөктәр ҙә ошондай уҡ сараларҙы ҡуллана. **Минең уйымса, беҙҙең республикабыҙҙа ла закондар сығарыу органдарына төрлө рәсми иғландарҙағы, яҙыуҙарҙағы башҡорт телендәге хаталар өсөн, йәиһә башҡорт теленең, әле мин телгә алған миҫалдағы кеүек, ҡулланыу даирәһен тарайтырға тырышыуҙар өсөн штраф түләтеү тураһында закон ҡабул итеү мәсьәләһен күптән күтәрергә кәрәк. Һалынған штрафтар ғәйепләләрҙең кеҫәһе өсөн һиҙелерлек булырға һәм мотлаҡ түләтелергә тейеш. Шунһыҙ, ундай сараны ҡулланып тороу ҙа кәрәкмәй.** Әгәр дәүләт телдәрендәге хаталар өсөн штраф күләме һиҙелерлек булһа һәм бындай штраф һалыу һүҙҙә генә ҡалмайынса, мотлаҡ тормошҡа ашырылһа, файҙаһы буласаҡ, тип уйлайым. Шунһыҙ, беҙ төрлө тәҡдимдәр, декларациялар менән генә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ ғәмәлгә ашыра алмаясаҡбыҙ. Был законды һанға һуғырға теләмәгән кеше өсөн бик һөҙөмтәле тәрбиәүи сара.

Закондарҙың төп функцияларының береһе - ғәйепле кешенең мотлаҡ аласаҡ язанан ҡурҡыу тойғоһо. Шуға күрә, башҡорт телен ғәмәлгә ашырыуҙа иң һөҙөмтәле сараларҙың береһе - ҙур штраф суммалары булырға тейеш. Кем дә кем "Башҡортостан Республикаһында дәүләт телдәре тураһында"ғы БР Законын һанға һуғырға теләмәй, уны инҡар итә - ул кеше, йәки ойошма ҙур штраф түләргә тейеш. Һанға һуҡмау яңынан ҡабатланһа, был юлы тәүгеһенән дә ҙурыраҡ штраф түләтергә мөмкин. Тик шундай саралар менән генә ғәмәлгә ашырырға булалыр тел тураһындағы законды. Гәзит уҡыусылар ни уйлай икән был турала?

**Зәкирйән ӘМИНЕВ.**

УЙЛЫҒА -УЙ

**Утыҙ һигеҙ йыл мәктәптә эшләгән дәүерҙә халыҡ мәғарифының әллә ни хәтле үҙгәрештәр кисереүенә шаһит булырға, төрлө эксперименттарҙа ҡайнарға тура килде. Заманың ниндәй - йәшәйешең дә шундай шул. Глобалләшеү, төрлө технологиялар үҫеше осоронда йәшәйбеҙ. Заманыбыҙға ярашлы мәктәптәрҙә дәреслектәр ҙә әленән-әле үҙгәреп тора. Ярай ҙа ул дәреслектәр балаларҙың аң кимәлен, психологик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып төҙөлһә...**

## КӨСЛӘП АСҠАН КҮҘҘЕҢ...

### яҡтыһы булмай



Үткән йыл бер әсәнең беренсе синыф балаһына дәрес әҙерләргә ярҙам иткәненә шаһит булырға тура килде. Бала Федераль дәүләт мәғариф стандарты талаптарына ярашлы төҙөлгән "Букварь" китабы буйынса уҡый икән (авторҙары: Р.Н.Бунеев, Е.В.Бунеева, О.В. Пронина). Дәрестә Кк, Нн хәрефтәрен өйрәнгәндәр. Ҡыҙыҡ өсөн генә бер дәрестә ошо хәрефтәр менән ниндәй һүҙҙәр өйрәнгәндәрен яҙып алғайным: Луганск, Кострома, Коломна, Инта, Курск, Клин, Минск, Котлас, Игарка, Лимпопо, Нара, Ока, Миссисипи, Монако, Кама, Миссури, Курган, Токио, Ниагара, Нил, Осака, Крит, Нагасаки, Канары, Осло.

Бала ауырлыҡ менән уҡыны был ят һүҙҙәрҙе. Бер дәрестә генә анау хәтлем географик атамаларҙың мәғәнәһен беренсе класс балаһының мейеһенә һеңдереп буламы? Уҡытыусыһы тиреһенән сыға яҙып аңлатырға тырышҡан хәлдә лә, был һүҙҙәр баланың аңына барып етмәгәненә иманым камил. "Миссури", "Ниагара", "Монако" һ.б. һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен аңлатыр өсөн әллә нисә дәрес кәрәк. Берәй ауыр хәл килеп тыуһа, үҙ илен биш тингә һатыр сит ил граждандарын тәрбиәләйбеҙме икән ни, тип аптырауға ҡалдым. Әсәй кеше:

- Сит телдән кергән һүҙҙәрҙең нимә аңлатҡанын һорап ҡуймаһа ғына ярар ине, тип ҡурҡып ҡына торам, ҡайһы берҙәрен үҙем дә белмәйем бит, - тине, әсенеп.

- Әллә стенағыҙға ҙур карта элеп ҡуяһығыҙмы? - тигән булдым, аптырағас.

Хатта карта элгән хәлдә лә был һүҙҙәрҙең мәғәнәһе баланың аңына барып етмәйәсәге көн кеүек асыҡ бит.

Белорет педагогия училищеһында уҡыған саҡтарҙы, беҙгә тырышып-тырмашып белем биргән, уҡытыусы һөнәренә һөйөү тәрбиәләгән уҡытыусыларымды һәр саҡ һағынып, ҙур хөрмәт менән иҫкә алам. Белем биреп кенә ҡалмаған, бөтөн яҡтан да тормошҡа әҙерләп сығарған бит улар беҙҙе. "Башланғыс класс уҡытыусыһы" дипломын алып сыҡһаҡ та, һигеҙ йыллыҡ мәктәптәрҙә эшләгәндә башҡа предметтар менән бер рәттән рәсем, музыка, хеҙмәт, физкультура дәрестәрен дә уҡытырға тура килә торғайны. Практика ваҡыттарында уҡытыусыларыбыҙ: "Дәрестә балаға аңлашылмаған бер генә һүҙ ҙә ҡалырға тейеш түгел", - тип, һүҙлек өҫтөндә эшкә ныҡ иғтибар бирерҙәр ине. Аңлашылмаған һүҙҙәрҙе айырым карточкаларға яҙып, һүрәтен йәки, мөмкин булһа, әйберҙең үҙен килтереп күрһәтер инек уҡыусыларыбыҙға.

Һуңғы йылдарҙа Федераль дәүләт мәғариф стандарттары тип, бөтә башланғыс синыф балаларын юғарыла телгә алынған дәреслек менән уҡыта башланылар. Быйылғы йылдан беренсе синыф балалары икенсе "Букварь"китабын ("Школы России") уҡый. Был дәреслек тәүгеһенә ҡарағанда күпкә уңайлыраҡ. Нисек кенә булһа ла, элекке дәреслектәр тыуған иленә, халҡына ҡарата һөйөү, ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләне. Хәҙер беренсе космонавтың кем һәм уның ҡасан йыһанға осҡанын белмәгән балалар бар.

Бөтә мәктәптәрҙә лә балалар Федераль дәүләт мәғариф стандарттары буйынса уҡытылырға тейеш, тип, уҡытыу пландарынан йылдан-йыл төбәк компоненттары ҡыҫырыҡлап сығарыла килә.Һәр милләт балаһы үҙ телендә һөйләшһә, ата-бабаларынан ҡалған мираҫты, йырҙарҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, йолаларҙы өйрәнһә, насармы ни? Үҙ илебеҙҙә, Башҡортостаныбыҙҙа йәшәп, ике генә сәғәт әсә телен уҡытып, балаға ниндәй белем, тәрбиә биреп була? Бигерәк тә ҡала мәктәптәрендә бер класта телде белгән балалар менән бөтөнләйгә белмәгән балалар бергә уҡыһалар, бынан ни файҙа? Оптималләштерәбеҙ, аҡсаны һаҡсыл тотонабыҙ, тип ваҡытты бушҡа әрәм итеү, балаларҙы ыҙалатыу, туған телгә ҡарата нәфрәт тәрбиәләү була бит был. Аҙаҡ быларҙың эҙемтәләре нисек булыр икән? Үҙ телен белмәгән, бәләкәй илен яратмаған бала ҙур илдең патриоты була алырмы?

Һәр милләт балаһында тәбиғи милли үҙенсәлек (природосообразность) һаҡланырға тейеш, тип иҫәпләйем. Ата-бабаларҙан быуаттар буйына мираҫ итеп тапшырыла килгән тәрбиә, донъяуи белем ауыр хәл-ваҡиғаларға тарығанда әҙәм балаһына ярҙам итмәйенсә ҡалмай. Атайымдың бер фронтовик таныШының яҙмышы тураһында һөйләгәне хәтеремдә уйылып ҡалған. Һәр иртә яҙҙан беҙҙең ауыл кешеләре, Нөгөш буйлап һал ағыҙып, ялан яҡ кешеләренә һаттылар. Атайым һалға сыҡҡан һайын дуҫ-иштәрен, хеҙмәттәштәрен күреп, хәл-әхүәлдәрен белеп, күңеле күтәрелеп килер ине. Бер саҡ ул һуғыш ваҡытында әсирлеккә эләгеп, ғәрәп илдәренең береһенә барып сыҡҡан танышы менән осрашыуын, уның бәйән иткәндәрен беҙгә лә һөйләп ултырҙы: "Күмәк әсирҙәр туйынып ултырабыҙ, - тигән ул. - Беҙҙән әҙ генә ситтәрәк ғәрәптәр урынлашҡайны. Туйынып бөткәс, ғәҙәтем буйынса, "Аллаһу әкбәр!" тип, битемде һыпырып ҡуйҙым. Кинәт мине ғәрәптәр һырып алдылар ҙа ниндәй сүрәләр белеүем тураһында һораша башланылар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бер сүрә лә белмәнем шул. Ҡайһылай булһа ла, шул ғәрәптәр миңә Тыуған илемә ҡайтырға ярҙам иттеләр..."

12-се Башҡорт лицейында эшләгән саҡта башланғыс кластарҙа "Шәжәрә" байрамы үткәргәйнек. Башҡорт балалары ла, башҡа милләт балалары ла был сараға ихлас әҙерләнеп, матур итеп шәжәрәләрен төҙөп килделәр. Ғорурлыҡ менән үҙҙәренең ата-бабалары тураһында һөйләнеләр, хатта ғаилә архивынан булған иҫтәлекле әйберҙәрен дә килтерҙеләр. Сығышы менән Баттал ауылынан булған икенсе класс балаһы бик борон ауылдарына Баттал исемле олатаһы нигеҙ һалыуы тураһында һөйләне. Ул, күҙҙәрен осҡонландырып: "Ҙур үҫкәс, улым тыуһа, Баттал исемен ҡушам", - тип өҫтәп ҡуйҙы. Ошо түгелме ни тыуған ерендә, халҡына оло мөхәббәт, быуындар бәйләнеше, күсәгилешлелек!

Хоҙай Тәғәлә халыҡтарҙы төрлө милләт кешеләре итеп яралтҡан, шулай булғас, бөтәһен бер тараҡ менән тарау урынлымы? Йәмғиәтебеҙҙә кешене асылынан яҙҙырыр аҙғын тормош, талау, үлтереш тураһында көнө-төнө төрлө яҡлап мәғлүмәттәр ағылған заманда, баланы туған телендә һөйләшеүҙән, тарихыбыҙҙы, мәҙәниәтебеҙҙе өйрәнеүҙән мәхрүм итеү урынлымы? Уйлағыҙ, йәмәғәт! Көсләп асҡан күҙҙең яҡтыһы булмай. Һәр бала үҙ туған телендә һөйләшергә, шәжәрәһен, тыуған еренең тарихын белергә, батырҙары менән ғорурланып үҫергә тейеш, шул саҡта ғына беҙ милләт булып һаҡланып ҡала алырбыҙ.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы**

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# ХӘТӘР МАТУРМЫ,

## әллә яман матурмы?



**Республикабыҙ районларында таралған бихисап һөйләшеү диалекттары, уларҙың ҡайҙан килеп сыҡҡаны хаҡында йыш ҡына уйланып, сағыштырырға яратам.**

Элегерәк, медицина институтында уҡыған осорҙа, тыумышы менән Миәкә районынан булған бер егет һөйләшендә "ғәйәт", "бик", "ифрат" һүҙҙәре урынына "хәшәрәт" һүҙен ҡуллана ине. Уның "хәшәрәт матур" йә иһә "хәшәрәт тәмле", "хәшәрәт көслө" тиеүҙәре әле булһа хәтеремдә. Урыҫ теленә тура әйләндереп ҡарағанда, "отвратительно вкусно" тигән һымағыраҡ килеп сыҡһа ла, уның айырыуса интонация менән әйткән был һүҙҙәре барыбер аңлашыла. Хәшәрәт һүҙенең тамырына барып етеп ҡараһаң, ғәрәпсәнән - бөжәк (урыҫса - насекомое) тип тәржемәләнә. Күпселек районда уны ниндәйҙер берәй ерәнес нәмә йә берәй бысраҡ, хатта насар кеше хаҡында һөйләгәндә ҡулланалар. Әсә Стәрлебаш яҡтарында һинән ниндәйҙер аптыратырлыҡ яңы хәбәр ишеткән әңгәмәсең: "Кит, хәшәрәт, ысынмы?" - тигән һымағыраҡ итеп үҙенең ғәжәпләнеүен белдерә.

Баймаҡ яғында иһә, берәй сифатты көсәйтеп күрһәтер өсөн башлыса "ғәләмәт" һүҙе йөрөй (мәҫәлән, "ғәләмәт яҡшы", "ғәләмәт шәп" йә иһә , киреһенсә, "ғәләмәт яман"). Ә күп кенә башҡа райондарыбыҙҙа "хәтәр" һүҙен ҡулланалар. Ғәрәпсәнән ҡурҡыныс (урыҫса - опасность) тип тәржемәләнгән был һүҙ ҙә халҡыбыҙ ләғәтендә киң таралған. "Хәтәр һылыу", шул уҡ ваҡытта "хәтәр насар" тип тә һөйләшәләр. Ҡайһы берәүҙәрҙең "матур" һүҙен көсәйтеү өсөн хатта уның антонимын ҡулланыуҙарын да ишеткәнем бар. Әлеге үҙебеҙҙең Баймаҡ тирәһендә бәгзе берәү ныҡ матур нәмәне "яман матур" тип тә әйткеләй. Минең Фазылйән исемле бик белемле мулла олатайым була торғайны. Ул нимәнелер хуплағанда "хайран дөрөҫ" йә "хайран матур" тип әйтер ине ("хайр" - ғәрәпсәнән яҡшы тип тәржемәләнә). Ә инде йыш ҡына күптәребеҙ ҡулланған "ифрат" һүҙе башҡортсаға "айырыуса" тип тәржемәләнә (ғәрәп-урыҫ һүҙлегендә ифрат - выделять, отделять, изолировать, ябайыраҡ итеп әйткәндә, "особенно" тигән мәғәнәгә эйә).

Тағы ла бер йыш ҡына осраған һүҙебеҙ хаҡында ла уйланғанығыҙ барҙыр, моғайын. Берәй ҙур нәмәне "бик елле" тип әйтәләр. Элегерәк мин уны "ел" һүҙе менән бәйләргә маташып ҡарағайным. Уны татар телендә "бик жиллә" тиҙәр. Ғәрәп һүҙе "жиллә" башҡортсаға "ҙур" тип тәржемәләнә. Татар теленә был һүҙ үҙгәрмәй генә инеп киткән.

Берәй кешенең хәле, һаулығы, үҙтойғоһо хаҡында һүҙ алып барғанда "ул әле шә-әп", тип әйтәләр беҙҙең яҡта. Мин ошо һүҙҙе лә тиҙ йөрөү, тип, урыҫсаға әйләндергәндә "быстрый" тигән мәғәнәле итеп аңлай инем. Ә ғәрәпсә "шәәп", тип бер аҙ ғына һуҙып әйтелгән был һүҙ "йәш" (молодой) тигәнде аңлата икән. Йәғни, ул әле әллә ни ҡарт түгел, шәәп тигән һымағыраҡ мәғәнәлә, тигән һығымтаға килдем. Тиҙлекте аңлатҡан "шәп" һүҙенең дә ошонан килеп сығыуы бик ихтимал...

"Тәүфиҡ" һүҙенең мәғәнәһен элегерәк "Ағиҙел" журналы һандарының береһендә бер автор башҡортса "тәү" тигән һүҙ менән ялғап аңлатырға маташҡайны. Ә ысынында иһә, ғәрәп телендәге "үафәҡа" (соответствовать, гармонировать) һүҙе алдына "тә" ижеге ҡушылып, исемгә әйләнеп, ошо һүҙҙе тәҙөй. "Шайтан мәләғүн", "Гитлер мәләғүн", тигән һүҙҙәрҙе лә ишеткеләйбеҙ. Ләғәнә - ғәрәпсә ҡарғау, проклинать. Ләғнәт - проклятие, ә мәләғүн - проклятый... "Нәфсеһен тыя алмаған кеше", тигән һүҙбәйләнешкә иғтибар итәйек. "Нәфсе" ғәрәпсәнән "йән" (душа) тигәнде аңлата. Һуңғы осорҙа "шәжәрә" һүҙен йыш ҡулланабыҙ. Уның да ғәрәпсәнән "ағас" тип тәржемәләнгәнен күптәребеҙ белмәйҙер.

Тиҫтә быуат элек динебеҙ менән бергә килеп ингән ғәрәп һүҙҙәренең аҙым һайын осрауына ғәжәпләнеп бөтә алмайһың. Ә инде биш быуат урыҫтар араһында йәшәп тә, рус һүҙе беҙҙең ләғәттә бик аҙ ғына булыуы тағы ла аптырарлыҡ. Йәғни, шөкөр, урыҫ һүҙҙәре беҙгә әллә ни "йоҡмағанлығы" һиҙелә.

Туғандарға, таныштарға ошо хаҡта һөйләй башлаһаң, күптәре ысынлап та ғәжәпләнә. Һүҙҙәребеҙҙең тамырын белеү һәммәбеҙ өсөн ҡыҙыҡ һәм барыбыҙға ла кәрәктер, тип һанайым.

**Хөрмәт ҠЫУАНДЫҠОВ.**

ИШАРА

# БЕСӘЙ ҘӘ ОТА...

**Гәзитебеҙ сит телдәрҙе өйрәнеүҙең ыңғай яҡтары тураһындағы фекерҙәрҙе лә яҙып тора. Шуларҙың береһен уҡып сыҡтым да, шағирыбыҙ Рәми Ғариповтың "Туған тел" шиғыры исҡә төшөп, бөтә булмышымды биләне. Күптәр яттан беләләр был шиғырҙы:**

**Мин халҡымдың сәскә ҡуңеленән**
**Бал ҡортондай ынйы йыямын,**
**Йыямын да йәнле ынйыларҙан**
**Хуш еҫле бер кәрәҙ ҡоямын.**

Эйе, башҡорт телебеҙ ынйылай гүзәл. Шағир яҙғанса, "Көслө лә ул, бай ҙа, ағымлы ла..." Әлбиттә, халыҡ ижадын, сәсәндәр һүҙен бар гүзәллеге, нескәлеге менән тойоу, аңлау бар кешегә лә тәтемәй. Төрлө милләттәрҙең теле ҡыҫырыҡланған дәүерҙә үҙ телендә аралашҡан ғаиләлә үҫеү, башҡорт телен, әҙәбиәтен уҡытҡан уҡытыусынан уныу мөһим. Телдәр тураһында бер көләмәс тә бар бит. Бер бесәй өйөнөң мөйөшөндә яңы өң күреп ҡалып, "Унда сысҡан барҙыр, ул сысҡан йүгереп сығыр ине лә, тиҡ был тирәлә бесәй барҙыр тип уйлап, ҡурҡып ултыралыр, шуға ла йүгереп сыҡмайҙыр", тип ҡайғыра. Ысынлап та, ул өңдәге сысҡан "Яҡты бүлмәгә сығып уйнап килер инем дә, унда бесәй барҙыр", тип боҫоп ултыра икән. Ә бесәй "Әллә эт булып өрөп ҡарарғамы, эт булған тирәлә бесәй йөрөмәй бит, тип уйлар ул сысҡан", тип уйлап ала ла, тырышып-тырышып өрөүгә оҡшаш өндәр сығара. Ә сысҡан "Эт өрә, тимәк, унда бесәй юҡ", тип шатланып, яҡты бүлмәгә йүгереп сыҡһа, уны бесәй эләктереп алып, ҡабып та йота һәм үҙе: "Ҡайһылай һәйбәт икән үҙ телеңдән башҡа тағы бер телде белеүең", - тип ялана...

Беҙгә лә һәйбәт, башҡортса ла, русса ла иркен аралашабыҙ. Беҙҙең урамда "Йомарт" тигән магазин асылғас, ул магазин хеҙмәткәрҙәренә тәүҙә башҡортса өндәштем, аңламаһалар ғына рус телендә һорау бирҙем. Шулай итеп, биш ҡыҙыҡайҙың башҡорт балаһы икәнен белдем. Улар хәҙер йылмайып, минең менән башҡорт телендә һөйләшә. Миңә лә, уларға ла күңелле. Үҙебеҙҙең башҡорт мөхитен барлыҡҡа килтерҙек бит. Йәнә, кеше икә телде яҡшы белһә, бүтән телдәрҙе өйрәнеү һәләттәренең артып китеүен ғалимдар бик күптән иҫбат иткән.

Һеҙгә хат яҙып нөктә ҡуйҙым да, бесәй тураһындағы көләмәс урынһыҙ һымаҡ, был хаҡта юҡҡа ғына яҙҙым, тип үкендем. Бер милләт тә икенсеһен "йотмаһын" ине һәм телдәрҙе белеү хакимлыҡ итеү өсөн генә ҡулланылһын ине, тигән уйға килдем.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҺҮГЕНМӘЙЕК!

### Ул йоғошло сир һымаҡ

**Үҙем йәшәгән мөхиттә һүгенеүселәр юҡ. Шуға урамда, магазиндарҙа һүгенеү һүҙе ишетеп, тиҙерәк был аламалыҡтан ҡасырға ашығам. Бигерәк тә йәштәрҙең, үҫмерҙәрҙең һүгенеүе ҡүңелдә ҡыра.**

Һүгенеүҙе йоғошло ауырыуҙыр ул, тип уйлап ҡуям. Иҫемдә, дүртенсе синыфта уҡығанда Вәсилә исемле әхирәтем бер ай санаторийҙа дауаланып, "һүгенеү" сирен алып ҡайтты. Тәүҙә беҙ аптырап тыңланыҡ, әкренләп ул сир бөтәбеҙгә лә йоҡто. Арлы-бирле һүгенеү һүҙҙәре бүлмәбеҙҙә ишетелә башланы. Шулай ҙа мин һүгенеү алама, оят икәнен һиҙә инем, һүгенмәнем. Быуа беҙҙе пионерҙар сафына ҡабул иттеләр. Ниндәй пионер әрләшеп йөрөһөн инде? Һөйләшеүебеҙ тап-таҙаға әйләнде.

Халҡыбыҙҙың йомартлыҡ, ҡунаҡсыллыҡ, ихласлыҡ кеүек матур үҙенсәлектәрен йәмһеҙләп, һүгенеү һүҙҙәре ишетелеп ҡала. 60-сы йылдар ине, ике туған апайымдан: "Нинә башҡортса һөйләшәһегеҙ, ә урыҫса һүгенәһегеҙ?" тип һорамайынса булдыра алманым. Апайым: "Беҙ нимә тип һүгенгәнебеҙҙе аңламайбыҙ, аңламағас, оят түгел", - тине. Ауылдарға электр уты ла, радио ла, газ да барып етмәгән, юлдар тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Ә һүгенеү барып еткән. Ысынлап та, һүгенеү бик яуыз инфекция икән.

Минең бер тәҡдимем бар: һәр бер кеше һүгенеүсене яман ғәҙәтенән дауалаһын. Яңыраҡ ҡына асылған магазиндағы бер һаҡсының телефондан һүгенеп тороуын ишеттем дә, түҙмәйенсә, иҫәнләшкән булып, хәлдәрен һораштым. Егеттең яуаплағанын да көтөп тормайынса: "Һиҙәм, бик һәйбәттән түгел хәлең",- тип өҫтәнем. Ул ҡаушап ҡалды ла: " Ҡайҙан беләһегеҙ?"- тип ҡыҙыҡһынды. Мин уға: "Әҙәм доға уҡығанда Аллаға мөрәжәғәт итә. Аллабыҙ уға ярҙамға фәрештәләрен йүнәлтә. Әгәр кеше һүгенһә, иблискә өндәшә. Фәрештәләр ҡурҡып ҡаса, шуға тормош ҡатмарлаша. Һүгенмәй йәшәп ҡара әле", - тинем. Егет аптырап, ҡаушабыраҡ тороп ҡалғайны ул саҡ. Һуңынан да ул егетте күрергә тура килде. Итәғәтле генә йылмайып, һаулыҡ һораша хәҙер. Ауыҙынан һүгенеү ҙә ишетелмәй. Хәҙер алама ғәҙәтен ташлағандыр, тип ышанғы килә...

**Айгөл АХУНОВА.**

### Үҙебеҙ ҙә иҫкәртә йөрөйөк

**Башҡорт халҡының тарихында булмаған хәл ул бысраҡ һүҙҙәр һөйләү. Ата-бабаларыбыҙҙың эске мәҙәниәтенә, рухи тәрбиәһенә был күренеш бөтөнләй ят булған. Бөгөнгө һөйләшеүебеҙгә иғтибар итәм дә, бик ғәрләнәм, йөрәгем ҡайнай.**

Баланы матур һөйләшергә өйрәтеү, рухын-мәҙәниәтен тәрбиәләү иң тәү сиратта ғаиләгә бәйле. Атаәсәһе һүгенә, эсә, йәмһеҙ ҡылана икән, бала барыбер быны күреп үҫәсәк. Икенсе тәрбиә урыны - мәктәп. Балаларҙы ойоштороусы, бергә туплап тәрбиәләүсе булараҡ, мәктәптә белем биреү генә түгел, дөрөҫ тәрбиә биреү ҙә төп маҡсат булырға тейеш. Быныһ өсөн уҡытыусыларҙан һәм өлгөлө уҡыусыларҙан торған айырым комиссия төркөмө булдырыу, балл системаһы ойоштороп эшләү ҙә етә. Әҙәпле балаларҙы туплау уларҙа яуаплылыҡ тойғоһо тыуҙыра, ынтылыш бирә, башҡаларының иһә уларға эйәреүенә булышлыҡ итә. Кемдең нисә тапҡыр һүгенеүен тикшереп, балл системаһында штраф һалырға мөмкин.

Мәҙәниәт-сәнғәт аша ла һүгенеүгә ҡаршы көрәш алып барырға кәрәк. Рәсәй телеканалдары, радиоһы һүгенеү һүҙҙәре менән тулы. Маршрут автобустарының эсенә ниндәй генә алама һүҙҙәр йәбештермәйҙәр. Һәр урында дөрөҫ тәрбиәүи система ҡуйылырға тейеш.

Йәшерәк саҡтарҙа Данияла, Финляндияла булырға тура килгәйне, мин шунда милиция хеҙмәткәрҙәренең эш тәртибенә иғтибар иттем. Милиция унда төрлө төркөмгә бүленмәгән, йәғни юлдар өсөн - айырым, участкалар өсөн айырым милиция түгел. Милиция хеҙмәткәрҙәре бөтә төр тәртипһеҙлектәрҙе лә контролдә тота. Улар башлыса әхлаҡ һағында торусылар ролен үтәй. Беҙҙә лә ошо системаны булдырырға күптән ваҡыт. Менәр һумлаған штраф һалып, һүгенгән кешенең тирә-яҡтағы кешеләрҙең кәйефен төшөрөүенә сик ҡуйғанда нимәгәлер өлгәшергә булыр ине. Беҙ үҙебеҙ ҙә ошондай тәртипһеҙ кешеләр янынан битараф ҡына үтеп китеп, йөҙҙә ситкә бормайыҡ. Шелтәләйек, иҫәтәйек уларҙы. Бигерәк тә йәштәрҙе төҙәтә, иҫкәртә йөрөргә кәрәк.

**Кәрим СӘЛИХОВ.**

* * *

Иҫенә килгәндә бүлмәһендә, үҙ карауатында ята, күҙен асыу менән уға Анна Дмитриевна эйелде:

- Катенька... ҡәҙерлем. Һинең уянғаныңды көтәбеҙ.

Екатерина тороп ултырырға теләп ынтылды, ян-яғына ҡарап эҙләнде. Хужабикәһе уға стакан менән һыу һуҙҙы ла, серле йылмайып, ишеккә китте. Тотҡаға үрелгәс, боролоп ҡараны:

- Тағы иҫеңде юйма инде. Былай ҙа ҡото алынды. Индерәм.

Анна сығып китеүгә һаҡ баҫып Ҡазыхан инде. Инде лә ишек төбөндә тапана биреп торҙо.

- Әйҙә... үт, - башҡортса өндәшкәне үҙ ҡолағына сәйер булып яғылды Екатеринаның. Тыуған телендә һөйләшмәгәненә лә күп йылдар булған бит. Онотоуға онотмаған, уйынан сыҡҡаны ла юҡ, тик өндәшеп өйрәнмәгән, был йәмғиәттә, был өйҙә уның теле берәүгә лә кәрәкмәй.

Ҡазыхан карауат янына килеп баҫты. Аяҡтарын төшөрөп, урын ситендә ултырған ҡатын ҡалҡынып торорға ҡыймаңы, тағы ҡолап ҡуйыуҙан ҡурҡтымы, йәнәшәһендә урын күрһәтте. Бер килке шымып, йәнәш ултырҙылар. Икеһенең дә йөрәктәре генә дөпөлдәне. Ахырҙа, Ҡазыхан Екатеринаның тубығында ятҡан ҡулын алып усына ҡыҫты. Ниндәйҙер яҡынлыҡ, аралағы күҙгә күренмәҫ ваҡыт ҡоймаһын емерерлек бер ым кәрәк ине. Ҡатындың быны эшләй алмаҫын аңлаған ир, уны яурындарынан тотоп, үҙенә борҙо ла, күкрәгенә ҡыҫты. Екатерина уның түшенә йөҙөн йәшерҙе. Был ҡулдарҙы, был ир еҫен, был яҡынлыҡты ул бит таный... онотмаған. Аҙыраҡ өйрәнгәс, ҡулдары менән ҡосаҡлап алды, киң арҡаһы, олпат яурындары буйлап үтте, һаҡал-мыйыҡлы сикәләрен, кәпәс аҫтында баҫылып тәпәрләнгән сәстәрен һыпырҙы. Йөҙөнә, күҙҙәренә төбәлеп-төбәлеп ҡараны. Ир ҙа уның маңлайына, танауына, нәфис эйәк һыҙатына ҡағылды, урап-һыҡтырып ябынған яулығын сисеп, түбәгә төрөп ҡуйылған толомдарын төшөрҙө, уларҙы тотоп-тотоп еҫкәне, сикә-муйын тирәһендәге ут эҙен бармаҡ һырты менән һыпырҙы, йөҙ-тәҫөнөң һәр өлөшөнә йотлоғоп-йотлоғоп баҡты.

- Шәмсиҡәмәр... был бит һин? - тип һаман бер һорауын ҡабатланы ир.

- Мин... Ә һин? Мине йортонда ҡалдырып киткән... Ҡазыханмы?

- Эйе. Һинең ирең Ҡазыхан.

- Ирем?.. - Был һүҙҙе лә тәүгә ишеткәндәй, барыһы ла сәйер, бик сәйер...

- Эйе. Мин һине алырға килдем.

- Алыр-ға... Нисек таптың мине?

- Һинең хужабикәңде таныған кешеләр булды. Үҙенде лә баҙарҙа иҫләүселәр табылды. Һорашып... төпсөнөп, эҙләп таптым.

Әлеге хәлгә, халәтенә ышана, ҡаршыһындағы ирҙең әйткәндәрен яҡшылап аңлай алмай Екатерина... Екатерина? Кем ул хәҙер? Кем буласаҡ ары? Ниндәй ғүмер, ниндәй исем менән йәшәйәсәк?

- Ҡазыхан... Һин ҡайҙа булдың улай оҙаҡ?

- Мин хеҙмәттә булдым, һылыуым, батша хеҙмәтендә.

- Шулай оҙаҡ... Егерме... нисә йыл? - ҡатын үҙ алдына һөйләнгәндәй шыбырлап ҡына һорай.

- Егерме өс йыл булды, Ҡәмәр. Беҙҙең айырылышҡанға егерме өс йыл тулып үтте. Үҙе бер ғүмер...

- Ә мин йылдар һанын юғалттым... Оҙаҡ, ныҡ оҙаҡ йәшәйем һымаҡ...

- Ҡәмәр, - Ҡазыхан һүҙҙәрҙе һайлап ҡына алырға тырыша, - һин нисек тере ҡалдың? Мин ике йыл илдәмен инде. Ындағы хәлдәрҙе ишетеп белә инем, әммә ул хәтлем үк аяныстыр тип уйламағайным. Ауылда... Ауыл урынында булдым... Унда... йәш сауҡалыҡ ҡалҡып килә. Зыярат ҡалған...

- Ауылдан беҙ Еҙбикә менән икәү генә сығып киттек. Башҡаларҙың барыһы ла... беҙҙең балалар, ҡайным, ҡәйнәм, еңгәйҙәр... шунда ҡалды... ут эсендә...

Ҡазыхандың эске көсәргәнеше ҡатындың ҡулын ҡыҫҡан бармаҡтарында ғына белдендә:

- Улым... Бурансым... ҡурҡтымы?

- Мин йылғанан йүгереп килгәндә ҡайның һалдаттарға ҡаршы сыҡҡайны. Уны сәнстеләр... Ҡәйнәм... бәләкәстәр менән өйгә бикләнде... Уларҙы яндырҙылар...

- Еҙбикә ҡайҙа? Һинең менән түгелме?

- Еҙбикә юҡ... Һәләк булды. Беҙ уның менән башта Өфөлә инек, ул шунда...ҡалды.

- Һин нисек... былай?

- Минме?.. Мин Анна Дмитриевна ҡулына тура килеп кенә тере ҡалдым. Минең йәшәүемә сәбәптәрем булды, Ҡазыхан. Уларҙы һиңә яйлап...

Анна Дмитриевнаның улдары тураһындағы тарихты бер ҡасан да, бер кемгә лә һөйләмәскә ант иткәйне Өфөнән сығып киткән көндәрҙә Екатерина. Анна, үҙ сиратында, иренең үлем сәбәптәрен һәм ул төндә булған хәлдәрҙе үҙе менән ҡәбергә алып китергә тип һүҙ бирҙе, ә ахирәтенән улдарына бәйле серҙе мәңге һаҡлауын үтенде. Әлегәсә шул килешеүгә тоғролар. Ҡатын шуға телен тешләне.

- Ниндәй сәбәптәр?




- Ҡазыхан...

Ир ҡапыл әҙә һораны:

- Һин әллә ирҙәме?

Екатерина аптырап китте:

- Ю-уҡ...

Ҡазыхан еңел тын алып ебәрҙе:

- Тимәк... беҙ һаман да ирле-бисәле.

Екатерина ысынбарлыҡҡа ҡайтҡандай булды:

- Беҙ... Мин... Анна Дмитриевнаның крепостной крәстиәне... Мин... суҡындырылған... христиан динендә. Исемем дә Шәмсиҡәмәр түгел... Екатерина мин... күптән... онотҡанмын инде ҡасандан...

- Ике йыл элек, Өфөлә саҡта беҙҙең волостан алып киленгән башҡорттарҙы эҙләгәйнем. Ауылдаштарҙы ла таптым хатта... Барыһы ла суҡындырылған... балалар ҡайҙан, кем икәндәрен дә белмәй үҫкән. - Ир менән ҡатын тағы ла бер әмәл һүҙһеҙ ҡалып, һәр кем үҙ уйҙарына батып ултырҙы. Ахырҙа, тағы ла Ҡазыхан беренсе булып телгә килде:

- Берәй яйы булыр... Бушҡа ғына беҙҙе ҡабаттан осраштырмағандыр Хоҙай Тәғәлә.

- Нисек булыр икән, Ҡазыхан? Ҡалайтырбыҙ хәҙер?

- Хәҙер... хужабикәң менән һөйләшермен. Һине килеп күреп йөрөргә рөхсәт һорармын. Мин ҡала ситендәге хәрбиҙәр ауылында йәшәйем, хеҙмәттәмен. Киләһе аҙнала, барин ҡайтҡас, уның менән осрашырмын. Моғайын, берәй нәмәһен хәл итербеҙ...

- Хайран булырһың... Ике айҙан Анна Дмитриевна кейәүгә сыға. Буласаҡ ире Кавказ яғында, хеҙмәт иткән ерендә йәшәй. Туйҙан һуң ул да шунда күсәсәк һәм мине лә үҙе менән алырға тейеш ине.

- Нисек? Китергә йыйынаһыңмы?

- Инде... юҡ. Һине күрмәһәм, әгәр, теге мәл... Күсеп китеп барһам... Ҡазыхан, беҙ был ғүмерҙә күрешмәҫ тә инекме икән? Әле шуны уйлап, башым етмәй.

- Борсолма, Ҡәмәр. Бынан ары беҙ юғалмаҫбыҙ. Мин һине хәҙер ҡалайтһам да ҡайтарып алам... Ҡалайтһам да.

* * *

Артабанғы айҙарҙа Ҡазыхан ялға асыҡҡан һайын Готовтың йорто янында пәйҙә булды. Уны унда ашҡынып Екатерина көтөп торҙо. Ир менән ҡатын йә бүлмәлә һөйләшеп ултырҙылар, йә йәнәш атлап, ҡала урамдарын ҡыҙырҙылар. Тик уларҙың бергә булыу мәсьәләһе ҡапыл ғына хәл ителмәне. Дөрөҫөрәге, бөтөнләй хәл ителмәй торғандай булды башта. Дмитрий Ярославович ҡыҙы Аннаның һөйләүенән Екатеринаның кем һәм ҡайҙан булыуын яҡынса белә ине. Тик был мәғлүмәтте башҡа ялсылар ишетмәҫкә тейеш тип тыйғайны. Әле килеп шул ҡатынды әллә ҡасан айырылышҡан һәм донъяла барлығын да белмәгән ире эҙләп тапҡан, имеш. Һәм ысынлап үҙен ҡатындың иремен тип таныҡтан хәрби килде, ҡатынын кире ҡайтарырға теләүен белдерҙе. Ысынында, Екатерина - ҡыҙына вафат булған ире Светозаров исеменән күскән милек, үҙе нисек телəй, шулай итә ала. Хатта крепостнойлыҡ тамғаһын алып, ирек тә биреп ебәрә ала. Әммә бында икенсе һорау - ике диндәге кешеләрҙе нисек итеп бер ғаилә - ирле-ҡатынлы итеү тигән өлөшө аңлашылып етмәй. Сиркәү патриархына хәл итеүҙе һорап мөрәжәғәт иткәйне Дмитрий Ярославович, ҡырҡа кире яуап алды: "Христиан динле ҡатын бер нисек тә икенсе дин кешеһенең ҡатыны була алмай",- тигән аңлатма бирҙе сиркәү. Ҡарт дворянин, ҡалала хөкүмәтендә ниндәй генә дәрәжәле урын тотҡанда ла, сиркәүгә ҡаршы бара алмай ине. Шунлыҡтан, уға былар ға әлеге яҙманы тоттороуҙан башҡа сара ҡалманы.

Беренсе ынтылыш уңышһыҙ булһа ла, Ҡазыхан бирешергә, артҡа сигенергә теләмәне. Ул барлыҡ йыйған жалованиеһына адвокат яланы ла Петербург ҡалаһы судына мөрәжәғәт итте. Былдай эшкә уныһын да табыуы ҡыйын ине, ярай, Дмитрий Ярославовичтың үтенесе менән ризалашты берәү. Тик ул да ниҙмәлер сығара алыуҙарына өмөт бирмәне. Һәм шулай булды ла. Батша хөкүмәтенә ҡаршы ихтилалға күтәрелгән халыҡтың әлеге хәлгә ҡағылышлы мәсьәләһен көлкөгә күтәрҙе судьялар. Улар был һорауҙы әҙәпһеҙлек, хатта тупаҫ ҡыйыулыҡ тип тапты. Әммә Ҡазыхан өсөн был инде булдырыу-булдырмау түгел, ә йәшәү-йәшәмәү өсөн көрәш ине. Ул үҙенең егерме өс йыл "ышаныс һәм хаҡлыҡ менән" батшаға хеҙмәт итеүен, Рәсәй дәүләтен яҡлап, ете йыл поляк ерендә, биш йыл Прибалтикала һуғышыуын, туғыҙ йыл сик һаҡлауын һәм бында ҡайтҡас, өсөнсө йыл запастағы хәрби көс составында булыуын теҙеп яҙҙы. Екатеринаның да хужабикәһенән, уның егерме йыл ғаиләнең тоғро хеҙмәтсеһе булыуын, ҡасандыр эшләнгән "хаталарын" тир һәм хеҙмәт менән таҙартыуын, бөгөнгө көндә тыңлаусан һәм күндәм христианка икәнлеген тәфсирләтеп ҡағыҙға төшөртөп алды. Һәм ошо ҡағыҙҙар менән уларҙың эшен ҡабаттан ҡарауҙарын һорап, Юғары дәүләт законлар сығарыу, үтәтеү һәм суд хакимлығы органдарына - идара итеүсе Сенатҡа барҙы. Сенат өсөн дә был мөрәжәғәт ҙур яңылыҡ булды. Хаким итеүселәр төркөмө икегә бүленде. Беренселәре "ихтилалсы, боласы халыҡты шаштырыу ҡәтғи тыйыла" тине, икенсе яғы "мөрәжәғәт итеүселәр шәхсән ихтилалда ҡатнашмаған" тип яҡланы. Тауыш ҡупты. Оло шау-шыу менән барған беренсе ултырыш аныҡ ҡына ҡарар сығара алманы. Ҡазыхан был асыҡланмаған яуап менән тағы ла Готов йортона килде.

- Ҡазыхан, әгәр килеп сыҡмаһа... беҙгә көрәшеүҙе лә тыйырҙар микән? - тип өҙгәләнде Екатерина.

- Ул хаҡта уйлама. Һиңә әллә бында ҡырын ҡарайҙармы?

- Юҡ та... Анна Дмитриевна беҙҙең өсөн борсолоп тора. Атаһы баринды ла туҡтауһыҙ тартҡылай. Тик улар ҙа көсһеҙ бит, күрәһең.

- Һин генә өмөтөңдө өҙмә, йәме, Ҡәмәр? Ышан миңә, ишетәһеңме? Берәй яйы булырға тейеш. Ынғай яғы сығыр. Ил өсөн ҡанын түккән яугирҙың һүҙен ишетергә тейеш улар... һәм ишетәсәктәр ҙә!

* * *

Тағы ла дүрт айҙан ғына йыйылған Сенаттың икенсе ултырышы ла бик ғауғалы барып, ике көнгә һуҙылып, мөрәжәғәт итеүселәр яғын алыуҫыларҙың еңеүе менән тамамланды. Унда ла сиркәүҙең шартын ҡабул итеүҙән генә өҫкә сыҡты ҡарарҙары. Ә сиркәү былай тине: христиан динендәге ҡатын тик христиан динендәге ир генә өйләнә ала. Ҡазыханды шул залда уҡ христианлыҡҡа ауҙарып суҡындырҙылар. Бынан һуң ғына Екатеринаның крепостнойлыҡтан азат ителеүе тураһындағы ҡағыҙы үҙ ҡөсөнә инде. Аҙаҡ поп был ир менән ҡатынды ирле-ҡатынлы итеп бәйләп ҡуйҙы. Тағы ла һуңғараҡ, ҡатынын Готов йортонан етәкләп алып сығып киткәс, Петербургта хеҙмәт итеүсе мосолман хәрбиҙәренең муллаһы булған адығый-черкес хәҙрәте уларға йәшерен рәүештә никах уҡыны. Шул кисте был икәү ҡабаттан Ҡазыхан менән Шәмсиҡәмәр булып, ҡаланың иҫке генә бер хәрбиҙәр каруанһарайы бүлмәһендә ҡауышты.

* * *

Ҡатынын Ҡырҡтытау аша алып ҡайтып бара Ҡазыхан. Тауҙар мөһабәтлегенә һоҡланып, урман һиллеген тыңлап, үҙәк шишмәләренең сылтыр һыуын ауыҙлап, ҡабаланмай, хисләнеп, уйланып киләләр. Тау үренә менеп еткәс туҡтатты ир: ошонда ҡунып китәйек, тине. Ҡатыны усаҡ тоҡандырып, тамаҡ ҡайнортты. Ҡазыхан уның ут тирәһендә мәшәҡәтләнеүен ҡарап-күҙәтеп итты ла, һорап ҡуйҙы:

- Никахтан һуң ошо ерҙә йоҡлап ҡалғайныҡ... иҫләйһеңме? - уның тауышындағы һағышты тойоп алған ҡатыны "йәлп" итеп ҡарап алды:

- Шул урынмы ул? - Ә бит үҙе шул ҡәҙерле төндө хәтеренә алып, күпме күҙ йәш түккәйне.

- Шул...

- Бына, яҙғас, тағы килдек... ҡайта алдыҡ бәхетле еребеҙгә.

Иртәнсәккә тауҙың асыҡ яғына ауҙылар. Аҫта таҫма булып борғоланған йылға ялтырап күренде.

- Ана-а... ауыл урыны, - Ҡазыхан ҡаш өҫтөнә ҡулын ҡуйып ҡарап торҙо ла, йылға ярын баҫып алған сауҡалыҡҡа төртөп күрһәтте.

- Эй... бахыр ауыл... көлгә ҡалған ауыл... Хәтерләүсе лә юҡтыр инде һине...

- Ут хәтере яҡшы... ул онотмай. Беҙ ҙә онотмайбыҙ...

- Ут хәтере? - Шәмсиҡәмәр иренә ҡыҙыҡһынып ҡараны. - Нисек ул ут хәтере?

- Ут үҙен үскә тотонғанды яратмай, тип һеңдергән беҙгә олатайҙар. Үҙен яуыз уй менән тоҡандырғанды, үрт һалғанды ныҡ хәтерләп ҡала икән ут... һәм язаһын да бирә.

Ҡатын ниҙмәнелер иҫләп, уйлана биреп баш ҡаҡты:

- Бирә... беләм.

Бер-берһен артыҡ һүҙһеҙ ҙә аңлаған ҡараштар осрашып алды.

- Ана-а, зыярат ҡарайып тора! Шул тәңгәлдән аҫҡараҡ төшөп, нигеҙ һалырбыҙ. Ата-баба төйәгенән алыҫ китеп булмаҫ, - Ҡазыхан ял тамамланыуын белдереп ҡалҡынды ла, тоған арҡаһына аҫты. Унан ҡапыл күңеле күтәрелеппме, дәртләнепме, ҡатынына ҡайырылып баҡты:

- Йүгерәбеҙме?

Үҙе тотто ла аҫҡа атылды. Ҡатыны ла күп уйлап торманы:

- Йүгерәбеҙ!

Ирле-ҡатынлы, йәш егет менән ҡыҙ шикелле булып, кәзә һуҡмағынан тау түбәнгә ҡарай йомолдолар. Үҙҙәре әлеге ҡылыҡтарынан мәрәкә табып, шарҡылдап көлдөләр. Шат тауыштары ҡаяларға бәрелеп ҡаҡлыкты ла, шаңдауыҡ булып таралды:

- Ҡазыха-ан! А-ай!.. Ҡолайы-ым! А-ах-ха-ха-ха!

- Кил! Ҡурҡма! Ҡәмә-әр йәнем! Йүгеер! Тота-ам...

**(Аҙағы. Башы 52, 1-7-се һандарҙа).**

ЙӘШӘГӘН БИТ ШӘХЕСТӘР!

**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры үҙенә нигеҙ һалыусы Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың исемен йөрөтөргә хаҡлы, ти музыка белгесе, сәнғәт фәндәре кандидаты, композитор һәм йырсының тормош юлы һәм ижадына арналған "Ғәзиз Әлмөхәмәтов. Мәҡәләләр. Хәтирәләр. Документтар" тип исемләнгән монография авторы Миләүшә Абрар ҡыҙы ИҘРИСОВА. Уның менән данлыҡлы шәхестең фажиғәле яҙмышы хаҡында әңгәмәләшәбеҙ.**

# БАҺАЛАУ ҺӘМ...

## бурысыбыҙҙы ҡайтарыу булыр был

### Ул - беренсе!

**Китап яҙған ваҡытта Ғәзиз Әлмөхәмәтов хаҡында ниндәй хәтирәләр тыңланды, ниндәй факттар асыҡланды?**

- Мин 30 йылға яҡын телевидение һәм радиола милли мәҙәниәткә арналған тапшырыуҙар, фильмдар эшләйем. Ғәзиз Әлмөхәмәтовҡа арналған телеочерк әҙерләй башлағас, Әхмәтзәки Вәлиди, Шәйехзада Бабичтар менән бер рәттә торған уникаль шәхес тураһында төплө тикшеренеүҙәрҙең, аналитик хеҙмәттәрҙең юҡлығы әсендерҙе. Шунан китте минең эҙләнеүҙәр: архивтарҙа, китапханаларҙа, Ҡаҙан, Мәскәү, Ырымбур архивтарында эшләнем. Китап яҙғанда миңә Рауза Ғәзиз ҡыҙы Әлмөхәмәтова-Латыпова бик ныҡ ярҙам итте. Ауыр тупрағы еңел булһын... Ҡурҡыныс осорға тура килгән бала сағын, 1937 йылда атаһын ҡулға алған ҡот осҡос төндә тетрәнеп хәтерләгәйне ул. Оҙаҡламай әсәһе - Мәстүрә Фәйзуллинаны ла ҡулға алалар. Әсә кеше 12 йәшлек Раузаны дуҫтары - Сабитовтар (буласаҡ композитор Нариман Сабитовтың атаәсәһе) ғаиләһенә йәшереп өлгөрә, юғиһә, уны ла, башҡа "халыҡ дошмандары" балалары кеүек үк, берәй балалар йортона ебәрерҙәр ине...

Үҙемдең эҙләнеүҙәрем мәлендә Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың милли музыка сәнғәтендәге барлыҡ өлкәләрендә тиерлек юл ярыусы икәненә ныҡлап инандым. Ул башҡорттарҙан беренсе профессиональ йырсы, беренсе композитор, беренсе концерт бригадаһын ойоштороусы, музыка белгесе, опера театрына нигеҙ һалыусы, педагог һәм йәмәғәт эшмәкәре... Ләкин был шәхесте тулыһынса, тейешенсә баһалауға беҙ, ғәмәлдә, әле яҡынлашабыҙ ғына. Йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтовты Советтар илендә белмәгән ҡала һәм ауыл булмағандыр. Халыҡтың уға булған ихлас һөйөүен иҫбатлаған миҫалдар бик күп. Мәҫәлән, очеркты телевидениеға төшөргәндә танылған яҙыусы Ғәзим Шафиҡов менән аралашырға тура килгәйне. Шағирҙың һөйләүе буйынса, уның атаәсәһе йырсының сәнғәтен шул хәтлем яратҡан, хатта уның концертына әләгер өсөн үҙҙәре йәшәгән Фрунзе ҡалаһынан башҡа ҡалаларға, башҡа республикаларға барырға ла ҡыйыныҡмаған. Әлмөхәмәтовтың ындай "фанаттары" бик күп була: концерттан һуң халыҡтың уны күтәреп вокзалға оҙатҡан осраҡтары тураһында ла хәтирәләр бар.

Ысын мәғәнәһендә халыҡ йырсыһы була ул: һирәк осрай торған матур тембрлы тауышы (драматик тенор), халыҡсан моно, йылылыҡ бөркөлгән башҡарыу манераһы, виртуоз оҫталығы менән тыңлаусыларҙы арбай, һоҡландыра, онотолмаҫлыҡ тәьҫораттар ҡалдыра. Был сифаттарҙы уның әлегәсә һаҡланған өс бөртөк яҙмаһынан да ишетергә мөмкин. Башҡарыу оҫталығына арнап БАССР-ҙың 10 йыллығына арнап яҙылған "Башҡортостан" маршы өсөн Ғ. Әлмөхәмәтовҡа 1929 йылда республикала тәүгеләрҙән булып "Башҡорт АССР-ның халыҡ артисы" тигән маҡтаулы исем бирелә.

Унда ижадсы ҡомары урғылып-ташып торғандыр, ахыры. Әле 1922 йылда уҡ, Ташкентта йәшәгән сағында ул үҙ либреттоһына "Сания" исемле опера яҙа, артабан уны С.Ғәбәши һәм В.Виноградов менән бергәләп өр-яңынан ижад итеп, 1925 йылда Ҡаҙанда сәхнәләштереүгә өлгәшә. Икенсе операһы - М.Ғафуриҙың "Эшсе" поэмаһы буйынса шул уҡ ижади төркөм тарафынан яҙыла һәм 1930 йылда ҡуйыла. Был опералар өс милләт вәкиле - башҡорт, татар һәм рус композиторҙарының ижад емеше. Ләкин юл башлаусыһы - әлбиттә, Әлмөхәмәтов. Һәм быны операларҙың музыкаль нигеҙенең тотошлай тиерлек башҡорт фольклорынан "үсеп сығыуы", либреттоларының башҡорт ерлегенә бәйлелеге иҫбатлай.

Башҡорт халыҡ көйҙәренә тоғролого өсөн Ғ. Әлмөхәмәтовты йыш ҡына матбуғатта тәнҡит утына ла тоталар. Йәнәһе, йырсы яңы тормошто данлау урынына "иҫке феодаль тормош ҡалдығы"н сәхнәгә сығара, "серегән бороңғолоҡ"тан арына алмай... Бындай "тәнҡиткә" яуап итеп, йырсы "Буранбай", "Тәфтиләү", "Зөлхизә", "Урал", "Сибай" һәм башҡа классик оҙон көйҙәребеҙҙе концерттарында йырлай, радионан башҡара, пластинкаларға яҙҙыра...

### Музыкаль театр - иң мөһиме

**Ә шулай ҙа опера һәм балет театрына Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың ниндәй ҡыҫылышы бар?**

- Уҙған быуаттың 20-30-сы йылдары - Советтар Союзында "мәҙәни революция" иғлан ителгән осор. Дәүләт программаһына ярашлы, бөтөн милли республикаларҙа ла махсус уҡыу йорттары, симфоник оркестрҙар, хор коллективтары, филармониялар асыла. Һәм ошо "революцияның" иң оло ҡаҙанышы итеп опера театры күҙаллана. Башҡортостан Хөкүмәте, был эште үҙ республикаһында етәкләүен һорап, Әлмөхәмәтовҡа мөрәжәғәт итә. Композитор ҙур теләк, оло хыялдар менән 1931 йылда Өфөгә күсеп ҡайта. Һәм ең һыҙғанып эшкә егелә: Милли мәҙәниәт институтында башҡорт мәҙәниәтенең үҫеш юлдарын билдәләй, буласаҡ опералар хаҡында пландар ҡора, шул уҡ ваҡытта концерттар биреүен дауам итә, музыка яҙа.

Әлмөхәмәтов быуыны - айырым кешеләр. Улар пассионарийҙар - алдарына юғары маҡсаттар ҡуйып, үҙ идеалдарына инанып, ошо идеалдар өсөн үҙҙәрен ҡорбан итергә әҙер шәхестәр! Ошо инаныу уларға көс-ғәйрәт, илһам биргән, әлбиттә. Әлмөхәмәтов, тәү сиратта, милли музыкаль кадрҙарҙы махсус уҡыу йортонда әҙерләүҙе хәстәрләргә тотона. Һәм ул йорт әҙ ҙә түгел, күп тә түгел, тап Мәскәү консерваторияһы булырға тейешлеген юғары кабинеттарҙа иҫбатлай, талап итә. Ниһәйәт, 1932 йылда Чайковский исемен йөрөткән иң данлыҡлы консерваторияла башҡорт бүлеге асыла! Ғәзиз Сәлих улы үҙенең арҡадаштары менән ауыл һәм ҡалаларҙа, балалар йорттарында, заводтарҙа йөрөп, талантлы йәштәрҙе йыя. Мәскәү консерваторияһы тарихында тәүге милли бүлек була ул, унан һуң татар, үзбәк, ҡаҙаҡ һ.б. бүлектәр асыла башлай. Ә башланғысын башҡорт Әлмөхәмәтов һала бит! Шундай ауыр, ҡатмарлы осорҙа ошо эшкә тотоноу өсөн ни тиклем рух көсө һәм илһөйәрлек тойғоһо кәрәк!

...Әлмөхәмәтов Мәскәүгә талантлы, ләкин музыкаль белеме булмаған йәштәрҙе килтерә. Консерватория профессорҙары уға: "Нишләп һеҙ уларҙы бында килтерҙегеҙ? Уларҙың хатта башланғыс музыкаль белемдәре лә юҡ бит! Беҙгә музыка мәктәбе, шунан училище тамамлағандар килә..."- тигән дәғүә белдерә. Әлмөхәмәтов быға ҡаршы тыныс ҡына: "Балалар Мәскәү мәҙәниәтен үҙләштерергә тейеш, шунда ҡайнап үҫергә тейеш", - тип яуап бирә. Һәм ышандыра ла бит! Ә үҙе һәр яҡлап "балаларын" ҡурсалай - уҡытыу процесын етәкләй, уларға музыкаль инструменттар, кейем, хужалыҡ кәрәк-яраҡтары һатып алып бирә. Әлмөхәмәтов ҡулы менән яҙылған кейем-һалым исемлектәре лә һаҡланған. Ә йәйге каникулда "Сәхнәгә өйрәнегеҙ!" тип, үҙенең гастролдәренә лә алып сыға. Уның шәкерттәре араһында - Баныу Вәлиева, Хәбир Ғәлимов, Ғабдрахман Хәбибуллин, Заһир Исмәғилев, Хөсәйен Әхмәтов, Рәүеф Мортазин, Мәғәфүр Хисмәтуллин... Заһир ағай Исмәғилев опера театрында Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 100 йыллығын билдәләгәндә хәтирәләре менән уртаҡлашҡайны: "Мине бер ваҡыт үҙенең ҡурайсыһы итеп концерттарына саҡырҙы. Ғәзиз ағай менән бергә сәхнәгә сығыу - үҙе бәхет ине беҙҙең өсөн... Шул көндәрҙә ул миңә йыш ҡына: "Һинә музыка яҙырға, композитор булырға кәрәк!"- ти торғайны. Ә мин ул саҡта композитор кем була икәнен дә белмәй инем..."

Ике йылдан, 1934 йылда, Әлмөхәмәтов һалған юл менән Ленинград хореография училищеһында ла башҡорт бүлеге асыла. Унда буласаҡ балет йондоҙҙары - З. Насретдинова, Х. Сафиуллин, Г. Сөләймәнова, Ф. Саттаров һәм башҡалар белем ала...



### Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр

**Әммә үҙ уҡыусыларының Өфөгә ҡайтып эш башлауын күрергә яҙмай, ахры, уға?**

- Эйе, Мәскәүгә ҡабул ителгән йәштәрҙән иң һәләтлеләре 1938 йылда Өфөгә ҡайта. Улар көсө менән 1938 йылдың 14 декабрендә Башҡорт дәүләт опера театры асыла. Ә шул уҡ йылдың 10 июлендә Ғәзиз Сәлих улы, Зәки Вәлидизең көрәштәше булғаны һәм "опера театрын асыуҙы тотҡарлағаны"(!) өсөн үлем язаһына тарттырыла. Ул көндә барлығы 42 кеше атып үлтерелә. Улар араһында - билдәле сәнғәт эшмәкәрҙәре, яҙыусылар, партия һәм дәүләт хеҙмәткәрҙәре, бер һүҙ менән әйткәндә, милләтебеҙҙең йөҙөк ҡашы, иң аҫыл улдары юҡ ителә.

Ғәзиз Сәлих улы башҡорт музыка сәнғәтенә бағышланған тәүге баҫма авторы ла. "Башҡорт совет музыкаһы өсөн көрәш юлында" тип аталған китап 1933 йылда донъя күрә. Авторын ҡулға алғандан һуң был китапты барлыҡ китапханаларҙан юҡҡа сығаралар. Уның әҫәрҙәрен концерттарҙа һәм радионан башҡарыу тыйыла, пластинкалары юҡ ителә; хатта фотоларын һаҡлау ҙа енәйәт иҫәпләнә. Ҡаҙандағы Сәйҙәшев музейында шундай фотоны күргәнем бар: билдәле кешеләр теҙелешеп ултыра, тик береһенең - Әлмөхәмәтовтың ғына йөҙөнә ҡара яғылған! Был фото ауыр, тетрәткес тәьҫир ҡалдыра...

Әлмөхәмәтовты Башҡортостанда филармонияға ла нигеҙ һалыусы итеп беләбеҙ. Әле 1936 йылда ул беренсе концерт бригадаһын төҙөп, ауыл-ҡалаларҙа сығыш яһап йөрөгән. Уның бригадаһында йырсы Диана Нурмөхәмәтова, бейеүсе Заһиҙә Бәхтийәрова, мандолинасы Исмәғил Иләлов, пианистка Ковалевская була. Программаның төп артисы - әлбиттә, Ғәзиз Сәлих улы үҙе. Бригада пианино тейәп, йөк машинаһында сәйәхәт итә. Кистәрен, машинаның борттарын асып, сәхнәгә әйләндерәләр. Был бригада, ғәмәлдә, филармонияның нигеҙе, уның башланғысы була!

Ләкин үҙенең төп эше, төп маҡсаты итеп ул музыкаль театр һәм милли опера сәнғәтен төҙөүҙе ҡуя. Милли мәҙәниәт институтында эшләгән ваҡытта уҡ үҙенең арҡадаштары - И.Салтыков, С.Ғәбәши, М.Вәлиевтар менән опералар ижад итеү тураһында ҙур пландар ҡора, эшкә күренекле яҙыусыларҙы йәлеп итә. Ошо хыялын бойомға ашырыу өсөн Ғәзиз Сәлих улы бар көсөн биреп эшләй... Һәм, ғәмәлдә, ғүмере лә ошо хыялы өсөн ҡыйыла бит!

### Маңҡорт булмайыҡ!

**Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемен биреү - ғәҙеллекте тергеҙеү акты булыр ине, тиһегеҙме?**

- Эйе, театр, һис шикһеҙ, уның исемен йөрөтөргә тейеш! Ғәзиз Әлмөхәмәтов 1957 йылда реабилитациялана. Ләкин уға тағылған "халыҡ дошманы" тигән мөһөрҙөң шауҡымы бик тәрән тамыр ебәреп өлгөрә. Был ҡалыпты, был тимер ҡоршауҙы емереү анһаттан түгел. Һөҙөмтәлә Әлмөхәмәтов кеүек сәнғәт эшмәкәрҙәре хаҡында халыҡ бик әҙ белә, шул иҫәптән - беҙҙең етәкселәр ҙә. Бында, әлбиттә, уларҙың ғәйебе юҡ. Мәктәптәрҙә, юғары уҡыу йорттарында тейешле белем алмаһа, кеше уны ҡайҙан белһен? Үҙ тарихын һәр кем бала сағынан, кесе мәктәптән уҡ өйрәнеп үҫергә тейеш түгелме ни? Мин, мәҫәлән, хатта махсус уҡыу йорто - сәнғәт институтын тамамлаған сағымда ла Әлмөхәмәтовтар быуыны хаҡында бары өҫтән-мөҫтән генә беләм ине. Европа һәм рус музыка сәнғәтен бик юғары кимәлдә уҡыттылар, бер һүҙем дә юҡ. Ә бына башҡорт сәнғәтен өйрәнеү эше, күрәһең, институт етәкселәрен бөтөнләй ҡыҙыҡһындырмағандыр.

Опера театрына Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемен биреү хаҡындағы фекеремде мин бер нисә тапҡыр матбуғатта, телевидение һәм радио тапшырыуҙарымда әйтә килдем. Театр 80 йыллығына әҙерләнгән мәлдә мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова менән дә һөйләшеү булғайны. Күптән түгел БР Композиторҙар союзы берлеге етәксеһе Ләйлә Исмәғилева, Яҙыусылар берлеге рәйесе Зәки Әлибаев, театрҙың художество етәксеһе Аҫҡар Абдразаҡов, БР Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай депутаты Рушанна Бабич менән дә әңгәмәләштем. Уларҙың был мәсьәләгә ыңғай ҡараштa булыуы мине ҡәнәғәтләндерҙе! Әлбиттә, интернет селтәрендә лә фекерҙәштәрем күп, улар ҙа ихласлап яҙалар, дәртләндерәләр... Республикабыҙҙа композиторҙың ижадын белгән, яратҡан, уны ихтирам иткән кешеләрҙең күплеге - үҙе уҡ ҙур шатлыҡ! Үҙ тарихыбыҙҙы - республикабыҙ, халҡыбыҙ тарихын, милли мәҙәниәтебеҙҙең үткәндәрен һәм Ғәзиз Әлмөхәмәтов кеүек шәхестәребеҙҙе белергә һәм улар хаҡында мөмкин тиклем күберәк киләсәк быуындарға һөйләргә, яҙырға, оран һалырға тейешбеҙ. Был - беҙҙең мөҡәддәс бурысыбыҙ.

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ИҢ МЫЖЫҠ БАЛА...

■ Халыҡ араһында күптән ир-ат ҡартайғансы бала булып ҡала, тигән фекер йәшәй. Мәҫәлән, көслө заттың ҡайһы берҙәре ғаилә ҡорғас та ҡатынын яҡлаусы һәм һаҡлаусы түгел, ә мыжыҡ бала булып ҡалыуҙы хуп күрә, ҡайһылары ҡорал, машина кеүек "ир-егет уйынсыҡтары"н йыя. Испания тикшеренеүселәре көслө затта тағы ла бер бала сифаты тапҡан. Билдәле булыуынса, оло кешеләр тиҙерәк асыуын онота, ә балалар оҙағыраҡ үпкәләп йөрөй. Ғалимдар әйтеүенсә, ир-ат та балалар кеүек, кешене ниндәйҙер ғәйебе өсөн оҙағыраҡ ғәфү итмәй икән. Етмәһә, көслө зат йышыраҡ ғәйепте үҙендә түгел, ә башҡаларҙан күрә.

■ Төнөн эшләргә яратыусылар һәм хеҙмәт урындарында тәүлектең ҡараңғы өлөшөндә эшләргә мәжбүр булыусылар ҙа йышыраҡ һимеҙлек менән яфалана икән. АҠШ-ның Эванстондағы Төньяҡ-көнбайыш университеты ғалимдары быны эксперимент ярҙамында тикшереп ҡарағандан һуң, шундай һығымтаға килгән: тәбиғәт тарафынан ял итеү өсөн тәғәйенләнгән ваҡытта эшләү һәм ашау организмға кире йоғонто яһай. Һеҙөмтәлә ул артыҡ калорияларҙы яндырып өлгөрмәй һәм кеше яйлап һимерә башлай.

■ Американың Миннесота университеты тикшеренеүселәре күршеләр менән татыу йәшәргә саҡыра. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан алты мең оло йәштәге кешене тикшереп, улар шундай һығымтаға килгән: оло йәштә бар кеше лә баш мейеһендә ҡан әйләнеше боҙолоуы менән сирләү ихтимал, әммә кем күрше-тирәһе менән яҡшы мөнәсәбәттә була, улар инсульттан тиҙерәк һауыға.

■ Ауырлы саҡта дөрөҫ туҡланмаған әсәйҙәрҙең балалары артыҡ ауырлыҡ менән йышыраҡ яфалана. Великобританияның Саутгемптон университеты ғалимдары әйтеүенсә, был осраҡта баланың организмында эпигенетик үҙгәрештәр барлыҡҡа килә: май алмашыныуын яйлаусы гендарҙың әүҙемлеге юғала. Бында әсәнең үҙенең тән ауырлығы күпме булыуы мөһим түгел, ябыҡ буйлы, әммә дөрөҫ туҡланмаған ҡатындың сабыйына ҡарағанда дөрөҫ туҡланған тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙҙарҙың балалары һауыраҡ була. АҠШ-ның Беркли университеты табиптары был осорҙа тик экологик таҙа аҙыҡ-түлек һайларға кәңәш итә. Баҡтиһәң, ауырлы ҡатын пестицидтар, бигерәк тә органофосфат ашламалар менән эшкәртелгән йәшелсә һәм емешләкте йыш ашаһа, баланың интеллектуаль кимәле тиҫтерҙәренә ҡарағанда түбәнерәк булыуы ихтимал.

■ Дүшәмбе һеҙҙең өсөн ауыр көнмө? Улай булһа, аҙнаның һуңғы эш көнөн һәм ял көндәрен дөрөҫ үткәрегеҙ. Вирджиния штатының Рочестер университеты психологтары әйтеүенсә, ял көндәрендә кешеләр йышыраҡ ҡыуана һәм һиррегерәк ауырый икән. Белгестәр аңлатыуынса, ял иткәндә кеше үҙен иркенерәк, тынысыраҡ тота, яҡындары менән аралашыу ҙа яҡшы тойғолар кисерергә ярҙам итә. Үҙегеҙҙе тынларға өйрәнегеҙ һәм күңелегеҙгә яткан эштәрҙе генә эшләгеҙ, тип кәңәш итә психологтар. Шул саҡта эш аҙнаһы ауыр булып тойолмаясаҡ, эшкә һәләттелек тә күтәреләсәк. Ысынлап та, әгәр ҙә эш тураһындағы уйҙарҙан йәкшәмбе үк кәйефегеҙ боҙола икән, былай эштең һеҙгә кәрәкме, юҡмы икәнлеге тураһында уйлана башларға ла кәрәк.

ИР-АЗАМАТ

**Антропология, генетика, социология, психология кеүек фән өлкәләрендә ир-егеттәрҙең үҙенсәлектәре тураһында арлы-бирле тикшеренеүҙәр булған хәлдә лә, әлегә тиклем ир асылын асырҙай ғилми теория яҙылмаған. Беҙ, ир-ат, тикшеренеү объекты булараҡ, үгәйһетелгәнбеҙ инде. Ана бит, шул уҡ психология фәнендә "Ҡатын-ҡыҙ психологияһы" тигән оло бер йүнәлеш була тороп, ирҙәр тураһында - ләм-мим! Ҡәҙимге йәшәйешебеҙҙә ваҡыты-ваҡыты менән ирҙәрҙең булмышы, холоҡ-фиғеле, яҡшы йә яман ғәҙәттәре тураһында зыҡ ҡубып бәхәс ҡуптарабыҙ ҙа, "Ирҙәрҙе яҡлайыҡ, ирҙәрҙе һаҡлайыҡ!" (быныһы "прогрессив" ҡарашлы ҡатын-ҡыҙҙар ауыҙынан) тиеүҙән уҙмайбыҙ. Ә быны ошо хаҡта етдирәк уйланһаң, йәмғиәтебеҙҙә ирҙәр проблемаһының ҡырҡыулаша барыуы күҙәтелә. Быны бөгөн бер кем дә инҡар итмәҫ. Ысынлап та, үткән замандарҙа йәшәгән ир-ат менән бөгөнгөләре араһында айырма бармы, хәҙерге ирҙәргә "феминизация", йәғни ҡатынлашыу янамаймы, малайҙарҙы ҡыҙҙар менән бергә һәм бер үк төрлө шарттарҙа тәрбиәләү дөрөҫмө? Ошондайыраҡ һорауҙар бөгөн күптәрҙе ҡыҙыҡһындыралыр, тип уйлайбыҙ.**

# ҠАТЫН-ҠЫҘ - ИР АСЫЛЫНАН,

## ир заты ла үҙ асылын ҡатын-ҡыҙ аша ғына таба ала



### Тәү ир - Әҙәмдең бар булғаны

Әйҙәгеҙ, һүҙебеҙҙе баштан, йәғни донъя яралған тәү дәүерҙәрҙән башлап ебәрәйек. Был тураһағы мәғлүмәт беҙгә иң әүәл дини тәғлимәт аша еткерелгән. Бар донъяны бар иткән Юғары Аҡыл эйәһе, йәғни Хоҙай Тәғәлә, үҙе һымағыраҡ аҡыл-зиһенле булыу мөмкинлеген биреп, ер йөҙөндә тағы ла бер йән эйәһен - Әҙәм атлы кеше затын барлыҡҡа килтерә. Библияла Илаһтың Әҙәмде ер туҙанынан үҙ һынына оҡшатып яһауы теркәлһә, Ҡөрьәндең бер сүрәһендә Аллаһы Тәғәләнең кеше тәнен балсыҡҡа бер тамсы һаҫыҡ һыу ҡушып (биохимик иретмә була инде), икенсеһендә шыйыҡ балсыҡтың асылынан яралтыуы тураһында әйтелә. Әҙәм Хоҙайҙың ерҙәге илсеһе булып, ундағы барса тере йәнгә баш рәүешендә хакимлыҡ ҡылырға тейеш була. Хаҡ Тәғәлә үҙенең бар фәрештәләренә үҙенең асыл ижад емеше булған Әҙәмгә сәжҙә ҡылырға бойора, Иблистән башҡалары ошоға риза була. Күрәһегеҙме, ир-атҡа донъя башынан бар донъяға баш булып, хаким-лидерлыҡ вазифаһы йөкмәтелгән дә баһа! "Ир - баш, ҡатын - муйын" тигәнебеҙҙе лә ошоға бәйләп, асылыбыҙҙа һалынғандан ваз кисмәйек әле, егеттәр, югиһә, байтағыбыҙ тормош атының дилбегәһен ҡатындарына тапшырып, вайымһыҙлыҡта йөрөй.

Тәү ир Әҙәмдең исемендә лә хикмәт бар икән: был антропонимдың мәғәнәһе атай тигәнде белдерә, быға "атам - адам - әҙәм" лексик теҙмәһе аша ышаныуы ҡыйын түгел. Әйткәндәй, фонетик яҡтан бер аҙ үҙгәргән хәлендә был тамыр һүҙ ер йөҙөндәге бөтә халыҡтарҙың телдәрендә ныҡынып ҡалған. Әҙәм ғәләйһиссәләм бар кешенең тәү атаһы итеп ҡабул ителгәнгә күрә, телебеҙҙә ошо һүҙ кеше төшөнсәһенең синонимы ла булып йөрөй. Тимәк, атай булыу - ир-егеттең тәү һәм төп асылы ул. Утыҙ йәштән уҙып, буйҙаҡ йөрөгән егеттәр, һеҙгә әйтәм: үҙегеҙҙең Хоҙайҙан тапшырылған бурысығыҙҙы онотмағыҙ, асылығыҙға ҡайтығыҙ!

### Башҡорт асылы - "баш ир" икән

Дини тәғлимәткә ярашлы, тәү кешенең ир заты булыуы шик тыуҙырмай. Шуныһы ҡыҙыҡ, төркиҙәргәге "ир" һүҙе тәү мәғәнәһе буйынса "ер" тамыр һүҙенә тап килеп, Ир-Әҙәм организмының ер составында булған химик элементтарҙан яһалыуына ишара. Ер йөҙөндә иң боронғо ҡәүемдәрҙән һаналған арий ҡәбиләләре атамаһы шулай уҡ мәғәнәһе буйынса "ерле, ер кешеһе" тигәнде аңлата, сөнки һинд-арий телдәрендәге "ар" һүҙе беҙҙең "ер" һүҙенә типә-тин. Боронғо арийҙарҙың хәҙер Иран тип йөрөтөлгән илдәре атамаһы Аръянам тип исемләнгәне билдәле булһа, Ирландия атамаһының да "ирҙәр иле" тигәнде аңлатыуы дөрөҫтөр. Немецтарҙың ир кешегә "һер", инглиздәрҙең "сэр" тип өндәшеүе шул уҡ нигеҙҙә барлыҡҡа килгән, тип уйларға кәрәк.

Ә бына ғәрәптәр (ар-абийҙар, йәғни "ар аталары") иһә кешене "башар" тип атайҙар, был һүҙҙең дә тәү телдәге мәғәнәһе "баш, тәү ир, тәү ер кешеһе" тигәнде белдерә. Мин шәхсән башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары үҙҙәрен тап "башар" тип атап йөрөткәндәрен ысынбарлыҡҡа тура килә, тип иҫәпләйем. Ни өсөн? Сөнки "башар - башғар - башғарт - башҡорт" лексик теҙмәһе психосемантика һәм лингвистика ҡанундарына ҡаршы килмәһә, урта быуаттарҙан ҡалған тарихи сығанаҡтарҙа халҡыбыҙҙың этнонимы башлыса шул уҡ "башгарт, басжарт, башджарт" формаларында теркәлеп ҡалдырылған. Һеҙҙең иғтибарығыҙға тәҡдим ителгән фекеребеҙ быны нимәгә ишара: башҡорт ирҙәренең асылы илырыуға баш булыуҙа, үҙҙәрен үҙ ерененә, иленең баш хужаһы итеп тойоуҙа, "Урал батыр" эпосындағылай, халҡының үлемһеҙлегенә ирешеүҙә түгелме ни? Беҙгә, башҡорт ир-егеттәренә, баш еребеҙ Уралдың боронғо баш ирҙәренең туранан-тура варистары икәнебеҙҙе онотоу яҙыҡ булыр.

### Ир һөйәктәренән яралған һөйәк, йәки ирҙе кем ир иткән

Ирҙәр проблемаһын ҡуҙғатһаҡ, үҙенән-үҙе ҡатынҡыҙ образы пәйҙә була. Уларҙы айырып ҡарау мөмкин дә түгел, сөнки ирлек асылы бар бөтөнлөгөндә ҡатынҡыҙ менән сағыштырғанда ғына асыла. Ир менән ҡатындың ҡапма-ҡаршылығы һәм берлеге бик етди тема булһа ла, бер аҙ юмор ҡушып, ирония аша һүҙ йөрөтөү ҡулай булыр.

Ирҙәр организмында ҡатын-ҡыҙҙар менән уртаҡ булған һыҙаттар бар. Мәҫәлән, бала таба алмауына ҡарамаҫтан, ир заттарының да үҫешмәгән һөт биҙҙәре бар. Ир-атҡа һис бер кәрәге теймәгән нәмәнең уның гендары хәтерендә тороп ҡалыуы үҙе бер ғәжәп. Ә был аңлағанға ишара: ир организмын конструкциялаған Илаһи зат ир кешенән дә бала таптырырға уйлаған түгелме һуң? Күрәһең, йыһандың беҙҙең төшөбөҙгә лә инмәгән бөйөк лабораторияһында "әүәләнгән" тәү кеше гермафродит (ир-ҡыҙ) булырға тейеш булып, уға үҙенән-үҙе үрсеү хәләте һалынған була. Беҙгә билдәһеҙ сәбәптәр арҡаһында был "эксперимент" уңышһыҙ тамамланғанға оҡшай: йә ир-

✓ ***Ирҙәргә тәбиғәттән бирелгән физик көс, ихтыяр ныҡлығы, уйлап табыу һәләте, төрлө техник ҡорал-ҡорамал ҡулланыуҙағы бөтмөрлөк, лидерлыҡҡа ынтылыш һ.б. сифаттар йәмғиәттең конкурентлылығын тәьмин итә алған.***



ҡыҙ затлы йән эйәһе бөтөнләйе менән бала таба алмаған, йә булмаһа, унан әҙәм рәтле бала тыумағандыр. Нисек кенә булмаһын, Юғары Зат Әҙәмдең дә үрсеүе, ишәйеү мөмкинлеген булдырыу маҡсатында, иш янына ҡуш булһын, типтер инде, уға тормош юлдашы - ҡатын бүләк итә.

Тәүратта яҙылғанса, Хаҡ Тәғәлә, кешенең яңғыҙ булыуы һәйбәт түгел, тип, тәүҙә уға ярҙамсылар сифатында ҡыр йәнлектәрен, күк ҡоштарын алып килһә лә, улары кешенең үҙенә торошло ярҙамсы була алмай. Шунан һуң Аллаһ кешене бик ҡаты йоҡоға талдырып, ҡабырғаларының береһен ала ла, яра урынын, ит үрелдереп, ябып ҡуя. Ир тәненән алынған ҡабырға, биологик материал сифатында, Хоҙайға ҡатын енесле, йәғни бала табыу мөмкинлеге булған әҙәми зат конструкциялау өсөн кәрәк була. Быныһы инде ошо ҡыҙыҡ килеп сыға түгелме һуң: Әҙәмдең ҡатыны - үҙенә тәғәйен яртыһы - хәҙерге фән теленсә әйткәндә, уның үҙгәртелә биргән клоны бит! Ышанһаң - ышан, ышанмаһаң - юҡ.

Хоҙай, Әҙәмдең үҙенә торошло ярҙамсы-юлдаш буласаҡ ҡатынды уның янына алып килә. Ҡатынын күргәс, Әҙәм былай ти: "Быны ул, минең һөйәктәремдән яралған һөйәк, тәнемдән алынған тән; ул ҡатын тип аталыр, сөнки иренән алынған". Әле бәйән ителгән Библия легендаларын беҙ боронғо бер әкиәт итеп ҡабул итәбеҙ. Шулай ҙа әкиәт төбөндә билдәле бер хәҡиҡәт ятыуы ла мөмкин бит. Һеҙгә әйтергә теләгәнем дә ошолор: ҡатын-ҡыҙ ҙа ир асылынан яралған, һәм ул да донъя башынан бирле иренә, йәғни үҙ асылына тартылып йәшәй. Ә бына ир заты үҙенең ир асылын тик ҡатын-ҡыҙ аша ғына таба алыуын кешелек тарихы күптән иҫбатлаған инде.

### Әкиәттәгесә әйткәндә...

Башлаған һүҙебеҙҙе дауам итеп, әкиәтебеҙгә кире ҡайтайыҡ. Аллалар кеүек үлемһеҙ итеп яратылған Әҙәм, ожмах баҡсаһын ҡарап, ерҙә хакимлыҡ ҡылып, ҡатыны Һауа менән мәңге бергә йәшәргә тейеш була. Әммә ҡатын-ҡыҙ затына артыҡ ҡыҙыҡһыныусанлыҡ, тиҙ генә теләһә нимәгә ышаныу барыу, етмәһә, үҙһүҙлелек баштан уҡ хас булған, күрәһең. Хәйләкәр йыландың өгөтөнә ышанған бер ҡатлы Әҙәм ҡатыны Аллаһ тыйған, изгелек менән яуызлыҡ асылын аңлау мөмкинлеген биргән ожмах ағасының емешен үҙе ашауы етмәгән, ирен дә ошоға күндерә алған. Шулай итеп, Хоҙай һүҙен тотмаған Әҙәм менән Һауа ожмах баҡсаһынан ҡыуыла. Ҡатыны һүҙенә алдырғап, Хоҙай Тәғәләнең тыйғанын онотҡан Әҙәм үҙ язаһын ала. Әүәл үлемһеҙ булған кешегә Илаһ: "Һин туҙан инең, туҙанға әйләнер, ергә инерһең", - ти. "Ирҙе ир иткән дә, ер иткән дә ҡатын" тигәндең тәү асылы шулдыр, күрәһең.

Ошо хәлдәр булғандырмы-юҡмы, әммә ир затына улар нәсихәт вә ғибрәт итеп ҡалдырылғандыр: ир асылы - биргән һүҙендә ныҡ тотоуҙа, тоғролоғонда хыянат итмәүҙәлер. Кинәйәһе лә юҡ түгел - ҡатын-ҡыҙҙың һәр әйткәненә ышанһаң, күрмәгәнеңде лә күрерһең.

Шулай ҙа, бер таяҡтың ике осо тигәндәй, Әҙәм менән Һауа балалары изгелекте яуызлыҡтан айыра ала башлау кимәленә күтәрелгәс кенә кешелек тарихы башланған, тип раҫларға булалыр. Библияла кешеләр йәмғиәтенең йәшәү рәүеше улар ҡылған тәү гонаһ өсөн бирелгән яза итеп иҫәпләнгән хәлдә лә, тап ошо архаик дәүерҙәрҙә әҙәми заттар өсөн йәшәйеш мәғәнәһе яңы ғына асыла башлаған, тип уйларға ла ерлек бар. Ир-атҡа ғүмере буйы тир түгеп, ғаиләһен ҡарарға етерлек мал табып, ил-йортон дошмандан ҡурсаларға яҙһа, ҡатын-ҡыҙға һыҙланып балалар табып, уларҙы үҫә-үҫкәнсе бағып, иренә буйһоноп, уны тәрбиәләп йәшәү насип булған.

## Тормош бөтөнлөгө - ир һәм ҡатын берлегендә

Генетика мәғлүмәттәренә ярашлы, баланың малай йәиһә ҡыҙ булып яралыуы енес билдәләүсе парлы хромосомалар айырымлығы аша аңлатыла. XY тип аталған хромосомаларҙа ир кешенең енес коды яҙылһа, ҡатын-ҡыҙҙың генетик үҙенсәлектәре XX хромосомаларында программалланған. Тыуасаҡ баланың дөйөм генетик коды, йәғни уның организмы тураһындағы барлыҡ мәғлүмәт 23 парлы хромосома аша бирелеп, бер яртыһы - әсәнән, икенсеһе атанан була. Тимәк, ир ир булһа ла, уның булмышында аҙмы-күпме ҡатын-ҡыҙға хас сифаттар ҙа бар икән. Шулай уҡ ҡатын-ҡыҙ өсөн, генетик килеп сығышына ярашлы, ир йәне тойған-кисергән бөтөнләйгә ят түгелдер. Бәлки, тап бына шул ике яҡлылыҡ арҡаһында ҡайһы бер ирҙәрҙә ҡатын-ҡыҙ сифаттары үтә артып китеп, улар үҙҙәрен ҡатын затлы итеп тоя башлайҙыр. Хәҙерге заманда үҙҙәрен тик ирҙәрсә тоторға ынтылған ҡатындар ҙа күбәйеп барғанға оҡшай.

Шулай ҙа ирҙең - ир, ҡатындың ҡатын булып ҡалыуы хәйерлерәк. Ирҙәргә тәбиғәттән бирелгән физик көс, ихтыяр ныҡлығы, уйлап табыу һәләте, төрлө техник ҡорал-ҡорамал ҡулланыуҙағы бөтмөрлөк, лидерлыҡҡа ынтылыш һ.б. сифаттар донъя башынан бирле тегеләй йәки был ырыу-ҡәбиләнең, тотош йәмғиәттең конкурентлылығын тәьмин итә алған. Бәлки, ирҙәрҙең ошондай сифаттары булмаһа, кешеләр динозаврҙар һымаҡ үлеп бөткән булыр ине.

Ирҙәрҙе маҡтай башлаһаң, ҡатын-ҡыҙ: "Тәүҙә матриархат булған бит, тимәк, тап беҙҙең арҡала тормош алға киткән", - тип ир-егеттең баһаһын арзанайтырға әҙер генә тора. Матриархаттың асылы башлыса бер әсәнән таралып киткән ырыуҙаштарҙың ҡан-ҡәрҙәшлеген билдәләүгә ҡайтып ҡала инде. Ул архаик замандарҙа ла ҡатын-ҡыҙ усаҡ тирәһендә булашһа, бала баҡһа, ир-ат тир түгеп һунар иткән, мал тапҡан, йыртҡыс үә дошмандан йортон ҡурсалаған, яу сапҡан.

Ырыу-ҡәбиләләрҙә нығынған гөрөф-ғәҙәттәр, йолалар буйынса ла ирҙәргә ир йөгө, ҡатын-ҡыҙға уның тәбиғәтенә ярашлыһы йөкмәтелгән. Белеүебеҙсә, яугирлыҡ - ир-ат бурысы. Кешелек тарихын һуғыштар тарихы, тип атайҙар, быны ирҙәрҙең һуғыш тарихы тип нарыҡлау дөрөҫ булыр ине. Яу сабып, ирҙәр дан да ҡаҙанған, күпләп ҡырылған да. Яҙылмаған һуғыш ҡанундарына ярашлы, бала-сағаны, ҡыҙ-ҡырҡынды үлтереү тыйылған. Бәлки, шуның өсөн дә, малайҙарҙың күберәк тыуыуына ҡарамаҫтан, ҡатын-ҡыҙҙар ирҙәргә ҡарағанда бөтә замандарҙа ла күберәк булған. Бындай ситуация байтаҡ халыҡтарҙа күп ҡатынлылыҡҡа юл асҡан. Христиан динен тотҡан халыҡтарҙа күп ҡатынлылыҡ тыйылһа, Ислам дине хәҙергә тиклем ирҙәргә ошондай хоҡуҡ бирә. Был, дөйөм алғанда, йәмғиәт өсөн файҙалы булған тиергә ерлек бар. Шулай булғас, ир-егет тәбиғәтенә хас дон-жуанлыҡты һәр осраҡта ла аҙғынлыҡ һөҙөмтәһе итеп иҫәпләмәйек әле, йәмәғәт. Ир-аттың хисле булыуы уларҙың ҡатын-ҡыҙға ҡарата булған тойғолар диапазонының киң булыуынан да киләлер.

Ҡатын-ҡыҙҙар булмаһа, ир асылы тураһында фекер сурытып тороуҙың бер кәрәге булмаҫ ине. Ир менән ҡатын берлеге булмаһа, көткән донъяларыбыҙ ҙа ярты-йорто булып тойола. Ир менән ҡатындың тура килешлеге, енестәр гармонияһы барыбыҙ өсөн дә тормош ҡануны булһа, ғаилә усаҡтарыбыҙ һүнмәҫ ул.

Шулай итеп, ир асылын тәүҙә аҫыл ҡатын-ҡыҙ асһа (ул уны таба ла, үҫтерә лә, тәрбиәләй ҙә), ир кеше үҙ асылын ғаиләһендә, ҡылған гәмәлдәрендә, ил-йортона хеҙмәт итеүҙә мотлаҡ табыр. Таба күрһен!

**Вәли МИҢЛӘХМӘТОВ.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

### 9-сы идея: Юл төҙөүсеме, әллә стеналар һалыусымы?

Һин үҙеңде юл төҙөүсе йәки стеналар һалыусы итеп күҙ алдына килтерәһеңме? Һәр беребеҙ ғүмере буйына йә юл, йә стеналар төҙөй. Һин уйыңдан ғына юлдар һалып, улар ярҙамында башҡа кешеләр менән осрашып һөйләшәһеңме? Әллә уйыңдан ғына башҡаларҙан үҙеңде айырып торған стеналар күтәрәһеңме? Миңә ҡалһа, бындай стена ҡороуға киткән бөтә тырышлығың һәм материалың - ул көсөңдө, хеҙмәтеңде һәм материалыңды бушҡа ғына сарыф итеү, сөнки был стеналар бер ваҡытта ла ныҡ булмаясаҡ, емерелеп төшәсәк.

Хәҡиҡәт шуға ҡайтып ҡала: беҙ бөтә кешелек донъяһы менән рухи берлектә яралған Илаһи затбыҙ, һәм башҡа кешеләрҙән айырылыу өсөн күтәрелгән сибек кенә стеналарыбыҙ оҙаҡҡа сыҙамаясаҡ.

Юлдар менән хәл башҡаса. Һин үҙеңде кешеләр менән тоташтырыусы юлдар - көндәлек тормошоң ингән кешеләр менән ике яҡлы бәйләнеш булдырыусы күҙәтле артериялар төҙөйһөңмө? Һиндә ҡәҙимгә эшлекле бәйләнештәрҙән өҫтөн тороусы аралашыусанлыҡ һәләте бармы?

Ә "кеше хәленә инә белә торған" тын ғына бульварҙарға килгәндә? Һин йөрәктән йөрәккә юлдар, үҙ-ара аңлашыу юлдары, шатлыҡта ла, ҡайғыла ла кеше хәлен аңлау юлдары төҙөйһөңмө, үҙ-ара хеҙмәттәшлек итеүҙән рухың күтәреләме? Һөйөү һәм аңлашыу урамдары йәки тынлыҡ аллеялары төҙөйһөңмө? Уларға һүҙҙәр түшәргә кәрәкмәй. Улар "Мин беләм. Мин аңлайым. Мин һине яратам" тип өндәшкән йылмайыу, иркә ҡағылыу һәм ҡараштар япраҡтары менән түшәлгән.

Шундай урамдар һәм аллеялар төҙө, сөнки улар мәңгелеккә ҡала. Уларҙы бер нәмә лә емерә алмай.

Бөгөн күпмелер ваҡыт уйлан да хәл ит: үҙеңде яҡындарыңдан айырыу өсөн, энергия, аҡыл һәм рухи көсөңдө түгеп, стеналар төҙәргә йыйынаһыңмы, йә булмаһа бергәләп фекерләүҙең интеллектуаль артерияларын, кеше хәлен аңлауҙың киң бульварҙарын һәм рух берҙәмлек аллеяларын һаласаҡһыңмы? Нимәләр төҙәргә хәл итеп, һин үҙ тәбиғәтеңде билдәләйһең. Был һине эске донъяңа бикләүсе стеналар булыуы ихтимал, йәки сикһеҙ шатлыҡҡа сәйәхәт ҡылырға мөмкинлек биреүсе юлдар донъяһы. Нимәне һайлайһың - һинең ихтыярыңда.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

*ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ*

# ИҪКӘ ТӨШӘ ЛӘ ТОРА



**Уҡыуымды тамамлап, диплом тотоп, Өфөгә ҡайтып китер алдынан курсташым Игорек адресымды һораны. "Адресым юҡ шул, "До востребования" тип кенә яҙырһың, теләһәң", тип йылмайҙым.**

Башҡортостан, Өфө тип, исемемде, фамилиямды, атайымдың исемен яҙып биргәйнем, ул шул хәтлем аптыраны. Ситтә студенттың милләте юҡ ине бит элек, ул бары "студент" ҡына. Минең ниндәйҙер алыҫ илдән, икенсе милләттән балаһы тип тә уйламаған микән. Исемемде әйтә алмағастар, үҙемде Фая тип кенә танытҡайным. Юғиһә, Фәүзиәне Фудзияма тип әйткәндәр ҙә булды. Игорек та: "Мин һине Фая икәнһең тиһәм, ә һин ниндәйҙер Фаузия икән", - тине. Көлөштөк тә айырылыштыҡ. Илемә ҡайтып, оҙайлы командировкаларҙа йөрөй, ҙур заводтарҙа заказдар башҡара торған эшкә урынлашып, йәшәп киттем. Өфөгә ҡайтҡан һайын почтаға инеп, "До востребования" бүлегенән хат белешәм, иптәш ҡыҙҙарҙан бар, ә илай яҙып дуҫлыҡ тәҡдим иткән Игоректан хәбәр юҡ. Мине Фая тип ҡабул итеп, һуңғы мәлдә генә ят милләттән икәнемде белгәс, хистәре селпәрәмә килгәндер, тип кенә һығымта яһап, көлөп алдым. Шулай ҙа бер оҙайлы командировканан һуң почтаға инһәм, бер кешенән адресһыҙ хат килгән. Унда бер генә юл яҙылғайны: "Мин һинең алдыңда теҙләнер инем..." Йәшлек бит инде, быны кемдеңдер шаярыуы тип ҡабул иттем. Тик оҙон һәм ҡатмарлы тормош юлын үткәндә ваҡыты-ваҡыты менән шул юлдар иҫемә төшә лә тора: мин һинең алда теҙләнер инем... Был юлдарҙың эйәһе табылманы. Һуңынан бер йәш шағирҙың шиғыры ла ауаздаш булды уға:

*Ҡояшлы көн булған,*
*Һалдатҡа хат килгән.*
*Адресын да яҙған,*
*"Минән" тигән...*
*"Минән" -*
*Шундалыр бар шатлыҡ,*
*Кәрәкмәйҙер артыҡ...*

Бына тиҙҙән миңә 80 йәш тулыр (Алла бирһә, тийәйек). Ә күңелемдә шул бер һөйләмдәге һүҙҙәр ғүмерлеккә уйылып ҡалды. Инде ул һүҙҙәрҙең эйәһен белә лә алмаҫмын, тик улар йәшлек сәләме булып, бер иҫтәлек булып күңелемдә һынланды...

**Фәүзиә УСМАНОВА.**



## 24 ФЕВРАЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

4.50, 6.10 Т/с "Комиссарша". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
6.50 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.35 Часовой. [12+]
8.05 Здоровье. [16+]
9.10 Д/ф Премьера. "Люди и тигры". [16+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.20, 21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
21.00 Время.
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Х/ф "Эйфория". [16+]
2.00 На самом деле. [16+]
3.00 Про любовь. [16+]
3.45 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Х/ф "Крепкий брак". [12+]
06.50 Х/ф "Иван Васильевич меняет профессию". [6+]
08.50 Сто к одному.
09.40 Т/с "Девять жизней". [12+]
19.00 "100ЯНОВ". [12+]
20.00 Вести.
20.30 Х/ф "Герой". [12+]
23.00 Х/ф "Экипаж". [12+]
01.40 Т/с "Родина". [16+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
8.15, 5.45 Д/ф "Конная гвардия: умирает, но не сдается..." [12+]
9.00, 12.00, 14.00, 17.45, 4.45 Д/с "100 имен Башкортостана". [12+]
9.30 "Песни маленьких солдат". Концерт. [0+]
10.00, 10.30 Земляки. [12+]
11.00 Итоги недели (на рус. яз.).
11.45 Специальный репортаж. [12+]
12.30 Спектакль "Между небом и землей". [12+]
14.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.45 Детей много не бывает. [0+]
15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
16.00 "Гора новостей". [6+]
16.15, 0.00 Х/ф "Смелого пуля боится". [0+]
18.15 Ради добра. [6+]
19.00 "Призвание мое - курай". Концерт заслуженного артиста РБ Рушана Биктимирова. [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Спортивная история. [12+]
23.00, 4.15 Теге өсәү. [12+]
23.30, 3.45 Күстәнәс. [12+]
2.00 Спектакль "Матери ждут сыновей". [12+]
5.15 Историческая среда. [12+]

## 25 ФЕВРАЛЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 2.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 1.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]
11.15 Республика LIVE. [12+]
11.45 Дорожный патруль. [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 23.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Дорога к храму". [0+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 Әлләсе... [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Тайм-аут. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәнгелдәк". [0+]
20.00 "Криминальный спектр". [16+]
20.45 Хоккей. "Ак барс" /Казань/ - "Салават Юлаев" /Уфа/. КХЛ.
0.00 Х/ф "Первые на Луне". [12+]
1.45 Бәхетнамә. [12+]
2.45 Спектакль "Три аршина земли". [12+]
4.30 Теге өсәү. [12+]
5.00 "Наука 102". [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 26 ФЕВРАЛЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.45 Наедине со всеми. [16+]
4.30 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]
11.15 По сути дела... [12+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 "Аль-Фатиха". [12+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 "Апчхи". [0+]
15.30 "АйТекә!" [6+]
15.45 "Сыйырсык". [0+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Д/с "100 имен Башкортостана". [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.45 Честно говоря. [12+]
22.00 Историческая среда. [12+]
23.00 Колесо времени. [12+]
0.00 Х/ф "Караси". [16+]
2.15 Бәхетнамә. [12+]
3.00 Спектакль "Наследство". [12+]
4.45 Автограф. [12+]
5.15 Орнамент. [6+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 27 ФЕВРАЛЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.20, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.10 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера сезона. "Триггер". [16+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]
4.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Женские секреты". [16+]
23.15 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "По горячим следам". [12+]
03.40 Т/с "Сваты". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00, 16.30 Т/с "Соседи". [12+]
11.15 "Честно говоря". [12+]
12.00 "Счастливый час".
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 "Бәхетнамә".
14.30 Земляки. [12+]
14.45 Ради добра. [6+]
15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]
15.15 Бирешмә. Профи. [6+]
16.15 "Гора новостей".
18.00 Учим башкирский язык. [0+]
18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]
19.00 Вечерний телецентр.
19.45 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 "Криминальный спектр". [16+]
21.00 "Времечко".
22.00 Республика LIVE. [12+]
23.00 "Автограф". [12+]
0.00 Х/ф "Катись!" [16+]
2.30 Бәхетнамә. [12+]
3.15 Спектакль "Вишневая гора". [12+]
5.15 "Весело живем!" [12+]
5.30 Счастливый час. [12+]

## 28 ФЕВРАЛЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 2.30 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос. Дети". Новый сезон. [0+]
23.20 Вечерний Ургант. [16+]
0.15 Д/ф "Элтон Джон". [16+]
1.35 На самом деле. [16+]
3.15 Про любовь. [16+]
4.00 Наедине со всеми. [16+]
5.25 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Юморина. [16+]
23.40 Х/ф "Провинциальная Мадонна". [12+]
03.15 Х/ф "Неоконченный урок". [12+]

### БСТ

7.00 "Сәләм".
9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
9.15 Сәләм, Республика!
10.00 Д/ф "Самые крупные катастрофы". [12+]
11.15, 18.00 "Йома". [0+]
11.45 "Криминальный спектр". [16+]
12.00 Республика LIVE. [12+]
12.30, 21.00 Башкорттар. [6+]
13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).
13.30 Үткән гүмер. [12+]
14.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
14.15 "Красная кнопка". [16+]
15.00, 17.45 Интервью. [12+]
15.15 "Алтын тирмә". [0+]
16.15 "Гора новостей".
16.30 Детей много не бывает. [0+]
17.00, 6.00 Моя планета Башкортостан. [12+]
19.00 Әлләсе... [6+]
19.45 "Сәнгелдәк". [0+]
20.15 Инцидент-репортаж. [12+]
20.30 Юлдаш+. [12+]
22.00 "ВәсСәләм!" [16+]
23.00 Караоке по-башкирски. [12+]
23.30 Уфа. Живое. [12+]
0.15, 4.15 Х/ф "Черчилль". [12+]
2.00 Спектакль "Москва-Васютки". [12+]
3.15 Д/ф "Дочь Иремели". [12+]

## 29 ФЕВРАЛЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Честное слово. [12+]
11.05, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Д/ф Премьера. "Я тебя никогда не забуду". К юбилею Николая Караченцова. [12+]
16.05 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
17.45 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 Памяти Влада Листьева. [16+]
0.00 Х/ф Премьера. "Все разделяет нас". [18+]
1.50 "На самом деле". [16+]
2.45 Про любовь. [16+]
3.35 Наедине со всеми. [16+]
4.15 Д/с "Россия от края до края". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
09.30 Пятеро на одного.
10.20 Сто к одному.
11.10 "Юмор! Юмор! Юмор!!!" [16+]
13.40 Х/ф "От судьбы не зарекайся". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "От любви до ненависти". [12+]
00.50 Х/ф "Я не смогу тебя забыть". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Аль-Фатиха". [12+]
8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]
9.15 Посмотрим... [6+]
10.00 "Физра". [6+]
10.15 Преград. Net. [6+]
10.30 "Книга сказок". [0+]
10.45 "Сыйырсык". [0+]
11.00 "Апчхи". [0+]
11.15 "Байтус". [6+]
11.30 Бирешмә. Йырла. [6+]
12.00 Күстәнәс. [12+]
12.30 Автограф. [12+]
13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]
13.15 Земляки. [12+]
13.30 Хазина о хазине. [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 Колесо времени. [12+]
17.00 "Девушки Башкортостана". Концерт Иделя Нургалина. [12+]
19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]
19.45 "Сәнгелдәк". [0+]
20.00 Ради добра. [6+]
20.15 Полезные новости. [12+]
20.30 "Байык" представляет... [12+]
21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).
22.00 Караоке по-башкирски. [12+]
22.30, 1.45 Итоги недели (на баш. яз.).
23.15 "Славные сыны Родины моей". Концерт ГБУКИ РБ Сибайской государственной филармонии. [12+]
0.15, 5.00 Х/ф "По признакам совместимости". [16+]
2.30 Спектакль "Белый пароход". [12+]

## 1 МАРТА ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Комиссарша". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Часовой. [12+]
7.35 Здоровье. [16+]
8.35 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
8.55 Бокс. М. Гарсия - Д. Варгас. Прямой эфир. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.30 Д/с "Теория заговора". [16+]
14.20 Д/ф "Влад Листьев. "Зачем я сделал этот шаг?" [16+]
15.25, 18.00 Точь-в-точь. [16+]
16.25 Лыжные гонки. Кубок мира-2019-2020. Мужчины. Эстафета. Прямой эфир из Финляндии.
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Большая игра. [16+]
22.50 На самом деле. [16+]
23.50 Мужское / Женское. [16+]
0.50 "Эль Класико". "Реал Мадрид" - "Барселона". Прямой эфир из Испании.
3.00 Про любовь. [16+]
3.50 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

04.20 Х/ф "Провинциальная Мадонна". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
09.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.05 "Роковые роли". [12+]
13.10 Х/ф "Боль чужой потери". [12+]
17.50 "Ну-ка, все вместе!" [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
01.30 Х/ф "Найдёныш". [12+]

### БСТ

7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]
8.00 Новости (на баш. яз.).
8.15 "Йома". [0+]
8.45 Күстәнәс. [12+]
9.15 Моя семья. [6+]
9.45, 4.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]
10.00 "Бейе". [0+]
10.15 "АйТекә!" [6+]
10.30 "Детей много не бывает". [0+]
11.00 "Сулпылар". [0+]
11.30 "Гора новостей". [6+]
11.45 Бирешмә. Профи. [6+]
12.30 Итоги недели (на баш. яз.).
13.15 "Алтын тирмә". [0+]
14.00 "Дарю песню". [12+]
16.00 "Дорога к храму". [0+]
16.30 Историческая среда. [12+]
17.00 Творческий вечер заслуженной артистки РФ, народной артистки РБ Гузель Сулеймановой. [12+]
19.00 Полезные новости. [12+]
19.15 Лидеры региона. [12+]
19.45 Әлләсе... [6+]
20.30 Теге өсәү. [12+]
21.00, 22.30 Республика LIVE. [12+]
21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).
22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]
23.00 "Красная кнопка". [16+]
23.30 "Башкорт йыры". [12+]
0.15, 4.30 Х/ф "Пуговица". [16+]
1.45 Спектакль "Шестая жена Ивана Грозного". [12+]

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХАЛЫҠ-АРА ТУҒАН ТЕЛДӘР КӨНӨ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**7-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Тырыз. Кәримов. Катод. Дидро. Элмәк. Ченекәй. Тәү. Әйбер. Ракета. Астра. Ут. Ҡәйнә. Урҙа. Оҫта. Лағыр. Ҡан. Скат. Аҡтамыр. Аҫҡыс. Ғүмәров. Нәжәғәй.

**Вертикаль буйынса:** Тағараҡ. Дәүләтшин. Синагога. Каюр. Ҡорған. Очерк. Тирәк. Урама. Мәрәкә. Тренер. Уҡсы. Крузо. Завод. Вий. Эйә. Ҡалта. Йәйә. Екән. Кер. Әҙрәс.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Февраль - Март (Йомадиәл ахыр - Рәжәб) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (30) дүшәмбе | 6:51 | 8:21 | 13:30 | 17:08 | 18:38 | 20:08 |
| 25 (1) шишәмбе | 6:49 | 8:19 | 13:30 | 17:10 | 18:40 | 20:10 |
| 26 (2) шаршамбы | 6:46 | 8:16 | 13:30 | 17:12 | 18:42 | 20:12 |
| 27 (3) кесе йома | 6:44 | 8:14 | 13:30 | 17:14 | 18:44 | 20:14 |
| 28 (4) йома | 6:42 | 8:12 | 13:30 | 17:16 | 18:46 | 20:16 |
| 29 (5) шәмбе | 6:39 | 8:09 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |
| 1 (6) йәкшәмбе | 6:37 | 8:07 | 13:30 | 17:20 | 18:50 | 20:20 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

# ҺУНАРСЫЛАРҒА...

**Башҡортостанда һунар итеүгә ғаризаны хәҙер дәүләт хеҙмәттәре сайты аша бирергә мөмкин, тип хәбәр итә Башҡортостан Республикаһы Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы.**

Йәнлек ауларға рөхсәт алырға теләгән һунарсы хәҙер үк һылтанма буйынса электрон төрҙә тейешле ғариза бирә ала. Һунарсы электрон ғариза биргәндән һәм уны министрлыҡ хеҙмәткәре тикшергәндән һуң 30 процент ташлама менән дәүләт пошлинаһын онлайн түләү мөмкинлеге булдырыла. Дәүләт пошлинаһы күләме - 455 һум. Һунарсыларҙың иғтибары шуға йүнәлтелә: ауларға йыйынған һунарсылыҡ ресурстары һанын (урман һыуһары, ҡондоҙ, һыуыр, һуйыр, ҡор, һаҙ тауығы һәм башҡалар) электрон ғаризала күрһәтелгән телефон буйынса министрлыҡ хеҙмәткәре менән һөйләшеп килешергә кәрәк, сөнки һунарсылыҡ биләмәһе өсөн ошо йәнлектәрҙең һәр төрө буйынса аулау нормалары билдәләнә.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+
**26 февраль "Бер мәл санаторийҙа"** (Н. Ғәйетбаев), комедия. 16+
**27 февраль "Һөйәркә"** (Т. Миңнуллин), драма. 12+
**29 февраль "Әбейүшкә@түщкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 18.00 12+
**1 март Премьера! "Шәмсетдин һәм Шәмсүрә"** (Т. Ғиниәтуллин әҫәре буйынса), новелла. 14.00, 18.00 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**26 февраль "Ханума"** (А. Цагарели), музыкаль комедия. 12+
**29 февраль "Петрушка и витязь"** (О. Проклов) әкиәт. 12.00 0+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**24 февраль "Верные друзья"** (А. Хайт, А. Левенбук) 12.00, 14.00 0+
**29 февраль "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен) 12.00, 14.00 0+
**"Косолапому не спится"** (С. Алибаев) 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 февраль "Блинный weekend"** Масленица байрамы үтә 18.00 0+
**1 март "Weekend с органом"** 15.00 6+

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ошо көндәрҙә Ейәнсура районы Үрге Муйнаҡ ауылында йәшәгән ҡәҙерле кешеләребеҙҙең ғүмер байрамдары - атайыбыҙ **Зөфәр Ғилметдин улының** матур юбилейы 65 йәше һәм әсәйебеҙ **Наилә Зәйнетдин ҡыҙының** тыуған көндәре айҡанлы уларҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Киләсәк көндәрегеҙ өмөт менән тулы булып, шатлыҡ-һөйөнөстәр генә алып килһен, тормош һынауҙарына бирешмәйсә сабыр булып, һәр яңы көндө ҡыуанып ҡаршылап, әлегеләй алсаҡ йөҙлө, изге күңелле булып, оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер кисерергә яҙһын. Һеҙ булғанға күңелебеҙ бөтөн, тормошобоҙ йәмле, йәнле, һеҙҙең фатихағыҙ менән ышанысыбыҙ ныҡлы, уйҙарыбыҙ яҡты. Атай һәм әсәй, һеҙгә барыһы өсөн дә мең рәхмәтлебеҙ! Барлыҡ эшләгән изгелектәрегеҙ сауап булып ҡайтһын, һеҙгә хәйерле, иманлы бәхетле ғүмер насип итһен! Тыуған йортобоҙҙоң йәмен, ҡотон һаҡлап, һаулыҡ- сәләмәтлек менән оҙаҡ йәшәгеҙ! Һеҙ булғанға беҙ бәхетлебеҙ,ошо бәхеттән Хоҙай айырмаһын! Киләсәктә лә яҡындарығыҙҙың, туғандарығыҙҙың, дуҫтарығыҙҙың ихтирамын тойоп, ҡәҙер-хөрмәттә йәшәгеҙ!

*Сәсегеҙгә бәҫтәр ҡунһа ла,*
*Һеҙ бөгөн дә әле йәш беҙгә,*
*Бәхет-шатлыҡтарҙа, һаулыҡта,*
*Йәшәгеҙ һеҙ парлап гел бергә!*

**Иң изге теләктәр менән балаларығыҙ исеменән Тимофеева Зилә.**

* * *

Февраль айында тыуған көндәрен билдәләүселәрҙе - **Архангел районы** Архангел ауылынан Гөлшат Закирова, **Ҡырмыҫҡалы районы** Олокүл ауылынан Рәдифә Кинйәбаева, **Ейәнсура районы** Яңы Павловка ауылынан Зулиә Әлмөхәмәтова, Наҙгөл Әлмөхәмәтова, **Баймаҡ районы** Ҡолсора ауылынан Алмабикә Йомағужина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ғүмер байрамдары менән ихлас ҡотлайбыҙ! Именлек-һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

БАЙРАМ УҢАЙЫНАН



# ҺАЛДАТ БУЛЫУ...

## һәр малайҙың хыялында!

(Башы 1-се биттә).

Күптән түгел, хәрби космос көстәре составында хеҙмәт итеп ҡайтҡан яҡын туғаным Алмаз менән дә бер талай һөйләшеп алдым. Унын һөйләүе буйынса, әрмелә дөйөм белемеңә, шулай уҡ физик әҙерлеккә әле лә ҙур иғтибар бүләләр икән. Кейенеү, ашау яғына килгәндә, элеккегә (мин хеҙмәт иткән дәүергә) ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ, тип аңланым. Аш рационында көн дә тиерлек йомортҡа, һөт булыуы, хатта йыш ҡына билмән ашатыуҙары хаҡында ишеткәс, ил һаҡсыларыбыҙ өсөн ысын күңелдән шатландым. "Мин хеҙмәт иткән часта (Хабаровск крайы) "бабайлыҡ" тигән нәмә бөтөнләйгә булманы", - тине Алмаз минең сираттағы һорауыма яуап итеп. Әрмегә барғанына һис кенә лә үкенмәүе, ир-егеттәрҙең унда барып, сынығыу мәктәбе үтеү зарурлығы хаҡында ла әйтте әллә ни күп һөйләргә лә яратмаған туғаным. Хеҙмәттән алда спорт менән шөғөлләнеүе лә уға тик файҙаға ғына булған. "Күп кенә егеттәр юҡҡа ғына әрме хеҙмәтенә барыуҙы насарға һанай", - тине ул аҙаҡтан...

"Ә беҙҙең заманда..." тип башлап алып киттем мин үҙемдең йәшлек хәтирәләремде уға һөйләгәндә. Беҙ бала саҡта, үҫмер ваҡыттарҙа һалдат булғыһы килмәгән бер кемде лә хәтерләмәйем. Хатта, киреһенсә, әрмегә бармай ҡалыуҙан ҡурҡа инек. Берәй малай ниндәйҙер эш боҙһа, йә иһә, бер йомош үтәүҙә ялҡаулана башлаһа, мәктәптәге ҡайһы бер уҡытыусыларыбыҙ ҙа "һалдат була алмайһың" тип "зыйт"-ҡа тейер ине. Ата-әсәләр бәләкәйерәк малайҙарын "ялҡау булһаң, армияға алмайҙар", тип ҡурҡытҡыланылар. Ышанаһығыҙмы, юҡмы, әммә беҙҙең, малай халҡының, иң ҡурҡҡаны ана шул була торғайны. Тиҙерәк үҫеп етеп, һалдат булып, өҫкә шинель кейеп, билгә ҡайыш тағып өйгә ҡайтып инәсәгемде күҙ алдына килтереп, татлы хистәргә бирелеп киткеләгән ваҡыттарым минең дә йыш булды. Башҡа малайҙар һымаҡ уҡ, размеры күпкә ҙурыраҡ булыуына ҡарамаҫтан, ағайымдың әрменән кейеп ҡайтҡан фуражкаһын әллә ни күреп, ҡырын ғына итеп кейеп, көҙгө алдынан китмәгәнем бөгөнгөләй күҙ алдымда. Иң яратҡан фильмдарыбыҙ һуғыш, әрме тураһында булһа, уйнаған уйындарыбыҙҙың иң мауыҡтырғысы ла - һуғыш уйыны. Ғәҙәттә, "аҡтар- ҡыҙылдар" булып бүленешеп уйнарға яраттыҡ. Шулай уҡ бер яҡ "советский", ә икенселәр "немец" булып та мөкиббән китеп уйнағандарыбыҙ иҫтә ҡалған.

Ә ауылға берәй "настоящный һалдат" әрменән ҡайтып төшә икән, барса малайҙар "һалдат күрергә" шул өйгә йыйыла. "Стройҙа йөрөй торғайныңмы, ағай?" "Ысын автоматтан ата торғайныңмы?" "Поста тороу ҡурҡыныс түгелме?" тигән һымағыраҡ һорауҙар менән йөҙәтәбеҙ һалдатты. Ысын автоматтан атҡан, часовой булып торған шундай "ыздарауай һалдат" ағай менән һөйләшеү үҙе бер оло бәхет ине. Беҙҙең инаныуыбыҙса, совет һалдаты - донъяла иң көслөһө, иң яҡшы кеше. Ағаһынан бүләккә фуражка, ҡайыш йә иһә берәй значок алған һалдат ҡустыһы, әлбиттә, малайҙар араһында иң бәхетле...

Бер аҙ үҫә төшөп (һигеҙенсе синыфтарҙа), тәүге медицина комиссияһына хәрби комиссариатҡа саҡырылғас, синыфташ ҡыҙҙарыбыҙ алдында әллә кем булып, ҡаҡайып йөрөгәнебеҙ иҫемдә. Тикшереүсе табиптар берәй сир таба ҡалһа, үҫмер өсөн был - оло ҡайғы! Ауырыу булғаны өсөн түгел, ә "әрмегә алмай ҡуйырҙар" тигән уй иң тәүҙә борсой ине...

Хәрби табип булып, оҙайлы хеҙмәт башлағас та йыш ҡына төрлө өлкә һәм республикаларҙың хәрби комиссариаттарына командировкаға йөрөй торғайным. Һалдат алырға. Бәғзе бер армияға саҡырылыусыны һаулығы буйынса ҡалдырып китеүе үҙе бер проблемаға әйләнә ине. Күптәр нисек кенә булһа ла диагнозын "еңеләйттереп", йә иһә бөтөнләйгә юйҙырып, әрме сафына эләгергә тырыша ине. Үҙҙәренең сирҙәрен йәшереп маташҡандар менән дә танышырға тура килгеләне (айырыуса яҡташтарыбыҙ араһында). Бәлки, был хәлдәргә ошо мәҡәләне уҡып ултырыусы бәғзе йәштәрҙең ышанып етмәүе лә мөмкин. Әммә был - ысынбарлыҡ. Сираттағы бер ялыма ҡайтҡанда Өфөнөң әрмегә йыйыу пунктына инеп сыҡмаҡ булдым. Әрмегә саҡырылыусылар араһында күрше ауылдан Булат исемле ҡоҙа тейеш егетте танып ҡалдым. Иңенә рюкзак аҫҡан, кәйефе төшөнкө. "Ни булды, ҡоҙа, нишләп кәйефең күренмәй, ҡайҙа тәғәйенләнеләр?" - тим уға. "Өйгә ҡайтарып ебәрергә итәләр. Медкомиссияла ҡолаҡта ауырыу таптылар..." - ти егет бик күңелһеҙ генә. - Ауылда иптәштәр, ҡыҙҙар оҙатып ҡалғайны. Улар алдында ла уңайһыҙ..." Кәрәк кешеләр менән инеп һөйләшеп ҡарауымды үтенде: "Һине, офицер кешене, моғайын, тыңларҙар..." Отпуск мәле булһа ла, хәрби комиссариатҡа инеп һөйләштем: "...Яҡын ғына туғаным. Хеҙмәт иткеһе килә. Ниндәй төр ғәскәр составына булһа ла риза", - тинем. "Ә һеҙ үҙегеҙ ҡайҙа хеҙмәт итеп йөрөйһөгөҙ?" - тип һорай начальник. "Нижний Тагилда, Стратегик ракета частарының береһендә". "Улай икән... Ул егетте һеҙҙең үҙегеҙгә туп-тура ебәрһәм, нисек ҡарайһығыҙ?" "Рәхмәт, иптәш подполковник..." Яҡындағы часта бер ниндәй проблемаһыҙ, яҡшы ғына хеҙмәт итеп, ике йылдан һуң өйөнә ҡайтып китте Булат.

Ата-бабаларыбыҙ борон-борондан ил именлеген һаҡлауҙы үҙенең изге бурысы тип һанаған. Егеттәребеҙ, һалдат һөнәрен үҙләштереп, һәммәһе лә ғүмере буйы "потенциаль ил һаҡлаусы" булып ҡала. "Запаста" тип әйтәләр улар тураһында. Илебеҙҙә улар - күп меңләгән. Кемдәрҙер - танкист, икенселәр - артиллерист, өсөнсөләр - моряк булып, Ватан саҡырыуына һәр саҡ әҙер булып, тыныс тормош ҡороп йәшәп ята улар. Элегерәк ошондай бер йыр ҙа йырлай торғайнылар: "Эй, бригадир мин үҙем, комбайнер һәм тракторист. Кәрәк икән, булам танкист, ял иткәндә - гармонист..." Бөгөнгө көндә хәрби хеҙмәт ауырлыҡтарын татып, илебеҙ һағында торған, шулай уҡ элегерәк үҙ бурыстарын үтәп ҡайтҡан ир-егеттәребеҙҙең һәммәһен дә байрам менән ҡотлайым, Аллаһы Тәғәләнән уларға ныҡлы иман, һаулыҡ, бәхет, һәр эштәрендә уңышлыҡтар насип итеүен һорайым.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы медицина подполковнигы.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БУТҠА НИ ҘӘ...

**Ғоманлы икән, хан урынын ҡаплаһын,** тип йөклө ҡатынға ҡарата әйтелә, киң кейем кейһен, эсен яман күҙҙән һаҡлаһын, юғиһә, зәғиф бала тыуыр, тип иҫкәртер инеләр беҙҙә.

**Ауыҙы һалыулы** - тәмле ризыҡ бешереп ашарға йөрөгәндә генә һис көтөлмәгән бер кеше килеп инеп, бергә ашағанда әйтелгән һүҙ.

**Суҡмар танау** - еҫкәнеп, эҙләнеп, ҡыҫтырылып, теңкә короткан әҙәм шулай атала ине. Беҙҙең урамда бер инәй шулай булды, ҡушаматы ла ошо уҡ ине.

**Ауыҙы һалбыраған** - ирешеп, еңмешләнеп, еңә алмайынса үсегеп йөрөүҙе әйтәләр ине.

**Бешекһеҙ** - һис эш рәте белмәгән, ватып-емереп, түгеп-сәсеп эшләүсе шулай аталды.

**Салғыйына уралған** - кейенеүҙең рәтен белмәгән, кем нимә бирә, шуны кейгән, итәге ергә һөйрәлгән кешеләргә ҡарата әйтелә ине. Ундай кеше хатта итәгенә баҫып ҡолап та китә.

**Бутҡа ни ҙә, турта ни** - аш-һыу бешерә белмәгән, бөтә аҙыҡты бер ҡаҙанға һалып бешергән ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтәләр ине. Бешергәне ни бутҡа, ни турта булмай инде, ашағыһыҙ була.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**
**Әбйәлил районы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҠӘНӘҒӘТТЕҢ КҮҢЕЛЕ КИҢ...

## тарлыҡта ла тарыҡмай

Үҙемдең киленем яман, ҡыҙымдың кәйнәһе яман.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартайыу сәнғәте шунда: йәштәргә кәртә түгел, таяныс бул; дошманы түгел, уҡытыусыһы бул; вайымһыҙ түгел, аңлаусы бул.

**(А. Моруа).**

Аҡыллы кеше ғүмеренең икенсе өлөшөн беренсе өлөшөндәге яңылыш ғәҙәттәр һәм хата ҡараштар менән көрәшеүгә арнай.

**(Д. Свифт).**

Әгәр кешеләрҙең бар теләктәре лә тормошҡа ашһа, Ер шары ысын тамуҡҡа әйләнер ине.

**(П. Буаст).**

Насар идара ителгән ил өсөн беренсе ҡотолоу сараһы - инфляция, икенсеһе - һуғыш. Икеһе лә ваҡытлыса сәскә атыу һәм ваҡытлыса һәләкәт алып килә.

**(Э. Хемингуэй).**

Халыҡтар зарланыуҙан туҡтаһа, фекерләүҙән дә туҡтай.

**(Наполеон).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ кисен миңә дуҫым шылтыратты. Тәүге һорауы шул булды: "Хәлдәрең нисек?" Мин уйлап та тормаҫтан: "Эс боша", - тип әйтеп һалдым. Дуҫым: "Теләйһеңме, мин хәҙер һиңә киләм һәм һөйләшербеҙ", - тине. Мин "Кил", тинем, һәм ул ун биш минуттан минең өйҙә ине инде. Дуҫым менән төнө буйы һөйләшеп ултырҙыҡ, мин уға үҙемдең аһ-зарымды түктем. Ысынлап та, проблемаларым байтаҡ йыйылып киткәйне. Дуҫым мине тыңланы, сабыр ғына кәңәштәрен бирҙе, ниндәй проблеманы нисегерәк хәл итеү юлдарын өйрәтте. Миңә еңел булып ҡалды. Шунан дуҫым эшкә китергә йыйына башланы. Миңә уңайһыҙ булып китте,"Ниңә һин үҙеңдең эшкә барырға тейешлегең тураһында әйтмәнең, мин һине төнө буйы үҙемдең хәбәрем менән йонсоттом", - тинем дуҫыма. Дуҫым йылмайҙы һәм: "Дуҫтар ни өсөн кәрәк һуң!" - тине. Дуҫымды машинаға оҙатҡанда: "Ә һин миңә кисен ниңә шылтыратҡайның һуң?"- тип һорарға баш етте. "Мин врачта булғайным һәм ул миңә бик ҡурҡыныс диагноз ҡуйҙы", - тине дуҫым. - Ләкин беҙ был хаҡта аҙаҡ һөйләшербеҙ".**

**Мин ошо осрашыуҙан һуң байтаҡ уйланып йөрөнөм. Был хәл миңә ныҡлы һабаҡ булды. Мин хәҙер үҙ проблемаларымды шаштырыуҙан туҡтап, яҡшы хәбәрҙәр менән ләззәтләнәм. Үҙем яратҡан кешеләр, дуҫтарым менән аралашҡанда аһ-зар һөйләп түгел, ә ваҡытты файҙалыраҡ итеп үткәрергә тырышам..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99, 246-03-24** |
| **Матбуғат таратыу** | **246-03-23** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
21 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**
Тиражы - 4007
Заказ - 141/02